*Мосолман үҙ вәғәҙәһенә тоғро. Вәғәҙә биреү - ул буш һүҙ түгел, биргәнһең икән, үтәргә кәрәк, сөнки вәғәҙә яуаплылыҡ менән бәйле. Һүҙ биреп тә үтәмәү Аллаһы Тәғәләнең нәфрәтен тыуҙыра, Ул мосолмандарының былай түбәнселеккә төшөүен теләмәй. Хәҙистәрҙең береһендә: "Ике йөҙлө кеше өс билдә менән айырылып тора: әгәр нимәлер һөйләй икән - алдай, вәғәҙә бирһә - уны боҙа, әгәр уға нимәлер ышанып тапшырһалар - мәкерлек эшләй", - тиелә.*

("Мосолман әҙәбе" китабынан).


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

31 МАЙ - 6 ИЮНЬ (ҺАБАНАЙ- ҺӨТАЙ)

2008 ЙЫЛ

N 22 (283)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Китаптан ҙур бүләк юҡ**



2

**Ауыл хужалығы...**

йәшәү рәүешенә әйләнһен



5

**Суфыйсылыҡ һуҡмаҡтары,**

йәки батырлыҡҡа илтер рухилыҡ



8-9

**Көй тыңла ла...**

дауалан һәм рухыңды нығыт



12

**ТВ программа**

14-15


КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ИҪӘНГИЛДЕ АҒИНӘЙЕ...

## Зәйнулла ишан ҡомартҡыһын һаҡлай



**Хәйбулла районының Иҫәнгилде ауылында йәшәүсе, быйыл 80 йәшен тултырыусы Бөртөкбикә Ғиниәтулла ҡыҙы Ғәлина менән осрашыуға яңыраҡ Баймаҡ үҙәкләштерелгән район китапханаһы һәм райондың "Ағинәйҙәр" клубы берлектә үткәргән "Өләсәй, әсәй, ейәнсәр"тигән сара-конкурс сәбәпсе булды. Ошо байрамда Баймаҡ районының Әбделкәрим ауылында йәшәүсе ҡыҙы һәм ейәнсәре менән ҡатнашыусы Бөртөкбикә инәй хәтеребеҙҙә ныҡ һаҡланып ҡалды. Ул үҙенең ейәнсәренә Зәйнулла ишан Рәсүлевтың олатаһына бүләк иткән хаж таяғын тоттороп, залдағыларға мөнәжәт уҡыны, вәғәз әйтте, үҙенсәлекле итеп сәңгелдәк йырын көйләп ишеттерҙе. Был хаҡта беҙ гәзитебеҙҙең 18-се һанында яҙып сыҡҡайныҡ.**

**Башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла ишан Рәсүлевтың тормош юлына һәм эшмәкәрлегенә бәйле мәҡәләләр беҙҙең гәзиттә күп баҫыла килде. Әммә Зәйнулла ишандың ҡулы ҡағылған әйбергә бәйле был яңылыҡ беҙҙең өсөн көтөлмәгән асыш булды. Бөртөкбикә инәй менән яҡынданыраҡ аралашыр-танышыр-белешер өсөн, күп тә үтмәҫтән, Баймаҡ район китапханаһы хеҙмәткәрҙәре Сәрүәр Иҙелбаева һәм Фәриҙә Иҙрисова менән Хәйбулла районының Иҫәнгилде ауылына юлландыҡ. Инәйебеҙ беҙҙе күптән көткән ҡунаҡтары күреп, ҡыуанып ҡаршы алды. Һигеҙенсе тиҫтәне тултырыуға ҡарамаҫтан, Бөртөкбикә инәй беҙ көткәндән зирәгерәк, етеҙерәк, тарихты күп белеүсе, белгәнен матур итеп һөйләп биреүсе, кәрәк саҡта - мәрәкәсел, кәрәк саҡта кинәйәле һәм етди һүҙ атҡарыусы, аҡ яулыҡлы, аҡ тешле ағинәй булып сыҡты. Ул үҙе хаҡында беҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне. Уның үҙенсәлекле лөғәтен һаҡларға тырыштыҡ.**

### Бөртөкбикә ҡартәсәйем

Беҙ - Бөрйән ырыуы башҡорттарыбыҙ. Беҙҙең ауылға хәҙерге Баймаҡ районының Ислам ауылынан күсеп килгән кешеләр нигеҙ һалған. Ислам ауылында йәшәгән Күҫәк ҡарттың бер өйөр йылҡыһы бер мәл ялан яғына китә. Өйөрө артынан "Өйөрөм ҡайҙа туҡтаһа, шунда маҡам ҡорормон", ти ҙә, Күҫәк ҡарт үҙе лә ғаиләһе менән өйөрө артынан ҡуҙғала. Шулай итеп, улар ошо беҙҙең ауыл урынында йылҡы өйөрө туҡталып ҡалған ерҙә төпләнә. Килеүҙәренә улдары тыуа, уға Ҡунаҡкол тип исем ҡушалар. Ауылдың тәүге исеме лә Ҡунаҡкол. Ҡунаҡколдан Иҫәнгилде, Иҫәнгилденән Айытбай менән Мөхәмәҙиә тыуа. Беҙ Мөхәмәҙиәнән киткәнбеҙ. Мөхәмәҙиәнең улы - Сәғиҙулла, Сәғиҙулланың улы - минең атайым Ғиниәтулла.

(Дауамы 6-сы биттә).

ЙӘШӘГӘН, ТИ, ШӘХЕСТӘР

# ЗӘКИ ВӘЛИДИ: БӨЙӨК ШӘЙЕХТЕҢ ҺЫНАУЫ





**ХХ быуат башында йәшәгән күренекле башҡорт зыялыларынан икәүһенең исеме бөгөн бөтә донъяға билдәле: уларҙың береһе арҙаҡлы Ислам ғалимы, мәғрифәтсе һәм йәмғәт эшмәкәре, Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең Волга-Урал төбәгендәге бөйөк шәйехе Зәйнулла Рәсүлев булһа, икенсеһе - Башҡортостан автономияһы өсөн барған ҡанлы көрәштең башында торған дәүләт эшмәкәре, Көнсығыш аҡылын Көнбайыштың аналитик фекерләү ысулдары менән ҡуша алып, арҙаҡлы тарихсы-ғалим булып танылыу тапҡан Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Күрәһең, атаҡлы суфый шәйехе үҙенең мөрите Әхмәтшаһтың ун биш кенә йәшлек улының киләсәге өмөтлө булыуын башҡаларға ҡарағанда асығыраҡ тойомлағандыр. Зәйнулла ишандың тыуыуына 175 йыл тулыуҙы билдәләгән мәлдә Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр" китабының суфыйсылыҡты тасуирлаған урындарын хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итеү урынлы булыр, тип уйланыҡ.**

(Дауамы 7-се биттә).

"КИСКЕ ӨФӨ" СӘФӘР СЫҒА

# Китаптан да ҙур бүләк юҡ

Республика мәктәптәрендә сығарылыш синыф укыусылары өсөн һуңғы ҡыңғырау сыңлаған көндә Ишембай районы Ҡанаҡай урта мәктәбендә икеләтә тантана булды. Беренсеһе, әлбиттә, дүрт ҡыҙ һәм дүрт егеттең үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫыуына арналһа, икенсеһе - шул кисәлә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатовтың ҡатнашыуы ине. Ҡатнашыу ғына түгел, Зөфәр Мөхтәр улы был мәктәпкә дәреслектәр, укытыусылар өсөн методик ҡулланмалар, яҙыусыларыбыҙҙың, шағирҙарыбыҙҙың байтаҡ китаптарын да бүләк итеп алып килгәйне.

- Мәктәп ихатаһына инеп, "Газель" машинаһынан китаптар бушата башлағас, аптырап ҡалдым, - тине мәктәп директоры Әлфинур Латипова. -"Былар барыһы ла беҙгәме?" тип аптырап һорайым. Беҙгә икәне раҫланғас, шатлығымдың сиге булманы. Укытыусы һәм укыусы бала өсөн китаптан да ҙурыраҡ бүләк юк бит инде ул.


Ауылдаштары - ибрайҙар Мәрйәм апайҙы ҡотлай.


Ишембай районының Ҡанаҡай мәктәбендә.

Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең ауыл һәм мәктәп китапханаларына беренсе генә тапкыр шатлык бүләк итеүе түгел был. Зөфәр Мөхтәр улы былтырҙан алып райондың тағы биш мәктәбе китапханаһын нәшриәттә баҫылған китаптар менән тулыландырҙы. Был акция артабан башка райондарҙа ла дауам иттереләсәк, ти нәшриәт директоры.

Юктан ғына ла күңеле була кешенең. Ҡанаҡай ауылы мәктәбе укытыусыларының да, укыусыларҙың да килгән ҡунаҡтарҙың иғтибарынан, уларҙың бүләгенән күңеле булды. Шатлыктары йөҙҙәренә сыкканын фотонан үҙегеҙ карап белегеҙ.

# Ғаилә байрамының фәһеме

Ейәнсура китапханасыларының бар мәҙәни сараларҙың башында тороуына, күркәм байрамдар ойоштороу маһирлығына аптырарға түгел инде.

Әле күптән түгел Ейәнсура районының Иҫәнғол мәҙәниәт һарайында район китапханасылары һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Ғаиләне социаль яклау йылы айканлы бик күркәм тағы бер сара ойошторҙо. Билдәле яҙыусы Мәрйәм Буракаева ғаиләһе өлгәһенә арналғайны ул тантана. Осрашыуға килгән якташтары яҙыусыны ҡатын-ҡыҙ, әсә, йәмәғәт эшмәкәре, әҙип буларак тәбрикләне, уның фиҙакәрлегенә һокланыу белдерҙе. Мәрйәм апай Буракаеваның балалар тәрбиәләү өлгәһе - бар милләттәштәр өсөн фәһем икәне тағы бер тапкыр һыҙык өҫтөнә алынды. "Минең ер йөҙөндә йәшәүемдең мәғәнәһе - ул милләтемә хеҙмәт итеү, милләтемә балалар үҫтереү, ейән-ейәнсәрҙәремдең үҙ туған телебеҙҙә һөйләшеүе", - тине Мәрйәм апай якташтары алдында сығыш яһағанда. Уның был һүҙҙәренә ҡеүәт өҫтәп, сәхнәгә сатнатып башкортса һөйләшкән, матур итеп фекер кора, уй һала белгән балалары - бер улы һәм дүрт ҡыҙы теҙелеп сығып баҫты. Шунда ук үҙ телендә матур итеп һөйләшкән ейән-ейәнсәрҙәре Юрматы, Айсулпан, Айназа йүгергеләп йөрөнө. Был осрашыуға килә алмай калған ейән-ейәнсәрҙәре Айгиз, Нәркәс, Мортаза, Сурағол, Әмилә лә башкортса һөйләшә, укый, фекерләй. Хатта ошо осрашыу мәлендә алты йәшлек Айназаның рус телендә сығыш яһаған бер милләттәште: "Минең өләсәйем башкорт, һеҙ үҙегеҙ ҙә башкорт, ә русса сығыш ҡотлайһығыҙ, был бит бер-беребеҙҙе хөрмәт итмәү була", - тип тәнкит итеүе ук күпте һөйләй. Туған телеңде белмәү оят икәнен, шөкөр, яңы быуын башкорт балалары аңлай хәҙер...

Хоҙай беҙҙе ергә милләт итеп яратҡан, беҙ шул милләттең телендә һөйләшеп, йырҙарын йырлап йәшәргә, үҙебеҙҙән һуң шул милләткә балалар ҡалдырырға бурыслы. Ауыр бурысмы был? Бер ҙә ауырлығы юк бит. Укыусылар нисек уйлай икән был хакта?

# Әүлиә тауына ашыу

Күгәрсен районының Әбсәләм ауылы зыяратына Шәмиғол хәлфә ҡәберенә сәйәхәт ҡылырға күптән йыйына инек.

Гәзитебеҙҙә танылған дин әһеле, халыҡ табибы Шәмиғол хәлфә тураһында Төпсән ауылы аҡһаҡалы Миңнулла ағай Әлимғоловтың байтаҡ мәкәләләрен баҫтырҙыҡ. Уларҙан һуң гәзит укыусыларыбыҙҙан да байтаҡ хаттар килде. Быйна шул хәтирәләр бер китаплык булып тупланып килә хәҙер. Шәмиғол хәлфә тураһында китап сығарыуға ярҙам итер алдынан был шәхестең ҡәберенә зыярат ҡылыу мөһим бер эш һымаҡ тойолдо. Ҡәбер эргәһендә булып, унда доғалар укып, күңелебеҙҙән генә яҙыласаҡ китапка фатиха ла алғас, ауылдың мәктәбенә юлландыҡ. Унда балалар, укытыусылар менән матур ғына осрашыу үткәреп алдыҡ. Балалар үҙҙәренең һөнәрен дә күрһәтеп өлгөрҙө. Аҙаҡ йәшел сиҙәмгә ултыртып, уларҙы фотоға төшөрҙөк.

Ошо осрашыуҙан һуң гәзитебеҙҙең әүҙем авторы, бик фиҙакәр һәм битараф булмаған аҡһаҡал Миңнулла Әлимғолов ағай менән Төпсән ауылы эргәһендәге Әүлиә тауына артылдыҡ. Был тау хаҡында ла яҙғаныбыҙ булды гәзитебеҙҙә. Тау башында изге кешеләрҙең ҡәберҙәре бар. Әүлиәләр ерләнгән бында, тип тә һөйләйҙәр. Нисек кенә булмаһын, ул тауға, ошо ҡәберҙәр янына халыҡ күңел тыныслығы, ауырыуҙарынан дауа эҙләп артыла, йола үтәй. Беҙ ҙә йола үтәнек, ҡәберҙәр янына ултырып, доғалар ҡылдыҡ. Ниндәйҙер еңеллек килде.

Һәр кешенең күңеле тарткан изге ер-төбәге була. Тыуған ауыл, тыуған як, тау-урмандар, шишмә-йылғалар, шулай ук бына ошондай изге кешеләр, әүлиәләр күмелгән урындар. Әйе, барҙыр ундай урындарҙың дауалау, тынысландырыу тәьҫире лә. Ләкин улар эргәһенә изге күңел, саф уйҙар менән килергә кәрәк. Ул сакта һәр сәфәреңдән күңел тыныслығы ла, дауа ла алып була.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**


Күгәрсен районының Әбсәләм мәктәбендә.

## ШУЛАЙ ИТЕП...

***Гәзитебеҙ журналистары баш ҡалала ғына түгел, республикабыҙ райондары буйлап та йөрөп ята, төрлө осрашыуҙарҙа ҡатнашып, Өфө һулышын, Өфө кәйефен, Өфө хәбәрҙәрен бар халыкка еткерә. Был аңлашыла ла. Өфө - ябай кала түгел. Өфө - баш кала, республикабыҙҙың арка мейеһе. Һәм баш ҡаланың башкорт телендәге гәзите һәр ауылда, һәр районда йәшәгән милләттәштәр өсөн дә мәғлүмәти һыуһынды кандырыр баҫма ролен үтәргә тейеш. "Киске Өфө" шуға ынтыла ла инде.***

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Сибай ҡалаһында үҙәк ҡала дауаханаһының яңы корпусы сафҡа инде. Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Көньяҡ Урал райондары буйлап эш сәфәре ваҡытында яңы дауахананы асыу тантанаһында ҡатнашып, сибайҙарҙы күптән көтөлгән тантана менән ҡотланы. Заманса йыһазландырылған был дауахана бар Көньяҡ Урал райондары халҡын хеҙмәтләндерәсәк. Бөйөрҙәре сафтан сыҡҡан ауырыуҙар хәҙер бында ғына гемодиализ аппараты аша ҡан алыштырыу мөмкинлегенә эйә булды. Шулай уҡ дауахана компьютерлы томограф, башҡа заманса аппаратура һәм технологиялар менән йыһазландырылған, алыҫтан тороп ауырыуҙарға консультация үткәрәсәк телемедицина залы ла бар.

✓ Сибай ҡалаһында үткән башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың "Ирәндек моңдары" төбәк-ара конкурсында Хәйбулла районы егете Сәйет Билалов Гран-при яуланы. Конкурстың Гала-концертын БР Президенты Мортаза Рәхимов менән БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев тамаша ҡылды.

✓ Республикала иң яҡшы участка милиционерҙары профессиональ оҫталыҡ буйынса һынау үтте. Салауат ҡалаһында үткән еңеүселәрҙе ҡотлау тантанаһында БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ҡатнашты һәм тәүге өс урынды яулаусыға - Рәнис Моратовҡа, Ришат Абсаттаров, Ильвир Ғәйнуллинға еңел автомобилдәр асҡысы тапшырҙы.

✓ Миәкә районынан Шафиҡовтар ғаиләһе Удмуртияла үткән Бөтә Рәсәй йәш ғаиләләр клубтары фестивалендә ҡатнашып, "Үҙ халҡының мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү" номинацияһында еңеү яуланы.

✓ Анкарала ТӨРКСОЙҙың штаб-квартираһында төрки телле дәүләттәрҙең мәҙәниәт министрҙары даими советының ултырышы булды. Унда БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты. Ултырыш барышында ТӨРКСОЙҙың яңы генераль директоры вазифаһына Ҡаҙағстандың мәҙәниәт министры Мөхтәр Ҡол-Мөхәммәт һайланған.

✓ ***Барыбер илебеҙ өсөн ғорурлығым сикһеҙ. Рәсәйҙән мәғрүр, көслө һәм ҡеүәтле дәүләт юҡ, тим үҙемә. Беҙ иң шәбе, иң алдынғыһы, тим. Беҙҙә бөтә нәмә лә "иң-иң". Хатта беҙҙең нефтебеҙ ҙә иң ҡиммәтлеһе.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Йә, йәмәғәт, хәлдәрегеҙ нисек? Май айын нисек үткәреп ебәрҙегеҙ, тиеүем. Иҫән-һауҙарһығыҙмы? Был нишләп беҙҙең хәл-әхүәл менән ҡыҙыҡһына башланы, тиһегеҙме? Бигерәк ҡыҙыу осор артта ҡалды бит. Уны нисегерәк үткәрҙегеҙ икән, тип ҡыҙыҡһынам. Йөрәктәрегеҙ нисегерәк тибә икән, тип борсолам.**

# БИЛАН - БЕҘҘЕҢ ДАНЫБЫҘ, БИЛАН МЕНӘН ҠАЛЫҒЫҘ!

## Йәки алда беҙҙе тик еңеүҙәр генә көтәме?

Майҙы беҙ 1945 йылдан алып данлы һәм шанлы ай, тип атайбыҙ. Ни өсөн икәнлеге аңлашылалыр. Ә бына 2008 йылдан алып майҙағы данлыҡлы даталар бермә-бер артты ла ҡуйҙы. Йәғни, май хәҙер икеләтә, хатта өсләтә- дүртләтә байрам айы. Еңеү айы, тимәк.

Майҙа еңеүҙәр Рәсәйгә ишелеп төшә башланы бит. Ҡыуанып өлгөрөп тә булмай. Бөтәһе лә "Зенит"тан башланды. Аңлағанһығыҙҙыр инде, һүҙҙең нимә тураһында барғанын. УЕФА Кубогында еңеп сыҡҡан футбол клубы тураһында, йәмәғәт! Ә бит "Зенит" ябай команда түгел. Ул бит Ҡаҙан йәки, әйтәйек, Мәскәү кеүек теләһә ниндәй ҡаланың командаһы түгел. Ул бит Питерҙан. Аңламағандар өсөн ҡабатлап әйтәм, ул Санкт-Петербургтан. Илебеҙгә икенсе Президент, һәм өсөнсө Президент, һәм Премьер-министр, һәм тағы ла бик күп министрҙар биргән ҡаланан ул футбол клубы. Шулай булғас, уның халыҡ-ара кимәлендәге еңеүе - Питер халҡы өсөн генә түгел, бөтә Рәсәй халҡы өсөн оло байрам һәм туй.

Аҙна-ун көн дә үтмәне (Мин хатта "Зенит - чемпион!" тип ҡысҡырып, тамаҡ ҡарлыҡтырып та өлгөрмәнем) - тағы ла бер оло еңеү тураһындағы хәбәр килде. Был юлы океан аръяғынан, Канада тарафтарынан. Данлыҡлы хоккейсыларыбыҙ ҡыуандырҙы беҙҙе. Донъя чемпионатынан алтын миҙалдар алып ҡайттылар. Канада хоккейсылары, йәғни, боҙ буйлап шайба ҡыуыу оҫталарын үҙҙәренең ояһында дөмөктөрөп ҡайттыҡ бит беҙ. "Беҙ" тиеүемде дөрөҫ аңлағыҙ, йәмәғәт. 2008 йылдың майынан алып мин һәм илебеҙҙең хоккейсылары, һәм футболсылары - айырып ҡарағыһыҙ күренеш ул. Хәҙер мин алмаш-тилмәш ҡысҡыра башланым - берсә "Зенит - чемпион!", берсә "Рәсәй - чемпион!" тип. Йәғни, төшкә хәтлем бер төрлө, төштән һуң икенсе төрлө итеп. Инде еңеүҙәребеҙ тамамландымы икән, тип уйлап та өлгөрмәнем, офоҡ артынан Билан күренде. Дима, тимәк, Билан. Яңғыҙы түгел. Эргәһендә Плющенко, Эдвин Мартон һәм хатта Страдивари. Футболсыларҙан һәм хоккейсыларҙан һуң Билан еңмәһә, Рәсәй халҡы уны аңламаҫ ине. Һәм Дима кешеләрҙең өмөтөн аҡланы. "Евровидение" конкурсынан "Гәлсәр микрофон"ды алып ҡайтты. Минең тамағым тамам ҡарлыҡты. Ҡысҡырырға хәл дә ҡалманы. Көсөм шыбырлап "Билан - гәлсәр микрофон!" тип әйтеүгә генә етте.

Бындай бәхет һәм шатлыҡты күптән кисергән юҡ ине, йәмәғәт. Булған проблемаларҙы оноттом. Аҙыҡ-түлеккә аҙна һайын арта барған хаҡтар баштан сыҡты. Илде баҫып алған коррупция, армияны юҡҡа сығарып барған "бабайлыҡ", ауыл мәктәптәрен ябылыу алдына ҡуйған реформа, халыҡты солғап алған эскелек, оло йәштәгеләрҙең тартып-һуҙып та еткерә алмаған пенсиялары һәм илде солғап алған башҡа бик күп мәсьәләләр һыу менән йыуып ташлаған кеүек, юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Бер генә уй башта уйнай: тимәк, булдыра алабыҙ! Тимәк, килеп сығасаҡ! Инде еңеү эйфорияһынан әйләнгән башым әҙерәк ипкә килә башлағайны ғына, беҙҙең футбол йыйылма командаһы Сербия командаһын еңеп, ҡыуанысты тағы ла арттырып ебәрҙе. Дөрөҫ, уйын әлегә иптәштәрсә генә. Йәғни, Европа чемпионаты алдынан әҙерлек уйындары ғына. Әммә барыбер илебеҙ өсөн ғорурлығым сикһеҙ. Рәсәйҙән мәғрүр, көслө һәм ҡеүәтле дәүләт юҡ, тим үҙемә. Беҙ иң шәбе, иң алдынғыһы, тим. Беҙҙә бөтә нәмә лә "иң-иң". Хатта беҙҙең нефтебеҙ ҙә иң ҡиммәтлеһе. Беҙҙең байҙар иң бай байҙар. Һәм ярлылар ҙа башҡа илдәрҙекенә ҡарағанда, күпкә фәҡирерәк. Әммә мин бит ул хаҡта уйламайым. Иң мөһиме, беҙ еңәбеҙ.

Еңеүселәр булғас, дошмандар ҙа булырға тейеш бит. Шуға мин "беҙ һеҙгә күрһәтербеҙ әле", тип уңлы-һуллы йоҙроҡ төйәм. Кемгә төйәмдер инде, белмәйем. Әммә янарға онотмайым.

Әҙерәк тынысланғас, был еңеүҙәрҙең сәбәбен эҙләй башланылар. Элекке Президентты яратмаусылар, йәнәһе, Путин постан киткәйне, илдең ижади мөмкинлектәре бермә-бер артты ла китте, тигән була. Яңы Президентты ихтирам итеүселәр иһә, киреһенсә, Дмитрий Медведевтың ҡул арты еңел, ул килеүе менән халыҡтың потенциалы яҙғы ташҡын кеүек ярҙарынан сыҡты, тип баһаланы. Сергей Лукъяненконың "Төнгө (көндөҙгө, киске, һ.б.) дозор"ын уҡығандар иһә Дмитрий Анатольевич "яҙмыш аҡбуры"н тапҡан, тип фаразланы. Ҡайһы берәүҙәр иһә, хатта Медведевты Рәсәйҙе ҡотҡарырға тип килгән Мессия (әүлиә) менән сағыштырҙы.

Әкем белә, йәмәғәт? Бәлки, ысынлап та шулайҙыр? Бәлки, "Зенит" командаһына осраҡлы рәүештә генә донъяның иң көслө тренерҙарының береһе булған Дик Адвокат килгәндер ҙә, ул осраҡлы рәүештә генә сит илдәрҙән көслө уйынсыларҙы һайлап алғандыр? Ә команданың бағыусыһы итеп осраҡлы рәүештә генә Рәсәйҙең генә түгел, донъяның иң бай компанияларының береһе - "Газпром"ды "тәғәйенләп" ҡуйғандарҙыр?

Әйткәндәй, киләһе аҙнала беҙҙе (һәм бөтә Европаны) футбол буйынса чемпионат көтә. Ысынлап та, бәхет ҡошо Рәсәй өҫтөндә ҡанаттарын йәйгән булһа, беренсе урынды яуламаһаҡ та, исмаһам, үҙ төркөмөбөҙҙән сығырға тейешбеҙ ҙә баһа, йәмәғәт?

Ә пенсионерҙарға килгәндә инде, улар Рәсәй өсөн Кубоктар, алтын миҙалдар, "Гәлсәр микрофон"дар яуламай бит. Дәүләт түләгән пенсияларына хушһынып ҡына йәшәп торһалар ҙа була.

**Таһир ИШКИНИН.**

## ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2008 йылдың икенсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Ашыҡһағыҙ, оторһоғоҙ: тағы ярты йыл "Киске Өфө" гәзите аша Өфөнөң башҡорт донъяһындағы рухты тойоп йәшәрһегеҙ. Таныш һәм таныш булмаған башҡорт зыялыларының тормошо, көнитмеше хаҡында уҡып шатланырһығыҙ.**




**294 һум 84 тингә "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына, 282 һум 66 тингә - льготалыһына /индексы 50673/, шулай уҡ "Өфө-печать" киоскыһында ярты йылға 228 һумға яҙыла алаһығыҙ.**

**Бүләктәребеҙҙе - төҫлө телевизор, видеоплеер, кеҫә телефоны, электр сәйнүктәре һәм үтектәр отторою өсөн гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы көтәбеҙ. Квитанцияларға ҡушып, тыуған көнөгөҙ тураһында мәғлүмәт яҙылған бер ҡағыҙ киҫәге лә ебәрһәгеҙ, мотлаҡ һеҙҙе гәзит аша ошо байрамығыҙ менән ҡотларбыҙ.**

**Һәм тағы бер бүләгебеҙ бар: "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы Өфөбөҙҙә урынлашҡан "Салют" балалар санаторий-һауыҡтырыу лагерына путевка отторроуға атап ебәрә алаһығыҙ.** "Салют" санаторий-һауыҡтырыу лагерында 7-16 йәштәге мәктәп балалары бөйөр, йөрәк, ашҡаҙан, тын алыу юлдары сирҙәре, бәүел һәм эндокрин системаһы, шәкәр диабеты кеүек сирҙәрҙән дауалана. Ул эндокрин системаһы боҙолоу менән бәйле ҡалҡан биҙе, шәкәр диабеты, һимереү кеүек ауырыуҙарҙы дауалаусы берҙән-бер балалар санаторийы. Нервылары ҡаҡшаған балалар ҙа бында комплекслы реабилитация үтә ала.

Шулай итеп, "Киске Өфө"нө уҡыған, балалары һаулығы өсөн борсолған ата-әсәләр санаторийға путевка алыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмаһын, бәхетен һынап ҡараһын ине.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## *Уҡырға саҡырабыҙ!*

**Рәми Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназия-интернаты 2008/09 уҡыу йылына конкурс нигеҙендә уҡыусылар ҡабул итә.**

Гимназияға һау-сәләмәт, спорт менән шөғөлләнгән, интернат шарттарында үҙен-үҙе хеҙмәтләндерә алырлыҡ, белемгә, ижадҡа ынтылған, дәүләт телдәрен юғары кимәлдә белгән уҡыусылар VII, IX синыфтарға һайлап алына.

Бөтә синыфтарҙа ла имтихандар үткәрелә: башҡорт теленән - изложение, математиканан - яҙма, рус теленән - бәләкәй күләмле инша. Һынау 22 июндә - Әбйәлил һәм Хәйбулла район үҙәктәре Асҡарҙа һәм Аҡъярҙа, 24 июндә Өфө ҡалаһында 10 сәғәттә башлана.

Конкурста ҡатнашырға теләүселәр үҙҙәре менән тыуыу тураһында таныҡлыҡтың күсермәһен һәм төп нөсхәһен, "личное дело"һының күсермәһен, 18 битле дәфтәр, яҙыу-һыҙыу кәрәк-яраҡтарын алып килә.

Гимназияға уҡыусылар һайлап алғанда район, республика, Рәсәй олимпиадаларында, төрлө конкурстарҙа еңеүселәр, призерҙар, лауреаттар өҫтөнлөк менән файҙалана.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында мәшһүр балет бейеүсеһе Рудольф Нуриевтың тыуыуына 70 йыл тулыуға арналған XIV Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале башланды. БР Президенты унда ҡатнашыусыларға ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе.

✓ Баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты ойошторған ғилми-ғәмәли конференция һәм күҙҙең селтәрле ҡабығы буйынса халыҡ-ара Тюбинген курстары конференцияһы булып үтте. Унда Германия, Италия, Япония илдәренән һәм Рәсәйҙең 20 төбәгенән офтальмолог-ғалимдар ҡатнашты.

✓ Күптән түгел Мәскәүҙә "Шифахана-2008" Бөтә Рәсәй форумы булып үтте. Тармаҡтың 250 учреждениеһы араһында "Красноусол" санаторийы иң ҙур бүләккә лайыҡ булды: "Рәсәйҙең иң яҡшы шифаханаһы" номинацияһында - алтын миҙал, "Санаторийҙың иң яҡшы проекты" номинацияһында - алтын миҙал, "Косметикала һәм эстетик медицинала иң яҡшы технологиялар" номинацияһында көмөш миҙал.

✓ 5 июндә Конгресс-холда башҡорт халҡының рухи короле, күренекле йәмәғәт һәм дин эшмәкәре Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыллыҡҡа арналған тантаналы кисә була. Саҡырыу билеттары таратыла, уны бинаға ингәндә лә алырға мөмкин буласаҡ.

✓Республиканың һуғыш, хеҙмәт, Ҡораллы Көстәр һәм тәртип һаҡлау органдарының IV пленумында "Граждандарҙың айырым категорияларын кәрәкле медикаменттар менән тәьмин итеү" программаһы үтәлеше тикшерелде. Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә был программа менән тейешле граждандарҙың 30 проценты ғына ҡуллана. Бер льготалыға бүленгән сумма ла түбән, тип һанай ветерандар. Бер рецептың уртаса хаҡы 446,39 һум булғанда, ул сумма бөгөн айына 423 һум тәшкил итә. Ауырыуҙарҙың кәрәк-яраҡтары, статистикаға ярашлы, айына 1000 һумды үтеп китә. Аптекаларҙа кәрәкле дарыуҙарҙың булмауы тағы ла ҡыйынлыҡтар өҫтәй. Проблеманы хәл итеү юлдарының береһе, булған закон проекттарына төҙәтмәләр индереү.

✓ *Тел белмәйбеҙ, тип һылтанғандар өсөн дә ярҙамға килеүселәр ҙә етерлек. Шуларҙың береһе - баш ҡала округы хакимиәте башлығы бойороғо менән булдырылған терминология комиссияһы.*



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# Башҡорт мәктәбендә...

## үҙ телеңдә уҡыт балаңды

**Халҡыбыҙҙың матур йолаһы бар: яҙын эштәр тамамланғас, һабантуйҙар үткәреү. Был йоланы Инорс биҫтәһендә урынлашҡан 140-сы гимназия ла тормошҡа атҡарҙы. Уҡыу йылы тамамланыуының икенсе көнөндә уҡыусыларҙы, ата-әсәләрҙе, ҡунаҡтарҙы мәктәп һабантуйына йыйҙылар бында.**

Һабантуй гимназияла йыл һайын үткәрелеп килә. Ләкин алдағы йылдарҙан айырмалы рәүештә, быйыл сара бөтә Калинин районы мәктәптәре өсөн үткәрелде. Райондың башҡа мәктәптәренән уҡыусылар саҡырылды. Гимназия Инорс биҫтәһендә уҡыусылар йәлеп итеү буйынса агитация алып барыуҙы ла күҙҙә тотто был сара ваҡытында. "Инорста фатирҙар буйлап йөрөп сыҡтыҡ инде. Мәктәп тураһында һөйләнек һәм һабантуйға саҡырҙыҡ", - тип һөйләне гимназияның директоры Ситдыҡов Илдус Ғилман улы.

Һәүәҫкәрҙәр концерт ҡуя, көрәшселәр көс һынаша, аҡыл уйынын яратыусылар шахмат таҡталарында зирәктәрҙе асыҡлай. Көслөләр гер күтәрә, кемдәрҙер етеҙлектә ярыша. Мәктәп янында күргәҙмә ойошторолған: гимназияның ҡаҙаныштары, уҡыусыларҙың ҡул эштәре күрһәтелгән...

Ҡайҙа балалар - шунда ихласлыҡ, ә ысын күңелдән эшләнгән эш бәләкәй булһа ла ҙур ҡәнәғәтлек килтерә. Был сара ла исем өсөн генә ойошторолмағайны. Ул анығ маҡсаттарҙы күҙ уңында тотто.

Һабантуй гимназия, Калинин районы сиктәренән сыҡты. Баш ҡалабыҙҙың башҡорт мәктәптәре, гимназиялары директорҙары, яңы быуынды үҫтереүгә яуаплы кешеләр килеүе менән генә түгел.

Ауыл мәктәптәрендә уҡыусылар һаны йылдан-йыл катастрофик тиҙлек менән кәмей. Халыҡ ҡайҙа була һуң? Демографик хәл дә ул тиклем ҡурҡыныс түгел. Халҡыбыҙ ҡалаға күсә. Күптәр баш ҡалабыҙҙа төпләнә. Ғаилә ҡора. Ҡала шарттарында халҡыбыҙ телен, мәҙәниәтен онотмаған быуын үҫтерһен өсөн балаларҙың милли мәктәптәрҙә уҡытыу кәрәк. Йылдан-йыл башҡорт мәктәптәре һаны арта бара. Ләкин уларҙы арттырыу ғына түгел, уҡыусыларҙы йәлеп итеү ҙә кәрәк. Күп кенә милләттәштәребеҙ, балаларын милли мәктәпкә бирергә теләмәй.

Шуға күрә абруйҙы күтәрер, һөҙөмтәләр бар икән, уларҙы ата-әсәләргә еткерергә кәрәк. Мәктәпте рекламалау мөһим. Үҙебеҙҙҙе үҙебеҙ күрһәтмәһәк, беҙҙе бер кем дә күрмәйәсәк. 140-сы гимназияның уҡыу буйынса ла, спорт буйынса ла күрһәткестәре яҡшы. Мәктәп ике тапҡыр "Йыл мәктәбе" конкурсы лауреаты булды. Баш ҡаланың башҡа башҡорт мәктәп-гимназиялары ла көслө уҡыусылар тәрбиәләй. Бала сифатлы белем менән бергә, тыуған телен өйрәнә ала. Шуны халыҡҡа еткерергә, ата-әсәләрҙе: "Башҡорт мәктәбе икән, тимәк, уҡытыу кимәле түбән" - тигән, хата ҡараштан арындырырға кәрәк.

Һабантуй бер нисә маҡсатты эҙәрлекләне. Беренсенән, уҡыу йылынан арыған уҡыусылар ял итте, күңел асты, икенсенән, балалары әле башҡорт мәктәптәрендә уҡымаған ата-әсәләргә гимназия менән танышырға мөмкинселек бирҙе, өсөнсөнән, халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн дә мөһим бер аҙым яһаны. Һәр башҡорт мәктәбе милләттәштәребеҙҙе үҙенә йәлеп итеүгә ынтылһа, ә ата-әсәләр балаларын уларға бирергә ҡурҡмаһа, ҡала урамдарында ҡуңыр йөҙлө, ҡара сәсле, ҡара күҙле, тыуған телен һыу кеүек эскән милләттәштәребеҙ артыр, тип ышанғы килә.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*... ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР*

# ТЕЛДЕ ҺАНҒА ҺУҠМАЙҘАР,

## тимәк, наҙандар...

**Күптән түгел Өфө ҡала округы хакимиәте эргәһендәге "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның сираттағы ултырышы булды. Уны ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев алып барҙы.**

Баш ҡала ойошмалары, предприятиелары, учреждениелары алтаҡталарында, башҡа яҙыуҙарҙа хаталар элек тә күҙгә төртөлөп тора инеме икән, белмәйем. Хәҙер улар аҙым һайын. Кәмергә лә уйламай. Ә бит ул хаталарға ҡаршы махсус рәүештә көрәш алып барыла. Хатта ҡала, район хакимиәттәре, Хөкүмәт эргәһендә махсус комиссиялар ҙа эшләй. Тел белмәйбеҙ, тип һылтанғандар өсөн дә ярҙамға килеүселәр ҙә етерлек. Шуларҙың береһе - баш ҡала округы хакимиәте башлығы бойороғо менән булдырылған терминология комиссияһы. Положение буйынса, был комиссия ойошмалар, предприятиелар, учреждениелар вәкилдәрен ҡабул итә һәм уларға БР дәүләт телдәрен дөрөҫ ҡулланыу буйынса консультациялар үткәрә, документтар, алтаҡталар һәм реклама текстарының дөрөҫ яҙылышын тикшерә. Бер йыл эсендә генә был комиссияға 1700 ойошма, предприятие, учреждение мөрәжәғәт иткән. 890 предприятиеның - алтаҡта, 300-ләп учреждениеның мисәт, штамп, бланк текстары ҡағыҙәгә яраштырылған. Терминология комиссияһы дәүләт телдәренә тәржемә итеү менән шөғөлләнеүсе башҡа ойошмалар - Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, "Башҡортостан", "Киске Өфө" гәзиттәре редакцияларының тәржемә хеҙмәттәре менән бәйләнештә эшләй, бергәләп рейдтар ойоштора, мәсьәләне бергәләп тикшерә, хәл итә. Мәҫәлән, баш ҡала урамдары, транспорт туҡталыштары атамаларының дөрөҫ яҙылышын тикшереү буйынса эш бергәләп атҡарылды. Предприятие һәм ойошмаларҙа визуаль текст мәғлүмәттәрен грамоталы яҙыуға ярҙам итеү маҡсатында былтыр Өфө ҡала округы хакимиәте эргәһендәге комиссия тарафынан 700-ләп етәксе өсөн семинар-уҡыу ойошторолдо. Ул семинарҙы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары, БДУ һәм БДПУ уҡытыусылары алып барҙы.

-Шулай булыуға ҡарамаҫтан, алтаҡталарҙағы башҡорт телендәге текстарҙа орфографик хаталар кәмемәй, - тине улытырыштағы сығышында хакимиәттең гуманитар мәсьәләләр буйынса бүлеге начальнигы Ришат Сабитов. - Шулай уҡ рус телендә яҙылған алтаҡталарҙа ла мәғәнәүи һәм орфографик хаталар китә. Ә инде эсенә инмәйенсә, ни менән шөғөлләнгәнен, ни һатҡанын да белеп булмаған сит телдә яҙылған ойошма, предприятие атамаларының көндән-көн ишәйеүен бер нисек тә аңлатып булмай.

Ришат Хажғәле улы билдәләүенсә, ул етәкселек иткән терминология комиссияһы ағзалары дизайн һәм тышҡы реклама бүлеге менән берлектә 60-лап реклама етештереүсе предприятиены тикшергән. Уларҙың күбеһенең яҡшы техник база, дәүләт телдәрен белгән белгестәр менән тәьмин ителеүе асыҡланған. Һәр хәлдә, улар араһында дәүләт телдәрен сифатлы, грамоталы итеп тормошҡа ашырырлыҡ ойошмалар булыуы асыҡланған. Бына бит, бынан бер-ике йыл элекке кеүек, башҡортса тәржемә итерлек хеҙмәттәр юҡ, тип зарланырға урын ҡалмай хәҙер. Эш ниҙә һуң? Әлбиттә, мәсьәләгә мөнәсәбәттә.

Әйткәндәй, эшләгән эшең булмаһа, һөйләр һүҙең дә булмай инде ул, тигән хәҡиҡәт бар. Бына шуны раҫланы Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғариф бүлеге начальнигы урынбаҫары Гүзәл Исламғәлиеваның әлеге ултырыштағы сығышы. Баш ҡала мәктәптәренең ҡайһыһында нисә бала ниндәй телдә уҡыуын ултырышта йыйылыусыларҙың ҡәҙерле ваҡыты менән иҫәпләшмәйенсә, оҙон-оҙаҡ итеп һынап ҡына сыҡты ул. Әммә Павел Рюрикович шунда уҡ ул атаған һандарҙың дөрөҫлөккә тап килмәүен белдереп, үҙендәге бер нисә һанды атап күрһәтте. Күрәһең, мәғариф бүлеге начальнигы урынбаҫары күптән яңыртмаған булғандыр үҙенең был доклады тексын. Тимәк, ул шөғөлләнгән, ул эшләгән эштә лә үҙгәреш юҡ, тигән һығымтаға этәрә был. Ә шул уҡ ваҡытта баш ҡалала башҡорт телен уҡытыу буйынса проблемалар бихисап икәнен һәр кем белә. Ниңә улар тураһында һөйләүҙән ҡурҡабыҙ? Мәғариф бүлеге үҙе күрһәтмәһә, кем күтәрергә тейеш ул хәл ителә торған проблемаларҙы? "Исмаһам, отчет сығышығыҙҙы рәткә килтерегеҙ", - тип, бик дөрөҫ тәнҡитләне Павел Рюрикович Гүзәл Исламғәлиеваны.

Ултырыштың ҡарарына ла милли мәғариф буйынса теүәл мәғлүмәтте тәртипкә килтереү тураһындағы пункт айырым яҙып ҡуйылды.

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

### Әйткәндәй..

**Шул уҡ көндө "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте эргәһендәге комиссияның да ултырышы булды. Уны Премьер-министр Раил Сарбаев алып барҙы.**

**БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев был Законды тормошҡа ашырыу тәңгәлендә ыңғай күренештәр менән бергә бик күп етешһеҙлектәр булыуын билдәләне. Мәҫәлән, ошо ултырышҡа тиклем тикшерелгән Бөрө, Благовещен, Мишкә һәм Өфө районларында дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуға етди ҡаралмауы, предметты юғары белеме булмаған, осраҡлы кешеләр уҡытыуы, был райондарҙа башҡорт телендә сыҡҡан баҫмаларҙың бөтөнләй тиерлек таратылмауы, алтаҡталарҙағы башҡорт телендәге хаталарға иғтибар ителмәүе билдәләнде. Илдус Ғөбәйҙулла улы айырым етәкселәрҙең дәүләт телдәрен уҡытыуҙы туҡтатыуҙарын көтөп, ҡул ҡаушырып ултырыуҙарын да ҡаты тәнҡитләне: "Республика Президенты Мортаза Рәхимов беҙҙең мәғариф системаһына төбәк-ара компонентты һаҡларға ҡушты. Әгәр кемдәрҙер уның күрһәтмәһен үтәмәй икән, был саботаж тип баһаланасаҡ",- тине ул. Ултырышта шулай уҡ етәкселәрҙең, кешеләр менән туранан-тура бәйләнештә эшләүсе һөнәр эйәләренең дәүләт телен өйрәнергә тейешлеге лә айырым билдәләп үтелде.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә 12 июндә үтәсәк Рәсәй көнө, Салауат Юлаев көнө һәм Ҡала көнө тантаналарына әҙерлек барышы тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, төп байрам саралары Ағиҙел буйындағы майҙанда үтәсәк. Бынан тыш, баш ҡаланың һәр районы үҙ биләмәһендәге майҙандарҙа төрлө тамашалар ойошторасаҡ.

☑ Өфө ҡала округы советының сираттағы ултырышында интернет-ҡомарлы уйындар ойоштороуға контролде арттырыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Әле баш ҡалабыҙҙың 36 интернет-салонында ҡомарлы уйындар уйнатыла. Депутаттар уйын бизнесы менән шөғөлләнгән салондарға тикшереү үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте.

☑ Баш ҡаланың Совет районы ойоштороолоуға 70 йыл тулды. Тантана "Юбилейный" мәҙәниәт һарайында үтте. Совет районы баш ҡаланың сауҙа-эш үҙәге. Тап ошонда, XIX быуаттың аҙағында тимер юл килеп еткәс, Өфө индустрияһы үҫеше башланған. Бөгөн Совет районында бөтәһе 166 мең 105 кеше йәшәй. Халыҡ иң тығыҙ урынлашҡан район - 1 квадрат километрға 10253 кеше. Ҙур һәм урта предприятияларҙың һаны ике йөҙҙән ашыу, ә бәләкәй бизнестың субьектары алты мең тирәһе. Бында тиҫтәләгән ғилми-тикшереү, проект һәм конструктор ойошмалары урынлашҡан. Республиканың күп күрһәткестәр буйынса Рәсәйҙә алдынғылар иҫәбенә инеүендә Совет районының сәнәғәт, сауҙа предприятияларының, төҙөү һәм транспорт ойошмаларының, медицина һәм мәғариф учереждениеларының өлөшө ҙур.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәтендә был юлы журналистар менән хакимиәт башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева осрашты. Һөйләшеү темаһы итеп демография мәсьәләләре һайланғайны. Быйыл беренсе кварталда баш ҡалала 2989 бала тыуған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 39 балаға күберәк. Шул уҡ ваҡытта былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда үлем 105 осраҡҡа күберәк булған һәм 3285 кеше тәшкил иткән. Тимәк, баш ҡалала демографик хәл тынысланырға урын ҡалдырмай.

✓ *Ауыл хужалығы тармағына ил етәкселеге тарафынан иғтибар арта, уны артабанғы кимәлгә күтәреү өсөн ауыл хужалығына яңы ҡарашлы, төрлө технологиялар ҡулланып эшләй белгән төплө белемле белгестәр кәрәк.*

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Бөгөн илдә аграр секторға иғтибар көндән-көн арта бара. Был йәһәттән Башҡортостан Рәсәй ауыл хужалығында алдынғы урындарҙың береһендә ҡала килә. Шуға ла ҡырыҫ тәбиғәтенә ҡарамай, элек-электән мал көтөп, иген игеп көн күргән Көньяҡ Урал районлары өсөн регионда аграр белгестәр әҙерләү заман талабы булып торалыр, моғайын. Бынан өс йыл элек кенә Сибай ҡалаһында асылған Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал арьяғы филиалы бөгөн нисек йәшәй? Баш ҡаланан алыҫта урынлашҡан был уҡыу йорто Өфө вуздарынан нимәһе менән айырыла? Бөгөнгө ҡунағыбыҙ Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал арьяғы филиалы директоры Ғайса Әхмәҙулла улы ХӘСӘНОВ ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирә.**



# АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ...

## йәшәү рәүешенә әйләнһен

✲**Сибай ҡалаһында урта махсус белем биреү учреждениелары байтаҡ. Шулай уҡ егерме йылға яҡын БДУ-ның Сибай институты уңышлы эшләй һәм регионды белгестәр менән тәьмин итеүгә ҙур өлөш индерә. Ни өсөн аграр университеттың филиалын тап ошо ҡалала астылар? Бөгөнгө көндә башҡа ҡиммәттәр хөкөм һөргәндә, ауыл хужалығында эшләргә теләүсе йәштәр табылырмы?**

- Тап Көньяҡ Урал регионында Башҡорт дәүләт аграр университетының филиалы асылыуы күптәр өсөн бик ҡулайлы булды. Ул күп мәсьәләләрҙе хәл итте. Өфө Көньяҡ Урал районларына йыраҡ, ә элек юғары белемде башлыса Өфөлә генә алып була ине. Ә хәҙер тыуған районынан алыҫ китмәй генә белем алыу мөмкинлеге бар - быға ҡыуанырға кәрәк. Ата-әсәләр менән осрашыуҙарҙы йыш ойоштороп торабыҙ, улар ҙа филиал асылыуына бик шат. Беҙҙә башлыса Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Учалы, Белорет райондарынан, Сибай ҡалаһынан студенттар уҡый, йәғни студенттарҙың 90 проценты - башҡорт балалары. Улар Сибайҙа ике курс уҡып, студент тормошона өйрәнеп, ныҡынып, 3-сө курска Өфөгә уҡырға китә. Былтыр 180 студентты Өфөгә ебәрҙек һәм әҙерләү кимәле насар түгел, тигән баһа алдыҡ.

Бер заман ауыл хужалығының бәҫе төшөп киткәйне, бөгөн шуны яңынан күтәреү йәһәтенән эшләй торған эштәр бар. Атай-олатайҙары ғүмер буйына ер менән туйынған икән, ни өсөн бөгөн башҡорт балаһы бәхетте кайҙандыр ситтән эҙләргә тейеш? Ауыл хужалығы тармағына ил етәкселеге тарафынан иғтибар арта, уны артабанғы кимәлгә күтәреү өсөн ауыл хужалығына яңы ҡарашлы, төрлө технологиялар ҡулланып эшләй белгән төплө белемле белгестәр кәрәк. Беҙ был юҫыҡта әле беренсе генә аҙымдар яһайбыҙ.

БДУ-ның Сибай институты беҙгә һәр ваҡыт ярҙамға килергә әҙер. Улар беҙҙе дөрөҫ юлға төшөрөп, өлгө күрһәтеп тороусы ла. Ҡалалағы башҡа уҡыу йорттары етәкселәре менән дә проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеп, уларҙы бергәләшеп хәл итергә тырышабыҙ. Әүәлдән ҡатнашып йәшәгән ут күршеләребеҙ Силәбе һәм Ырымбур өлкәһе менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Йыраҡ ҡына Ырымбур аграр университетына барып ҡайттыҡ, ундағы университет комплексы миҫалында техникумдар, район етәкселәре менән бәйләнеш булдырҙыҡ.

✲**Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал арьяғы филиалында ниндәй бүлектәр бар? Тағы ла ниндәйерәк бүлектәр асырға ниәтләйһегеҙ?**

- Бөгөнгө көндә филиалда 7 бүлек эшләп килә: агрономия, зоотехния, ветеренария, ауыл хужалығын механизациялау, ауыл хужалығын электрлаштырыу һәм автоматлаштырыу, иктисад, бухгалтерия иҫәбе. 4 һөнәр буйынса ситтән тороп уҡыу мөмкинлеге бар. Йыраҡ, Көньяҡ Урал райондары белгестәренең фекерен белергә теләп, мониторинг үткәреп, уның буйынса һығымталар яһап, ниндәй яңы һөнәрҙәр кәрәклеген асыҡланыҡ. Уҡыу йортонда агрономия, зоотехния, ветеренария, механизация традицион һөнәрҙәр булып ҡалһа ла, урман хужалығына ҙур иғтибар бүленгән райондар урман хужалығы буйынса һөнәр асыуыбыҙҙы һоранылар, унан тыш, агротехнологиялар, агро-ландшафт дизайны, ер мөнәсәбәттәре, ер кадастрыны кеүек мәсьәләләргә лә иғтибар бүләсәкбеҙ. Көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәренән тыш, фәнни-консультацион үҙәк, артабан квалификация үҙгәртеү, квалификация күтәреү кеүек эштәр менән дә шөғөлләнергә ниәтләйбеҙ һәм бөгөнгө заман талабы булған эшсе профессиялар - машина йөрөтөүсе, иретеп йәбешетереүсе кеүек өҫтәмә һөнәрҙәргә лә уҡытырға уйлайбыҙ. Беҙҙә уҡып сыҡҡан студент, бәлки, аҙаҡтан фермер булыр, шәхси эшен асыр, шуға ла ул бөтә яҡтан әҙерлекле булырға тейеш. Хатта юридик, иктисади яҡтан да бөтөн эштәрен эшләй алғандай шәхес тәрбиәләргә тейешбеҙ. Беҙҙең төбәк башҡорт халҡының рухи нигеҙе булып тора, шул рухты һүндермәй, яңыса фекерләй белгән студенттарҙы бөтә яҡлап әҙерләүҙе маҡсат итеп ҡуйғанбыҙ. Хәҙер ауыл хужалығы етештереүсе генә түгел, ә йәшәү рәүеше лә. Ваҡытында колхоз-совхоздар таркалғас, нимә эшләргә белмәй аҙап ҡалған ауылдарҙы яңынан тергеҙеп, унда заманға ярашлы етештереүсе предприятиелар асып эшләй алырлыҡ алдынғы ҡарашлы белгестәр әҙерләйбеҙ.

✲**Уҡырға килергә теләүселәр һаны артамы? Ниндәй һөнәрҙәргә абитуриенттар өҫтөнлөк бирә?**

- Конкурс ҙур ғына, һөнәренә ҡарап, бер урынға 4-5, ҡайһы берҙә 7-8 кеше булып китә. Үҙебеҙҙә уҡ ситтән тороп уҡыу бүлеген асыу бик ҡулай булды, сөнки ҡасандыр техникум белеме етерлек булһа, бөгөнгө көндә бөтә ерҙә лә юғары белем мотлаҡ һанала. Предприятиелар үҙгәртеп ҡорола, яңылары барлыҡҡа килә, унда белемле менеджерҙар, заманса һөнәр эйәләре талап ителә. Студенттарыбыҙ фән менән дә шөғөлләнә, филиал базаһында төүге фәнни-ғәмәли конференциялар үтә. Донъя-ара кимәлгә лә сығабыҙ: әлеге көндә 3 студентыбыҙ Германияла практика үтә, тағы 9 студент, 1 уҡытыусы унда барырға әҙерләнә. Былтыр үҙем Англияла Кембридж, Оксфорд университеттарында булып ҡайттым. Унда белем биреү, киләсәк быуынды тәрбиәләү йәһәтенән шул юғары уҡыу йорттарында һаҡланған традицияларҙың йоғонтоһо ҙур. Беҙҙең билдәле мәғрифәтсебеҙ, ябай халыҡты аң-белемгә өндәүсе сәсәнебеҙ Аҡмулла "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тип милләттәштәренә XIX быуатта оран ташлаһа, Европала XII - XIII быуатта уҡ белем алыуға ҙур әһәмиәт биргәндәр. Улар бөгөн дә шул замандан килгән базаны нигеҙ итеп ала.

✲**Юғары белем биреү йорто асылған сакта уҡытыусыларҙы ҡайҙан йыйҙығыҙ? Был юҫыҡта проблемалар булманымы?**

- Уҡытыусыларҙы башлыса үҙебеҙҙең регионДан туплаҡ. Әле филиалда 6 фән кандидаты, доценттар, өлкән уҡытыусылар, аспиранттар бар. Штаттағы уҡытыусыларҙан тыш, доктор, профессорҙарҙы Башҡорт дәүләт аграр университетынан саҡырабыҙ, башҡа уҡыу йорттары уҡытыусыларын йәлеп итәбеҙ. Сибай Фәндәр академияһы һәм БДУ-ның Сибай институты менән беҙҙә фәнни хеҙмәттәшлек берләштерә. Бөгөнгө көндә Баймаҡ ауыл хужалығы техникумы менән бергә эшләйбеҙ, артабан да уларҙың матди-техник базаһын ҡулланып, тәжрибә уртаҡлашыу дауам итер, тип уйлайым. Филиалдың үҙенең 13 аспиранты бар, улар уны тиҙ арала тамамлап, фән кандидаты булырҙар, тип ышанам.

✲**Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал арьяғы филиалы киләсәккә ниндәй пландар менән йәшәй?**

- Хәҙерге баҙар иктисады талаптарына тап килгән һөнәрҙәргә уҡытырға кәрәк. Заман бик тиҙ үҙгәреүсән, студенттарҙы гел бер төрлө һөнәрҙәр буйынса ғына йыл һайын әҙерләнәк, уҡыу йортонон да, сығарған белгестәребеҙҙең дә кәрәге булмаясаҡ. Шуларҙан сығып, быйыл уҡ яңынан биш булек асабыҙ. Башҡа вуздар тәжрибәһенән сығып, алыҫтан тороп дистанцион, йәғни эштән айырылмайынса белем алыу мөмкинлеген индерергә йыйынабыҙ. Сит илдә был күптән ғәмәлгә индерелгән, беҙҙә лә белем камиллаштырыуҙың бындай төрө бик уңайлы булыр ине. Бының өсөн күберәк компьютер базаһы кәрәк буласаҡ, бөгөн филиал интернетка тоташтырылған, үҙебеҙҙең сайт асылған. Был эште, иң мөһиме, инновацион технологияларҙы ауыл хужалығында ҡулланырлыҡ итеп, дөрөҫ ойоштороорға тейешбеҙ.

*Ләйсән НАФИКОВА*
*әңгәмәләште.*

**Шулай итеп, йәштәр тыуған яҡтарына ҡайтып ныҡынырға, ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә тейеш. Ауылдың киләсәге бөтә яҡлап әҙерлекле булған ныҡлы ҡулдарҙа булһын. Ә шундай белгестәр әҙерләүсе юғары уҡыу йортона был изге эштәрендә уңыштар ғына теләйек.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## Дуҫлыҡҡа балта сабалар

**Йыраҡ БР Дәүләт йыйылышы - Ҡоролтай "Экстремистик эшмәкәрлеккә ҡаршы" Федераль законына үҙгәрештәр индереп, уға интернет селтәрендә экстремистик материалдар таратҡан өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыуҙы ҡараған статья өҫтәргә тәҡдим итте.**

Башҡортостанда милли һәм дини дошманлыҡ ҡабындырырға һәләтле интернет-ресурстар эшмәкәрлеге депутаттарҙы ошондай ҡәтғи ҡарар ҡабул итергә этәргән. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Морат Кейекбаев белдереүенсә, "Милли, дини йәки социаль дошманлыҡ тыуҙырыу, ғәмәлдәге закон буйынса, экстремистик эшмәкәрлек тип һанала. Ниндәй юл менән таратылыуына ҡарамаҫтан, бындай материалдарҙың критерийҙарын билдәләргә кәрәк. Йыраҡ республика төп коммуникация сараһы итеп интернет ресурстарын ҡулланыусы яңы күренеш - сәйәси юҡынлы милләтселеккә юлыкты. Уның барлыҡҡа килеүе этник дискриминация темаһын йәйелдергән ҡайһы бер төркөмдәрҙең сәйәси дәғүәләре менән бәйле. Башҡортостанда төрлө милләт халыҡтары араһында дуҫлыҡ һәм татыулыҡ төп урынға ҡуйыла, шуға ла бындай закон ҡабул итеү бик урынлы буласаҡ".

## Үҙебеҙҙә теркәйҙәр

**Киң мәғлүмәт коммуникациялары, бәйләнеш һәм милли мираҫты һаҡлауҙы күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең бойороғона ярашлы, 1 июндән был хеҙмәттең БР буйынса идаралығы ойошторола.**

Ул Башҡортостан территорияһында таралған киң мәғлүмәт сараларын теркәү, теркәү таныҡлыктарына төҙәтмәләр индереү, теркәү таныҡлығы дубликаттарын биреү вәкәләттәрен башҡара башлай. Шулай уҡ яңы ведомствоға республикаға индерелеүсе, ваҡытлыса индерелеүсе мәҙәни комартҡыларҙы теркәү, уларҙың иҫәбен алып барыу, мәҙәни ҡомартҡыларҙы республиканан ситкә сығарыу өсөн юридик һәм физик шәхестәргә рөхсәт биреү, таможня һәм башҡа хоҡуҡ органдары конфискациялаған, йәиһә ҡулға алған мәҙәни ҡомартҡыларҙы һаҡлау, экспертиза үткәреү, уларҙы кем милкендә булыуын асыҡлау маҡсатында мәғлүмәт баҫтырыу бурысы ла йөкмәтелгән.

**Б Ә Л Ә К Ә Й   К А М У С**

# Арктиканың серле иргәйелдәре



Төньяҡ Европа халыҡтары араһында альфар, эльв, гном, альб һ.б мифик заттар тураһында легендалар күп һаҡланған.

Европаның иң боронғо халҡы кельт-ирландтарҙа Туату де Даннан - Дану алиһәһе ырыуы йәшәгән серле утрауҙар хаҡында сага бар. "Уларға тылсым да, сихыр ҙа, друидизм да, хәйләкәрлек тә хас булған. Үҙҙәренең дүрт ҡалаһында - Фалиас, Гориас, Муриас, Финдиаста улар магик предметтар яһаған, Ирландияға күсенгән ваҡыттарында был әйберҙәрҙең бер өлөшен үҙҙәре менән алғандар".

"Ирландияны яулап алыу китабы"нда Туату де Даннан халҡының Ирланд еренә аяҡ баҫыуы аңлатып булмаҫлыҡ катаклизм менән оҙатылып барыуы тураһында һөйләнелә: "Ул сакта ер һәм күкте төтөн, көйөк еҫе ҡаплап алды". Һуңғы осор легендалары ситтән килгән кешеләрҙең яр буйына еткәс, караптарына ут төртөүе һәм шуның һөҙөмтәһендә тирә-яҡ төтөнгә сорналыуы хаҡында бәйән итә. Әммә нисек кенә булмаһын, Дану алиһәһе ырыуы төтөн болотонан барлыҡҡа килгән, тип һанала.

Бәләкәй буйлы, гел йәш һәм матур был кешеләр тылсым һәм фән менән идара иткән осор Ирландияның алтын быуаты тип йөрөтөлә. Туату де Даннан халҡын диңгеҙҙән килгән икенсе бер халыҡ ҡыуып ебәргәс, улар ер аҫты донъяһына, "мәңге шунда йәшәр өсөн, бәхетле ҡалҡыулыҡ аҫтына" күсә. Улар мәмерйәләрҙә, тылсымлы ҡургандар - "сид"тарҙа йәшәй. Ирландия әле лә "ҡалҡыулыҡ халҡын" хөрмәт итә. Йылдар үтеү менән, улар фольклор персонаждарына әүерелеп, Ирландияның ҡараңғы мөйөштәрендә йәшәүсе "бәләкәй кешекәйҙәр" тип йөрөтөлә. Урындағы халыҡ "бәләкәй кешекәйҙәр" йәшәгән ҡургандарҙы емермәй, хатта уларға яҡын да бармай.



**(Дауамы бар).**

✓ *"Ҡалай бәхетле булдым әле, тием. Ҡартәсәйем Бөртөкбикә, ана, ер аяғы ер башынан килеп, ошо ерҙә үҙ эҙен ҡалдырған. Ә мин, уның ейәнсәре Бөртөкбикә, Президентыбыҙ менән аҡ тирмәлә сәй эсеп, телевизорға төшөп ултырам", тием.*



*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ИҪӘНГИЛДЕ АҒИНӘЙЕ...

## Зәйнулла ишан ҡомартҡыһын һаҡлай

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

Иҫәнгилде ҡартатайым Рус-төрөк һуғышында ҡатнашып, Бөртөкбикә исемле үҙе һылыу, үҙе сая төрөк ҡыҙын кәләшлеккә алып ҡайта. "Иҫәнгилде улым яуҙан иҫән-һау ҡайтһа, уның исемен ауылға бирәм", тип әйтеү әйтеп көткән Ҡунаҡкол, улы ҡайтҡас, ауылға Иҫәнгилде исемен бирҙертә. Бөртөкбикә ҡартәсәйем һыбай йөрөүгә бик әүәҫ булып, бик йыш ҡына һунарға сыҡҡан. Бер мәл уны һунарҙа йөрөгән мәлендә ҡаҙаҡтар урлап алып китә. Юлда барғанда ҡартәсәйебеҙ Өлкәр йондоҙона ҡарап бара, йондоҙ уның уң яғында була. Уны көслөк менән бер ҡаҙаҡҡа дүртенсе ҡатынлыҡҡа биргәндәр. Ҡасмаһын өсөн табанын ярып, ҡыл һалғандар.

Унда ҡартәсәйебеҙ 4-5 йыл йәшәгән, тиҙәр. Теге ҡаҙаҡ бишенсе ҡатыны менән ҡушылған төндә ул алдан әҙерләп ҡуйған атына менеп ҡаса. Ҡасҡанын һиҙеп ҡалған ҡаҙаҡтар уның артынан ҡыуа төшә. Ҡартәсәйебеҙ был юлы инде Өлкәр йондоҙон һул яғына ҡалдырып, Уралтау яғына елдерә. Яйыҡ йылғаһының шарлап ташып ятҡан сағы була. Ҡасып барыусы атының бауырлығын сисеп, йылғаны йөҙҙөрөп сыға. Ҡаҙаҡтар шул көйө һыуға төшә. Уларҙың ярһыуҙан тындары ҡыҫылып өҙлөккән менгеләре һыуға төшә тора, бата тора. Ошо ерҙә ҡарсәйебеҙҙең ат менеү тәртип-йолаһын яҡшы белеүе ҡотҡара.

Ҡартәсәйебеҙ арманһыҙ булып, Иҫәнгилде ауылы янындағы Ишегалтауға килеп йығыла. Иҫәнгилде ҡартатай балалары менән уның янына тауға менә. Балалары: "Атай, әсәйебеҙ ҡаҙаҡ менән йәшәгәс, әйҙә, өйгә ҡайтмаһын, беҙ яңы Алмабикә әсәйгә (уның хаҡында алдараҡ) өйрәндек инде", - тигән белдереү яһай. Шул саҡта ғына Иҫәнгилде ҡартатайым уларҙың әсәләрен алыҫтағы Төрөк иленән алып ҡайтыуы, шуға күрә Бөртөкбикәнең иле һәм туғандары алдында мәрхәмәтһеҙ булып ҡалырға теләмәүе тураһында белдерә. Бөртөкбикә ҡартәсәйем, шулай итеп, байтаҡ ҡына ваҡыттан һуң иренең йортона ҡайта. Әммә оҙаҡ йәшәй алмай ул. Тән йәрәхәтенән бигерәк, йән йәрәхәтенән һарыға һабышып, донъя ҡуя. Көслөк менән ҡаҙаҡта ҡатын булып йәшәргә мәжбүр ителеүен нисек итеп аңлата алһын инде ул балаларына һәм башҡаларға. Иренең икенсегә өйләнеүен дә ауыр кисергәндер инде сая төрөк ҡатыны. Ҡәбере беҙҙең Һыртҡы Иҫәнгилде ауылы зыяратында. Уны ҙурлап, ҡәҙерләп, зыяратына барып торабыҙ.

Мин Иҫәнгилде ҡартатайымдың бишенсе быуыны вәкилемен. Бөртөкбикә ҡартәсәйемдең исемен йөрөтәм. Атайым менән әсәйемдең миңә тиклем туғыҙ балаһы тыуа тороп, үлә торғас, унынсыға мин тыуғас, ҡартәсәйемдең исемен ҡушып, атайым мине йола буйынса кендек инәйемә мал әйтеп, тәҙрә аша һатып алған. Бөртөкбикә ҡартәсәйемдең исем ҡото менән мин иҫән ҡалғанмындыр инде. Сибайҙа уҡытҡан улым "Әсәй, төрөктәрҙең араһында нишләп һинең исемең бар, ә башҡорт исемдәре араһында бер ҙә осрамай ул?" тип һорай ҡуйҙы бер мәл. Балаларым уңайһыҙланһа ла, мин исемемде алыштырманым. Йәшерәк саҡта Иҫәнгилдина Бикә булып йөрөнөм, хәҙер - Ғәлина Бөртөкбикәмен. Урта мәктәпте Юлдыбайҙа тамамланым. Йыл һайын һуңғы ҡыңғырауҙа һабаҡташтар менән осрашып торабыҙ. Хәҙер әҙ генә ҡалдыҡ. Юлдыбайҙың 800 йыллығын билдәләгәндә Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов менән күрешеп ҡыуандым. "Ҡалай бәхетле булдым әле, тием. Ҡартәсәйем Бөртөкбикә, ана, ер аяғы ер башынан килеп, ошо ерҙә үҙ эҙен ҡалдырған. Ә мин, уның ейәнсәре Бөртөкбикә, Президентыбыҙ менән аҡ тирмәлә сәй эсеп, телевизорға төшөп ултырам", тием.

Үҙемдең дүрт ҡыҙым, өс улым бар. Аллаға шөкөр, улар үҙ ояларын ҡороп, матур ғына йәшәп яталар.

### Зәйнулла ишандың хаж таяғы

Атайым менән әсәйем коммунист булһалар ҙа, дини кешеләр ине. Беҙ ҙә намаҙҙан айырылманыҡ, намаҙлығыбыҙ шаршау артында булды. Намаҙ уҡығаныбыҙҙы ауылдағы кешеләр түгел, өйҙәге бәләкәй балалар ҙа күрмәне. Ата-әсәйебеҙ ғәрәпсә уҡырға-яҙырға ла өйрәтте. Беҙ дүрт бала үҫтек, ике һеңлем, бер ҡустым бар. Әсәйемдең бер туған ағаһына Зәйнулла ишан Рәсүлев тарафынан бүләк ителгән булған был таяҡ. Атайым 1887 йылғы ине, ул Зәйнулла Рәсүлевтың Троицкиҙағы мәҙрәсәһендә уҡыған, дини генә түгел, педагогик (донъяуи - Ә.Ү.) белем дә алған. Мәҙрәсәне тамамлағас, Аҡмулла кеүек, ҡаҙаҡтар яғында балалар уҡытып йөрөй. Аҙаҡтан, донъялар үҙгәргәс, Ырымбурҙа уҡып, ғүмере буйы мәктәптә эшләп, Ленин орденына лайыҡ булды. Тик орденын Өфөнән барып алырға ғына өлгөрмәне, һуғышта алған яраларынан донъя ҡуйҙы. Орденын Өфөләге Лениндың йорт-музейына ҡуйырға васыят әйтте. Хәҙер ҡайҙа яталыр ул, белмәйем.

"Яңғыҙ булһам да, яңғыҙ түгелмен, Аллаһы Тәғәләм бар, ике яғымда ике фирештәм һаҡлай. Эргәмдә ишандан мираҫ серле таяғым бар...", тиеп йәшәп тик ятам. Ауырып-мауырып китһәм, эргәмә һалып йоҡлайым. Хәлем еңеләйеп китә. Таяҡтың ырымы бар. Мал-һал ҡасһа, әсәйемдең өйрәтеүе буйынса һыртынан һыпырһаң, мал да ыҡҡа килә.

### Буранбай сәсән ҡәбере

Бөртөкбикә ҡартәсәйем ҡаҙаҡтарҙа ҡоллоҡта булғанында ҡартатайыбыҙ атаҡлы Буранбай сәсәндең бер туған апаһы Алмабикә исемле ҡыҙға өйләнә. Иҫәнгилде ҡартатайыбыҙ Буранбай сәсәндең бер туған еҙнәһе булып сыға. Әле Буранбай сәсәндең ҡәбере булған урында Иҫәнгилде ҡартатайҙың тирмәйө торған. Властарҙан ҡасып йөрөгән Буранбай сәсән ана шунда килеп ҡолаған, тиҙәр. Ныҡ яраланған булған ул. Ҡартатайыбыҙ уны тәрбиәләгән, артынан эҙәрлекләп килеүселәрҙән йәшереп тотҡан. Буранбай сәсән шунда вафат булғас, урынына ерләгәндәр. Беҙ бик бәләкәй саҡта ҡартәсәйҙәребеҙ менән шул тирәлә сейә тиргәндә сәсәндең ҡәберен күрһәтеп, тарихын һөйләй торғайнылар. Аят уҡый инеләр. Уларға был урынды үҙ әсәләре һәм ҡартәсәләре күрһәткән булған. Шуға күрә Буранбай сәсәндең нәҡ ошо урында күмелгәнен асыҡ беләбеҙ. Кешенең үлеме һәм ҡәбере хаҡындағы хәбәр бер ваҡытта ла алдыҡ булмай бит.

Сәсәндең ҡәбере ҡәҙерле урын, элек тә был урын изге һаналды, хәҙер мәктәп балалары уның ҡәберен шефҡа алды. Сәсәндең ҡәбере ятҡан тау Этҡара тип атала. Бөртөкбикә ҡартәсәйемде урлаған ҡаҙаҡ шул тауҙа йәшеренеп, уның һунарға сыҡҡанын аңдып ятҡан, тиҙәр.

Буранбай сәсәндең ауылдаштары, Баймаҡ районының Буранбай ауылы кешеләре лә килеп тора. Ҡәберенә һәйкәл-таш ҡуйҙыҡ, был сарала буранбайҙар ҙа ҡатнашты. Үкенескә ҡаршы, шатлыҡҡа ҡайғы ла эйәреп йөрөй. Һәйкәл-ташты асҡанда Сәйфулла ҡусты Дилмөхәмәтов көтмәгәндә вафат булып ҡуйҙы.



Буранбай сәсән ҡәбере

### Яман уй ҡартайта

Хоҙайымдан, уға бағышлап уҡыған намаҙымдан айырылғаным булманы. Аллаһы Тәғәлә һорағанымды алдыма сығара тора. Һаулыҡ та бирҙе. Ғүмеремдә мин әсе нәмә йотҡаным юҡ. Нисәмә туй үткәрмәнем, ниндәй генә мәжлестәрҙә ҡатнашманым, мин ул шайтан ризығынан алыҫ торҙом. Һаулығымдың тағы бер сере ошонда. Өсөнсө сәбәбе иртә таңдан тороуымдыр, хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр бит. Аллаға шөкөр, ошо йәшемә етеп, ҡан баҫымы тигән нәмәне белмәйем. Артыҡ ҡайғырмайым, артыҡ шатланмайым, күңелемдә башҡа кешегә ҡарата яман уй йөрөтмәйем. Ҡайһы бер кеше алдына алғанын ҡуймайым, тип, үҙ-үҙен генә бөтөрә. Яман уй ҡартайта, яҡты уй ағарта. Берәрһенән яман һүҙ ишет-һәм, ишетмәмешкә һалышам, йәки ыңғайы бер онотам. Кеше бит ул һүҙҙе һиңә яуызлығына барып әйтмәй, ирекһеҙҙең көнөнән әйтә, тип уйларға кәрәк. Һиңә ауыр һүҙ әйткәндең күҙенә ҡарап, яҡшы һүҙ әйтһәң, ул да ыңғайы бер ирей ҙә ҡуя.

Минең эшем шул кеше менән һөйләшә белеүгә бәйле булды. Ғүмерем буйы госстрахта агент булып эшләнем. Еңел булманы. Шулай ҙа кеше менән һөйләшә белһәң, уның күңелен яулай алһаң ғына эшләп була ундай эштә. Госстрах агентының планы теле менән үтәлә. Ҡартайыңҡырағас, бер йәш кенә агент күршебеҙгә килеп ингән дә, һаулыҡ һорашыр-һорашмаҫтан, ниндәй эш менән йөрөүен әйтеп һалған. Үҙ теләге менән кем страховкаға ризалыҡ бирһен инде. Буш ҡул менән сығып киткән.

Кеше бит эшен ҡапҡаны асып ингәндә үк хужаның этен һәм ихатала уйнап йөрөгән балаһын һөйөүҙән башлай. Йортҡа ингәс тә, хужалар менән һаулыҡ һорашҡандан һуң, уларҙың тормошо, ундағы проблемалары хаҡында һораша, кәрәк икән, кәңәшен бирә. Яйы сыҡҡан һайын хужаларҙы маҡтап, ҡупайтып алырға ла кәрәк. Өҫтәл артына ултырырға саҡырһалар, баш тартмайынса, бергә ултырып сәйҙәрен эсергә лә кәрәк. Беҙҙең башҡортта ризығын ауыҙ иткәндең ихтыярына ҡаршы килмәйҙәр. Сәй эсеп бөтөп, "әпәр" иткәс кенә "Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар", тип, йомошондо әйтә башларға ла була. Мин шулай итә инем. Күңелдәре ирегән хужалар һыйырҙарын, өйҙәрен генә түгел, үҙҙәрен дә бәхетһеҙ осраҡтан страховать иттерәләр ине. Беҙҙең халыҡҡа бына ошондай һығылмалылыҡ етеңкерәмәй. Беҙ бер эш ҡапыл килеп сыҡмай икән, шундуҡ унан төңөлөргә, ишектәрҙе шарт ябырға әҙер генә торабыҙ.

Халҡыбыҙҙа борон-борондан ҡиәмәт туған алыу йолаһы булған. Ҡиәмәт туған алған кешегә ҡиәмәт көнөндә шәфәғәте тейә, еңеллек килә, тиҙәр.

### Бишәүгә - бер әсмүхә

Ҡайғырып ултырмайым, һәр саҡ нимәнәндер ҡыҙыҡ табып, кеше көлдөрөп, уларҙың ыңғайына үҙем дә күңелемде күтәреп ҡалдырырға тырышам. Минән пенсиямдың күләме хаҡында һорашһалар, һәр саҡ, "Биш меңгә бер әсмүхә тулмай", тип яуап ҡайтарам.

Бер мәл үҙем дә һиҙмәҫтән, ауылыбыҙҙы медсестралы иттем һәм бушлай тиерлек "Һәнәк" журналы алдыра башланым. Тарихы былайыраҡ булды. Өфөгә барғанымда "Башҡортостан ҡыҙы" журналы редакцияһына барып индем. Мине ҡабул итеүсе журналист ниндәй йомош менән йөрөүем хаҡында һорашҡайны, алдан әҙерләнмәгәс ни, үҙебеҙҙең ауылда яңғыҙ әбейҙәрҙең күбәйеүе, уларҙы ҡарарлыҡ кешеләре булмауы хаҡында һөйләнем дә бирҙем. Журналист телефонын алып, ҡайҙалыр шылтыратырға керешә. Мәсьәләне ыңғай хәл итте, шикелле, уға рәхмәт әйтеп сығып киттем. Матбуғат йортоноң шул уҡ ҡатында "Һәнәк" журналының да редакцияһы урынлашҡан икән. Коридорҙа бер егет осраны. Һөйләшеп киттек. "Ҡана, ер аяғы ер башынан килеп, буш ҡайтҡансы, ауылыбыҙҙағы эскеселәрҙе яҙҙырып ҡайтайым", тип уға үҙебеҙҙең ауылдағы эскеселәр хаҡында һөйләнем. Сыҡмаҫ, тиһәм, бер мәл журналды алдырыусылар "Һин нимә яҙып ятаһың ул?" тип, күҙемде лә астырмай. Баҫылып сыҡҡан икән. Бер мәл 75 һум гонорары килеп төштө. "Хәрәмдеке хәрәмгә булһын, ана шул "Һәнәк"кә яҙҙырығыҙ ҙа ҡуйығыҙ", тип, журналға яҙылып ҡуйҙым. Ауылыбыҙҙа медсестра эшләй башланы.

Бер мәл вареньем әсеп, ҡызлап киткәс, ашлы һыуға һалып, кәзә тәкәһенә эсерҙем. Тәкәм иҫерҙе лә китте бер мәл. Аяғына баҫа алмаҫ булды ла ҡуйҙы. Салып һуйырға кеше алып килдем. "Юҡ, инәй, бының ҡолаҡтары төҙ тора, үлерлеккә оҡшамаған, иһереп ята бит был", ти теге кеше. Иртәгеһенә ейәнем: "Ҡартәсәй, был бит баш төҙәтергә һорап ята", - тип йәнә бер көлдөрҙө.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

## Әйткәндәй...

**Иҫәнгилде ауылында Бөртөкбикә инәйҙең нур бөркөлгән өйөндә булған өс сәғәтебеҙ өс йылдай оҙаҡ тойолдо. Инәйҙең сәйен тәмләп, Бөртөкбикә ҡартәсәһе, ауылы һәм нәҫеле тарихы, үҙенең тормош юлы хаҡында ихлас әңгәмәһен тыңлап, үҙебеҙҙе бер әкиәт илендә, легенда тарихында ҡатнашҡан кешеләй итеп тойҙоҡ. Шул тойғоға бирелеп, инәйҙә күҙ ҡараһылай һаҡланған Зәйнулла ишан Рәсүлевтың хаж таяғы хаҡында ла онотоп ебәргәнбеҙ. Был хаҡта инәйебеҙ үҙе иҫебеҙгә төшөрөп: "Һеҙ бит Зәйнулла Рәсүлевтың хаж таяғын күрергә килгәнһегеҙ, тотоп ҡарамайһығыҙмы ни?" тип әйткәс кенә, әкиәт иленән сыға алдыҡ.**

**Беҙ шуны ла белдек, инәй үҙе лә был хаҡта әйтте: Зәйнулла Рәсүлевтың хаж таяғына бар кешенең дә ҡағылырға хаҡы юҡ икән. Хаж таяғы Мономах бүреге лә, популистик ҡомартҡы ла түгел. Күңелендә изге ниәттәр, яҡты уйҙар йөрөткәндәр генә уны күрергә ынтылһын. Башҡаларға Бөртөкбикә инәй был изге ҡомартҡыны күрһәтмәйәсәк. Беҙ Бөртөкбикә инәй менән үткәргән өс сәғәтте үҙебеҙгә һынау мөҙҙәте итеп ҡабул иттек. Һәм ошо һынауҙы уңышлы үтә алғаныбыҙға үтә шатбыҙ, сөнки ишандың хаж таяғын Бөртөкбикә инәй ҡулыбыҙға үҙе тотторҙо. Беҙ унан был хаҡта һораманыҡ.**

# ЗӘКИ ВӘЛИДИ: БӨЙӨК ШӘЙЕХТЕҢ ҺЫНАУЫ

### Бохара-Хива тибындағы муллалар

Ғаиләбеҙҙең иң күп аралашып йәшәгән даирәһе муллалар булды. Уларҙан Стәрлетамаҡта йәшәүсе Нуғай улдары Шәрәфетдин һәм Камал, Һайран ауылынан Әбсәләм һәм улы Бикбулат мулла, Йомағужа ауылынан Солтангәрәй, Ҡоншаҡ ауылынан Ғәлләм, Стәрлебаштан Ниғмәтулла һәм Зәйнулла, Уралдың көнсығышынан Муллаҡай ауылынан Сәйет улы Ғабдулла, Ҡулбаҡтынан Ханнан һәм Троицкиҙан Зәйнулла ишан исемле мәшһүр шәйех иҫкә төшә. Уларҙың барыһы ла ғәрәпсә, фарсыса белгән, дини белемдәре камил, Бохараның Нәкшбәнд исемле дин әһеле йоғонтоһо аҫтында булған, мәҙрәсә тоткан, китап уҡыр заттар ине. Вәли мулла ла, атайым да яһил, фанатик муллалар менән артыҡ аралашырға тырышманы. Был шәйехтәрҙең иң ғалимы Троицкиҙан Зәйнулла менән Муллаҡайҙан Ғабдулла ине. Бохарала уҡыған Ғабдулла дин ғилемендә бик абруйлы, ғәрәпсә һәм фарсыса шиғырҙар яҙған бер остаз булды. Нәкшбәндтең Һиндостандағы "Мөджеддид-и халиди" тәриҡәтенең даирәһенән ине. Быларҙың мәҙрәсәләре Бохара, айырыуса Хорезм мәҙрәсәләре тәртибендә ҡоролдо. Әммә улар Ҡаҙан тарафтарындағы Ҡышҡар һәм Төнтәр муллалары кеүек, шулай уҡ башҡорт илендәге бик күп ишандар кеүек фанатик кешеләр түгел ине. Барыһы ла сәйәсәт хаҡында фекер йөрөтөрлөк аңлы кешеләр булды.

### Бер аҙ әсәйем хаҡында

1918 йылда Ырымбурҙа Советтар һәм 1944 йылда Төркиәлә Исмәт паша тарафынан төрмәгә ябылып, китап уҡыуҙан мәхрүм ителгәс, һәр саҡ әсәйемдән өйрәнгән шиғырҙарҙы, Йәсәүи мөнәжәттәрен уҡыр инем. Шул ваҡыт әсәйем йоғонтоһоноң ни тиклем мөһим булғанлығын аңланым. 1944 йыл ваҡиғалары заманында атайым хаҡындағы хәтирәләрҙең күбеһе онотолған, әсәйем иһә һаҡсы фәрештә кеүек һәр саҡ янымда булды. Унаң миңә өйрәткән фарсыса һәм төркисә шиғырҙары тик әхлаҡи шиғырҙар ғына түгел ине, улар араһында әҙәби-эстетик шиғырҙар ҙа бар ине. Һуныраҡ Навоиҙың бөтә әҫәрҙәрен башынан аҙағынаса өйрәнгәс, әсәйем миңә ятлатҡан ғәзәлдәрҙең ошо шағир әҫәрҙәренән алынған айырым өҙөктәр икәнен аңланым. Миңә йәштән өйрәткән әхлаҡи шиғыр һәм хикәйәләр ҙә ниндәйҙер "хрестоматия"ла, антология кеүек бер китапҡа тупланған әҫәрҙәр булһа кәрәк, уларҙың күбеһен әсәйем хәтерендә һаҡлаған. Улар, башлыса, Аттар, Руми, Навои, Йәсәүи, суфый Аллаяр кеүек авторҙарҙан алынған өҙөктәр.

Был шиғырҙарҙың ҙур әҫәрҙәрҙән айырым өҙөктәр икәнлеген, фарсы теленең әсәйемдән өйрәнгән әйтелеше дөрөҫ булыуын мин аҙаҡ белдем. Иран дәүләтенең хәҙерге хөкөмдары Мөхәммәт Риза шаһ менән ике тапҡыр осрашыуҙа һөйләшкән саҡта ул: "Фарсыса ҡайҙа өйрәндегеҙ?" - тип һораны. "Әсәйемдән", тип яуап бирҙем. "Әсәйегеҙ Иран ҡыҙы инеме ни?" - тип ғәжәпләнде. Сөнки шаһиншаһ минең фарсы телендәге әйтелешемдең Бохара тажиктары һөйләшенән айырылыуына иғтибар итте. Ихтимал, атайымдың ғәрәпсәһе кеүек, әсәйемдең фарсыһы ла Көҙән һәм Һатлыҡ улдарына XVIII быуатта мөғәллимлек иткән дағстанлы остаздар тарафынан таратылған әҙәби фарсы теле булғандыр. Урта һәм Яҡын Шәректең тормошон бик яҡшы өйрәнеү, ул илдәрҙә күп самими дуҫтар ҡаҙаныу мөмкинлеге биргән фарсы телен миңә ихлас өйрәткәне өсөн әсәйемә ғүмер буйы рәхмәт уҡыйым.

### Муллағол диуана

Әсәйем фарсыны тел буларак ҡына түгел, XII быуатта йәшәгән суфый шағир Аттар менән XVIII быуатта Бохарала төркисә һәм фарсыса ижад иткән суфый Аллаярҙың мистик фекерҙәренең теле буларак үҙләштергәйне. Әсәйем беҙгә йыш килеп йөрөүсе Муллағол диуана исемле бер дәрүиштең (мин бәләкәй саҡтарҙа илле йәштәрҙә булғандыр) бик ҙур йоғонтоһо аҫтында ине. Ҡыпсаҡ ырыуынан булған был дәрүиш Төркөстанда, Һырдарьяла Яси ҡалаһында йәшәгән, беҙгә артыҡ мәғлүм түгел Йәсәүи тәриҡәтенән, зекер әйтеүҙәре ҡыҫҡырып дини шиғырҙар уҡыуҙан, башын алғаартҡа болғап, ырғаңлап йөрөүҙән ғибәрәт ине. Атайым зекерҙәрҙе ауыҙ эсенән тауышһыҙ уҡыған Нәкшбәнд тәриҡәтенән булһа ла, башҡаларҙың "джаһри" тигән зекерҙәрен ҡәнәғәтләнеп тыңлар ине, һәм Муллағолға намаҙҙан һуң ғәрәпсә суфый доғаларын хәтерләтеп, уның "йәһү" тип ырғаңлай башлауына сәбәп була торғайны. Бейеүгә оҡшаған был ырғаңлауҙы, башын алға ла, артҡа ла хәрәкәт иттереүҙе фарсыса "әррә", йәғни "бысҡы зекере", төркисә "сапҡын" тип атарҙар ине.

Муллағолдоң, мәсеткә бармайынса, өйөбөҙҙә уҡыған намаҙҙарынан һуң әйткән был зекерҙәрен әсәйем бик ҡәнәғәтләнеп тыңлай торғайны. Әсәйем был дәрүиштең төркисә һәм фарсыса һөйләгән шиғырҙарын ятлап, бөгәләрен яҙып алыр һәм миңә лә аңлатыр ине. Уларҙың барыһы ла дини, әхлаҡи шиғырҙар. XII быуаттағы бөйөк төрөк суфыйы Әхмәт Йәсәүиҙән башланған суфыйлыҡ рухын был шиғырҙар тулҡынландырғыс рәүештә аңлата торғайны. Мәҫәлән: "Юлын тапҡан изгеләрҙән, юл нимә ул, тип һораһам? Уларҙың теҙенә башым эйеп ялбарһам, ни була? Бейек тауҙар түбәһенә менеп заһит булһам? Аҡ болоттар ағылдырып, бөтмәҫ ямғыр яуҙыраһам? Ҡороған ағастарҙы терелтеп, баҡсаға әүерелдерһәм булмаймы? Шоңҡар ыласын ҡош булараҡ, болоттарға тейеп осоп, һаңһыҙ януар аулаһам, турғайҙарға ҡушылһам, Алла исемен тукһан мең тапҡыр әйтеп, былбылдарға ҡушылып, унға-һулға осһам, булмаймы?"

Муллағол, бөгзе дини шиғырҙарҙы йыр сифатында йырлап, ҡурайҙа уйнай торғайны. Ислам традицияларын ул ошо формала өлкәндәр һәм балалар ҡаршыһында йәнләндерер ине. Унын әйтеүенә ҡарағанда, фарсыса шиғырҙар ижад иткән мәшһүр Шәмс Тебризи боронғо заманда төркисә лә шиғыр һөйләгән, бейеүҙәре, шиғырҙары менән мосолмандарҙы рухландырған бер ҡыҙыу дәрүиш булған.

### Атайымдың Троицкиға сәйәхәте

Июль аҙаҡтарында Ирәмәл тигән сабынлыҡтарҙа атайым ойоштороған бесән өмәләре бик күңелле үтә торғайны. Уларға ҡәбиләбеҙҙең Илсеҡ Тимер тип йөрөтөлгән тармыты йәшәгән ауылдарҙан күп кеше килер, күп мал һуйылыр ине. Был беҙҙең ғаиләбеҙҙең ҙур байрамы кеүек була торғайны. Эш бөтөү менән атайым дуҫтарына һәм шәйехтәренә сәйәхәткә китә. Сәйәхәт Троицк ҡалаһындағы рухи етәксеһе Зәйнулла шәйехте барып күреү менән тамамлана. Юлда Ҡарағай Ҡыпсаҡ, Бөрйән ырыуҙарына ҡараған дуҫтарының һәм шәйехтәрҙең йәйләүҙәрендә мәжлестәр ойошторолор ине. Унда ғилми, дини, хатта ҡайһы бер сәйәси мәсьәләләр хаҡында һөйләшә торғайнылар. Кире ҡайтҡанда атайым, үҙҙәрен дастан ҡаһарманы Сура батырҙың ейәндәре, тип иҫәпләгән Мәһәҙи һәм Әмин ауылы мосолман казактары, Түңгәүер, Түңгәтар, Тамьян һәм Ҡатай ҡәбиләләре юлы менән килеп, ундағы дуҫтары менән күрешер ине. Был сәйәхәт ай ярымға һуҙыла.

Һәр йыл ҡабатланған сәйәхәттең өсөһөндә мин дә ҡатнаштым. Минең бурыс - ат менән арба бағыу. Һәр сәйәхәт фекер хаятыма йоғонто яһаны. 1904 йылдағы сәйәхәтебеҙ рус-япон һуғышына, 1905 йылдағыһы рус инҡилабы көндәренә, 1906 йылдағыһы рус Думаһы тирәһендәге көрәш заманына тура килде. Мин дини мистиканы яратмайым. Ике йөҙлө, тип хис иткән шәйехтәргә нәфрәт хисе тоя инем. Шуның менән бергә, Муллаҡайҙан Ғабдулла хәҙрәт, Ҡулбаҡтынан Ғәбделханнан хәҙрәт һәм Троицкиҙан атайымдың рухи етәксеһе Зәйнулла хәҙрәт кеүек эскерһеҙ инсандарҙы, әхлаҡ һәм кешелеклелек өлгөһө булғандарҙың хөрмәт иттем. Был өс шәйехтән бөгзе яҡшы эштәргә лә өйрәндем. Өсөнсө тапҡыр, 1906 йылда барғаныбыҙҙа Зәйнулла ишан миңә ныҡ илтифат күрһәтте. Йәш булыуыма ҡарамаҫтан, миңә төрлө һорауҙар биреп, яуабымды диҡҡәт менән тыңланы һәм йүнәлеш биреүсе һүҙҙәр һөйләне, һәр һөлдә, төрлөсә һынап ҡараны. Бер көн иртәнге сәй мәжлесендә тағы бер нисә һорау бирҙе, белгән ҡәҙәр яуап ҡайтарҙым. Һуңынан йыйылған барлыҡ кеше алдында: "Ал, улым, бәлки, берәй нәмә һатып алырһың", - тип, ҡулыма ун тинлек алтын аҡса тотторҙо. Мин был аҡсаға, "Хеҙмәт" исемле китап лавкаһына инеп, Ғаззалиҙың теологияны тәнҡит иткән бер әҫәрен, Мысырҙа һәм Истанбулда баҫылған һәм Ислам ижтимағиәтенә һәм фәлсәфәһенә бағышланған нәшриәтте, астрономия һәм физика фәне буйынса китаптар, Толстойҙың "Крейцерова соната" китабының һәм ҡайһы бер башҡа рус романдарының ғәрәпсә тәржемәләрен, французса өйрәнеү өсөн төрөксә яҙылған "Французса һөйләшеү китабы"н һәм бер рус китап лавкаһынан Толстойҙың мәмләкәтебеҙҙә минең тыуыуымдан һуң, 1891 йылда булған ҙур аслыҡ хаҡында һөйләгән "Аслыҡ йылдары" исемле әҫәрен һатып алдым.

Бер нисә көндән шәйех минән, аҡсаңды нимәгә тотондоң, тип һораны. Мин алған китаптарымды һанап сыҡтым. Маҡтаны. Русса беләһең, французса ла өйрәнә алһаң, бик яҡшы булыр, тине. Физика һәм астрономия китаптарын алыуымды ла хупланы. Айырыуса Толстойҙың аслыҡ йылдарына бағышланған хәтирәләре турһында, яҡшы китап алғанһың, тине. Шәйех был ун тинде мине һынау өсөн биргән булһа кәрәк. Һуңыраҡ мәжлестәрҙә әлеге китаптарҙың ҡайһыларын уҡыуымды һәм уларҙа низәр яҙылыуын да һораны. Ғаззалиҙың "Әл мункиҙ ән әл далал", йәғни "Яңылыш юлдарға баҫыуҙан ҡотҡарыусы" исемендәге әҫәрен алыуымды һөйләгәс, шәйех, быны хәҙергә аңлай алмаҫһың, тине. Мин дә: "Быны ише китаптарҙы ғәрәп теленән белемем тәрәнәйгәс уҡырмын, тип алдым", - тигәс, арҡамдан һөйөп, тағы ла аҡса бирҙе. Ун биш йәштә булыуыма ҡарамаҫтан, китапты дөрөҫ һайлауымды шәйех башҡа мәжлестәрҙә лә маҡтап һөйләне, быны ишеткәс, әлбиттә, минең күкрәк ҡабарҙы. Мөхитебеҙҙә бик ныҡ хөрмәт ителгән был заттың маҡтау һүҙҙәре дәртләндереүсе бер көс булды. Шуның кеүек дәртләндереүсе хәл-ваҡиғалар булмаһа, бәлки, тормошом ғилемдән башҡа бер юлдарға йүнәлеш алыр ине. Мәҫәлән, Ҡаҙан шағиры Туҡай ҙа, шундай хәлдәргә ишара яһап: "Был фәҡирҙең башына низәр килмәне, тик милләтем башымдан һыйпап, миндә үҫергә теләк тыуҙырҙы", - тигән. Әгәр шәйехтең дәртләндереүе булмаһа, мин, ихтимал, күптәр кеүек, ун биш йәшемдән сауҙа эшендә приказчик булып китер инем.

### Атайымдың дин аңлайышы

Атайым, сәйәхәттән ҡайтыр-ҡайтмаҫ: "Фазханға китәм", - тине. Ул Алағуянбашы ауылындағы Ҡаҫҡынбайҙарҙың береһе. Яҡшы ҡылыҡлы, күңелле, йомарт һәм егет кеше ине. "Әхмәтшаһ шәйехенән ишанлыҡ алһа (йәғни, шәйехлек дәрәжәһенә күтәрелһә), беренсе мөрите мин буласаҡмын", ти торғайны. Ниһайәт, быйыл Зәйнулла шәйех атайыма шәйехлек дәрәжәһе биргән, яҙыулы таныҡмаһы ла бар ине. Әммә атайым: "Заман хәҙер мистика, дин заманы түгел, ул заман үтте. Ишан (йәғни шәйех) дәрәжәһен алдым, әммә бер кемде лә мөрит итеп ҡабул итмәйәсәкмен һәм үҙемде ишан тип атарға ла рөхсәт итмәм. Тик Фазханды мөрит итеп алам, сөнки уға һүҙ бирҙем", - тине.

Фазхан - бер ни тиклем байлығы булған ауыл кешеһе. Муллаҡай хәҙрәттең уҡыусыһы. Фарсыса һәм аҙыраҡ ғәрәпсә белә ине, беҙҙән йөҙ саҡрым тирәһендә йәшәне.

...Бер аҙ ваҡыт үткәс, икенде намаҙын уҡыныҡ. Фазхан бик иланы. Атайым менән Фазхан Йәсәүигә эйәреүсе мосолмандар яратҡан "Суфый ҡиәфәтле булдың, мосолман була алманың", тигән шиғырҙы һәм Муллағолдоң шул уҡ мәғәнәләге фарсыса шиғырын тулҡынланып, ҡат-ҡат уҡыны. Шул көнө атайым аҡшам намаҙынан һуң Фазханды мөрит итеп ҡабул итте һәм үҙе лә шәйехлеккә тәүбә ҡылды. Фазхан да: "Мулла шәйех булды, бер кемде лә мөрит итмәне, фәҡәт мине алды", тип ғорурланыр ине. Ул да Муллағол кеүек ғәжәйеп бер инсан булды. Ихлас әңгәмәсе ине. Бик күп шиғыр һәм дастан белде. Ҡайсаҡ ярайһы ғына ныҡ эскән хәлдә лә һис бер намаҙын ҡалдырмаҫ, әммә яратҡан Аллаһына һүҙ тейҙерер ғәҙәте лә булыр ине. "Фазхан алғы тештәрен землемер (рус хөкүмәтенең ер үлсәүселәре) менән һуғышып һындырған, тормошонда мосолмандарға һәр саҡ яҡшылыҡ эшләй. Алла унын ҡайсаҡ һөйләгән көфөрҙәрен ғәфү итә. Ул - мин белгән иң самими мосолман, Алланың иң яратҡан ҡолдарының береһелер", - ти торғайны атайым. Был осраҡта атайымдың суфыйлыҡ һәм мосолманлыҡ аңлайышы яҡшы күренә. Ошо мөритлек тарихынан һуң Фазхан башҡа эсмәҫ булды. Атайым да: "Минең ишанлыҡтың берҙән-бер файҙаһы Фазханды эскелектән айырыу булды", тип, кеткелдәп көлөр ине. Атайымдың шаиртыуы ни тиклем йоғонтоло, ни тиклем ҡеүәтле икәнен шунда күрҙем.

---

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## СҮЛМӘКТЕ АЛЛАЛАР ЯҺАМАЙ

Бер заман солтан һарайында даны тирә-яҡҡа таралған фокус күрһәтеүсе сығыш яһаған, ти. Фокуссының мөғжизәләрен күреп, халыҡтың иҫе киткән. Солтан да уның оҫталығына һоҡланыуын йәшерә алмайынса, былай тип әйткән: "О, Хоҙай, булғас та була икән ғәжәп талантлы кешеләр. Был ябай кеше түгел, генийҙыр". Ә солтандың вәзиренә ябай фокуссыны күккә күтәреп маҡтау оҡшап етмәгән. Ул солтанына: "Ғәли йәнәптәре, сүлмәкте лә аллалар яһамай бит. Фокуссының оҫталығы - уның тырышлығы, ныҡышмалылығы һәм оҙайлы күнегеүҙәре һөҙөмтәһе генә ул". Ошо һүҙҙәрҙе ишеткән солтандың кәйефе ҡырылған, асыуы ҡабарған, һәм ул, каштарын йыйырып, вәзиренә былай тип әйткән: "Эх, һин, ҡәҙер белмәгән зат! Ни йөҙөң менән ошондай оҫталыҡҡа ябай күнегеү аша өлгәшеп була, тип ялғанлайһың! Мин әйткәнмен икән, был - талант, тип, тимәк, тап шулай". Ул вәзиренә мыҫҡыллы ҡараш ташлаған да, ярандарына: "Был әҙәмдең һис бер таланты юҡ, булмаҫ та. Ябығыҙ уны зинданға! Был үүнһеҙгә быҙау ғына иптәш булырлыҡ, быҙау менән бергә ябығыҙ!" - тип бойорған.

Зинданда вәзир тик ятмаған: ул көн һайын төрмә башняһының баҫҡыстары буйлап, быҙауын күтәреп, бер менеп, бер төшөп йөрөй икән. Көндәр, айҙар үткән, быҙау үҫеүгә, ә уны күтәреп йөрөп, күнекмәләрен дауам иткән вәзир иҫ киткес көслө батырға әйләнгән, ти. Берҙән-бер көндө солтан, әлеккe вәзирен иҫкә төшөрөп, уны һарайына алып килергә ҡушҡан. Үгеҙ күтәреп килгән вәзирен күреп, солтан ҡысҡырып ебәргән: "О, Хоҙай, булғас та була икән был донъяла ғәжәп кешеләр. Был ябай кеше түгел, был үҙе бер генийҙыр!" Ә вәзире, итәғәтле генә итеп, әлек әйткән һүҙҙәрен ҡабатлаған: "Ғәли йәнәптәре! Сүлмәкте аллалар яһамай бит. Минең көсөм - бары тик тырышлығым, ныҡышмалылығым һәм оҙайлы күнегеүҙәрем һөҙөмтәһе генә ул".

**(Фарсы хикәйәттәренән.)**

**✓ Кеше Аллаһ тарафынан туранан-тура, механик рәүештә идара ителеүсе йән эйәһе түгел, юғиһә, Ҡөрьәндә мосолмандың гонаһтары өсөн мотлаҡ үҙе яуап тотасағы тураһында киҫәтеү күп тапҡырҙар ҡабатланмаҫ ине.**



# СУФЫЙСЫЛЫҠ



**Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыл тулыуға бағышланған саралар сиктәрендә баш ҡалабыҙҙа Мәскәү ҡунағы, Хәйбулла районында тыуып үҫеп, Рәсәй Фәндәр Академияһының Философия институтында эшләүсе философия фәндәре докторы Илшат Рәшит улы НАСЫРОВ булып китте. Ул ҡәҙимгә философ ҡына түгел, ә Ислам дине белгесе лә. Ошо өлкәлә киң мәғлүмәтле ғалим булараҡ, ул халкыбыҙға күренекле суфый шәйехе Зәйнулла ишандың һәм уның замандаштарының рухи мираҫын кире ҡайтарыу өсөн байтаҡ эштәр башҡарҙы. Редакциябыҙҙа уҙған осрашыуҙа ул журналистарыбыҙ Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВТЫҢ, Әхмәр ҮТӘБАЙҘЫҢ һәм гәзитебеҙҙең дуҫы Салауат КИЛДИНДЫҢ һорауҙарына ентекле һәм төплө яуаптар бирҙе. Ошо мәғлүмәт һеҙҙең өсөн дә ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайбыҙ.**

**▸ Исламда суфыйсылыҡ йүнәлешенең килеп сығышын нисек аңлатырға була?**

▸ Суфыйсылыҡтың барлыкка килеүе тураһында төрлө ҡараштар бар. Уның нигеҙендә христиан монахтарына хас үҙ-үҙеңде сикләү, йәғни аскетизм ятып, уларҙың ислам дине йоғонтоһона бирелеүенән тәүге суфыйҙар туғанлығы ойошоп киткән, тиеүселәр ҙә бар. Суфыйҙар араһында, донъя малынан ваз кисеп, дәрүишлектә йөрөүселәр булған хәлдә лә, аскетизм суфыйсылыҡтың төп сифаты түгел. Минеңсә, суфыйсылар тарихын Ислам ерлегенән айырып ҡарап булмай, сөнки шул уҡ шәриғәт - суфыйсылыҡтың нигеҙ ташы. Был йүнәлештә Исламдағы ересь, йәғни традицион дини тәғлиматтә боҙоу, тип ҡараусылар ҙа булған. Әммә Исламда христиан сиркәүенең ҡәтғилеге юҡ, дини фекер айырымлыҡтары өсөн ереста (мөртәтлектә) ғәйепләү юҡ. Ислам динендә сиркәү кеүек иерархиялы ойошма ла юҡ, ереста ғәйепләп, махсус ҡарар сығарыу ҙа ҡаралмаған. Шулай булғас, суфыйсылыҡты Ислам тәғлимәтен боҙоусы йүнәлеш, тип ҡарау төптө дөрөҫ түгел.

**▸ Суфыйҙар туғанлығының мистик ойошма булыуы тураһында ни әйтер инегеҙ?**

▸ Ҡөрьән һәм Сөннәлә мистикаға урын юҡ, сөнки Аллаһ бар һәм ул бер генә, әммә уны һис кем белә лә, күрә лә алмай, һәм ошо үҙе үк суфыйсылар ғәмәлиәтенә ҡаршы килә, тип әйтәләр. Әммә тәриҡәт шәриғәтҡә ҡаршы түгел, сөнки дини фекер һәм белемгә суфый ғәмәлиәтен ҡушып, Ислам хәҡикәтенә юлды тиҙерәк табып була. Ғөмүмән, Исламда христиан динендәге рух һәм тән ҡапма-ҡаршылығы юҡ, кеше баштан уҡ гонаһлы тип ҡаралмай. Суфый ғәмәлдәре, улар ҡулланған ысулдар кешенең тәненә лә файҙалы булып, тәненән бигерәк, рухи кимәлен дә бик юғарыға күтәрә алған.

**▸ Суфыйсылыҡ тәрикәттәренә, Ислам дине тарихы күҙлегенән ҡарағанда, ниндәй баһа бирергә була?**

▸ Суфый туғанлыҡтары бер ваҡытта ла ниндәйҙер айырымланған секта рәүешендә булмаған. XI быуатта, күренекле суфый остазы әл Ғаззали заманында, суфыйсылыҡ мосолман донъяһында киң таралып китә. Ә XIII быуатта ғәрәп хәлифәте тарҡалғас, суфый туғанлыҡтары донъяла Ислам берлеген һаҡлап алып ҡалыусы берҙән-бер көс була. Урта Азияла, Кавказда, Волга буйында, Уралда Ислам динен таратыусы тәүге миссионерҙар шул уҡ суфыйҙар булыуын оноторға ярамай.

**▸ Суфый тәғлимәте менән таныша башлаһаң, уға хас булған бер үҙенсәлеккә иғтибар итмәй булмай: суфыйсылар фәлсәфәне бик үҙһенмәй, күбеһенсә динилектең ғәмәли яҡтарын өҫтөн күрә. Улар дини хәҡикәтте фекер йөрөтөп түгел, ә махсус ысулдар ҡулланып асырға тырыша. Был суфыйсылар тәрикәтенең шәриғәттән ситкә тайпылыуы түгелме һуң?**

▸ Суфыйҙар был кеше шулай әйткән, теге кеше - тегеләй, һымағырак фекерҙәргә һылтанырға яратмай. Суфый хикмәте һүҙгә түгел, ә ғәмәлгә нигеҙләнә. Һүҙ изге ғәмәл менән берлектә булып, ғибәҙәт ҡылыу ихлас булырға тейеш. Суфыйҙар Мөхәммәт бәйгәмбәребеҙҙең ихсан төшенсәһе тураһындағы хәҙисенә таяна. "Нимә ул ихсан?" тигәнгә ул былай тип яуаплаған: "Аллаһы Тәғәләгә табынғанда уның үҙен күргәндәй табынырға кәрәк. Һин Уны күрмәһәң дә, Ул һине күрә бит!" Суфыйға фәлсәфәнең артыҡ кәрәге юҡ, Ислам хәҡикәтенә ул ғәмәли юл менән төшенә. Әммә суфыйсылыҡты Исламдың башҡа философик аспекттарынан айырып, йәғни уларға ҡаршы ҡуйып ҡарау дөрөҫ түгел. Исламдың бөтә йүнәлештәре лә бер үк нигеҙгә - Ҡөрьәнгә таянып, Аллаһтың берлеген, Мөхәммәт бәйгәмбәрҙең уның рәсүле булыуын таный. Ислам илаһиәте ғилемендә ошо нигеҙҙә фәлсәфәүи йүнәлештәр барлыҡҡа килеп, күренекле теологтар үҫеп сыҡҡан. Мәҫәлән, суфый философы ибн Ғәрәбиҙең «Барлыҡтың берлеге» тигән китабы киң билдәлелек таба. Тимәк, суфыйсылыҡты ла Ислам фәлсәфәһенең бер тармағы итеп ҡарарға була.

**▸ Суфыйсылар тәрикәттәре шәйех остаздары тирәләй ойошҡан мөриттәр төркөмдәренән тора. Был система Боронғо Грецияның философик мәктәптәрен иҫкә төшөрә. Ошо турала һеҙ нимә әйтер инегеҙ?**

▸ Донъялағы ниндәй генә мистик традицияны алма, ул Исламда булһынмы, христианлыҡта йә буддизмдамы - улар бер дөйөм механизм нигеҙендә формалаша. Һәр суфый тәрикәтенең башында билдәле бер шәхес тора. Һәр шәйех хәҡикәткә ирешеү юлын үҙенсә аңлай. Ул үҙенең ҡараштарын сағылдырған система төҙөй, был система кешене Аллаһы Тәғәләгә яҡынайта торған юлды, һуҡмакты (тәрикәтте) билдәләүҙән, ошо һуҡмаҡтан алып бара торған мистик ысулдарҙы ғәмәлгә ашырыуҙан тора. Тәрикәт башында торған шәйех үҙ янына мөриттәрен туплап, уларҙы тәрикәт ысулдарына өйрәтә башлай. Ҡыҙыҡһыныу арта барған һайын, төркөм дә киңәйә бара. Тәүге төркөмдән сыҡҡан яңы шәйехтәр һуңынан үҙ төркөмдәрен барлыҡҡа килтерә - бына ошо рәүешле суфыйҙар туғанлығы үҫә һәм тирә-яҡҡа тарала башлай. Һәр тәрикәттең үҙенең рухи генеалогияһы булып, силсилә тип аталған рухи туғанлыҡ линияһы төҙелә. Ғәҙәттә, силсилә Мөхәммәт бәйгәмбәргә барып тоташа.

**▸ Суфыйсылыҡ мосолманға дин юлында рухи үҫеш мөмкинлеген булдыра, ә уларға ҡаршылар үҙ ҡараштарын нисек дәлилләй һуң?**

▸ Суфыйсылыҡ ханбалиттар, ваххабиттар тарафынан инҡар ителә, сөнки улар Ислам хәҡикәте Хоҙайҙан Мөхәммәт бәйгәмбәр аша тулыһынса еткерелгән, тип иҫәпләй. Ғөмүмән, ваххабиттар Ислам ғәмәлиәтендәге үҙгәрештәргә, ниндәй ҙә булһа яңылыҡтарға ҡәтғи ҡаршы сыға, күп нәмәләрҙе тыйыу, башҡа фекерле кешеләрҙе дошман итеп ҡарау уларҙы фундаментализм юлына алып сыға. Мәҫәлән, Исламда мосолман ғәмәлдәре биш төрлө позицияға ярашлы баһалана: хәрәм - ҡәтғи тыйылған ғәмәлдәр, мәкруһ - хупланмай торғандары, мөбах - гонаһ тип һаналмағандары, мәндүб - өлгөлө булғандары, хәләл - рөхсәт ителгән, файҙалылары. Ваххабиттар хәҙерге заманға ярашлы булған күп нәмәләрҙе хәрәм, тип иҫәпләп, музейға, театр-концертҡа йөрөү, телевизор ҡарау кеүек күренештәргә ҡырҡа ҡаршы сыға. Шул уҡ ваҡытта улар һаҡал йөрөтөү, Мөхәммәт бәйгәмбәр кеүек ҡыҫҡа салбар кейеп йөрөүҙе хуплап ҡына ҡалмай, һәр мосолман өсөн мотлаҡ үтәлергә тейешле тәртип рәтенә ҡуя. Теология өлкәһенә килгәндә, улар дин буйынса ниндәй ҙә булһа эҙләнеү мөмкинлеген инҡар итә: йәнәһе, Ҡөрьән һәм Сөннәлә барыһы ла әйтелгән бит. Хоҙайҙың һуңғы бәйгәмбәре Мөхәммәт кешеләргә Ислам хәҡикәтен тулыһынса еткергән, тип иҫәпләй улар.

**▸ Ислам буйынса кеше Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында бер ябай объект сифатында ғына ҡуҙаллана түгелме һуң?**

▸ Юҡ, әлбиттә. Кеше Хоҙайҙың Ерҙәге хәлифе, шуға ла уға күп бурыстар, ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелгән. Мосолмандарҙың тәүге быуындары Ислам фәлсәфәһе, Ҡөрьән асылы тураһында фекер-бәхәс ҡорорға әүәҫ булмаған. Өсөнсө-дүртенсе быуын мосолмандары Хоҙайҙың ни өсөн кафырҙарҙы юҡ итмәүе, гонаһ һәм шәхси яуаплылыҡ һәм башҡа шундай һорауҙарға яуап эҙләй башлай. Мосолман ҡол түгел, Хоҙай уға һайлау хоҡуғы, ирек биргән, әммә ҡылған ғәмәлдәре өсөн инсан үҙе яуаплы. Кеше Аллаһ тарафынан туранан-тура, механик рәүештә идара ителеүсе йән эйәһе түгел, юғиһә, Ҡөрьәндә мосолмандың гонаһтары өсөн мотлаҡ үҙе яуап тотасағы тураһында киҫәтеү күп тапҡырҙар ҡабатланмаҫ ине.

**▸ Суфыйҙарҙы мосолмандарҙы камиллыҡҡа өндәүселәр, тип әйтеп буламы?**

▸ Камиллыҡ идеалы башлыса христиандарға хас. Улар Иисус Христосты, йәғни Ғайса бәйғәмбәрҙе, камиллыҡ идеалы, һәр гонаһлы христианды ҡотҡарыусы рәүешендә ҡабул итә. Христиан монахтары, донъялыҡтан ваз кисеп, руханилыҡ аша үҙҙәрен таҙартырға, камиллаштырырға ынтыла. Ә Исламда идеалға табыныу юҡ, камиллыҡ тик Аллаһы Тәғәлә генә эйә. Ябай мосолманға бер ҡасан да саманан тыш талаптар ҡуйылмаған. Ул Ислам ҡанундарын үтәп, әхлаҡлы, иманлы әҙәм булһа, шул еткән. Суфыйҙарға килгәндә инде, уларға эҙләнеүсәнлек хас, араларында дәрүиштәр ҙә байтаҡ була. Суфый-дәрүиштәр донъя мәшәҡәттәренән ваз кисеп, юлда йөрөүҙе хуп күргән. Хатта дәрүиштәр бер өйҙә рәттән ике тапҡыр ҡунмаҫҡа, тип ант биргән. Ләкин аскетизм суфыйҙарҙың төп принцибы түгел, уларҙың күбеһе үҙ өйҙәрендә йәшәп, ғаилә ҡороп, ҡәҙимге тормош алып барған. Суфыйҙар тураһында дөрөҫ мәғлүмәт булмауы арҡаһында халыҡта «Суфыйны ни ул, ябыҡ булмағас, ас йөрөмәгәс» кеүегерәк ҡараштар таралған.

**▸ Билдәле булыуынса, Ислам тәғлимәтен тәсфирләүселәр, шулай уҡ суфыйҙар араһында ла ҡапма-ҡаршылыҡтар, төрлө низағтар булғылаған. Халыҡта «Уҡып, суфый булмаҫһың» кеүек кирерәк баһалы ҡараштар барлыҡҡа килгән. Ғөмүмән, халыҡ суфыйсылыҡҡа ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булған һуң?**

▸ Халкыбыҙ хәтерендә әлегә тиклем суфыйҙар тураһында төрлө риүәйәттәр, иҫтәлектәр йәшәй. Бүтән халыҡтарҙа юҡ бит ул. Ошо үҙе үк суфыйҙарҙың халыҡ алдындағы абруйын күрһәтеп тора. Беҙҙә суфыйсылыҡты укыуҙан, мәғрифәттән башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Бына XIX быуаттың 30-сы йылдары аҙағында дини белем биреү өлкәһендә йәҙитселәк тип аталған яңыса укытыу ысулы тарала башлай. Йәҙитселәр дини белем биреү менән бер рәттән, донъяуи фәндәрҙе укытыу яғында була. Быны мосолман мәғрифәтен модернизациялау, тип ҡарарға кәрәк. Әлбиттә, иҫкелеккә йәбешеп яткан, ҡәҙимселәр тип аталған консерватор муллалар яңылыҡҡа ҡаршы сыға, ошо нигеҙҙә бәхәстәр ҡуйыра. Яңылыҡты ғәмәлгә ашырыусылар булмаһа, бер ниндәй ҙә алға китеш булмаҫ ине. «Ҡотоп Заман» титулына эйә булыусы Шәйех Зәйнулла Рәсүлев тап шундай халыҡты алға әйҙәүсе рухи етәксе булып танылa ла инде. Тап Зәйнулла ишандың башланғысы, фатихаһы һәм ярҙамы нигеҙендә суфыйҙар Башҡортостанда башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ шәкерттәрен яңыса укыта башлай. Уның менән фекерҙәш суфый хәлфәләре, мөриттәре кәңәш-ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәндә, үҙенең абруйына таянып, Зәйнулла Рәсүлев тейешле фәтеүәләр (ҡарарҙар) сығарып булған. Ғөмүмән, уның тырышлыҡтары менән башҡорт мосолмандары мөхитенә күп кенә инновациялар индерелеп, халкыбыҙҙың мәғрифәти һәм мәҙәни үҫеше өсөн һәйбәт шарттар тыуҙырыла.

**▸ Башҡортостанда суфыйсылыҡтың киң таралып китеүе ниндәй сәбәптәр менән аңлатыла?**

▸ Башҡорт иле мосолмандар тарафынан яулап алынмаған, Ислам башҡорттар араһында оҙаҡ ваҡыт дауамында тыныс шарттарҙа тарала башлай. 922 йылда ибн Фаҙлан күргән башҡорттар араһында мосолман динен ҡабул итеүселәр булған. Монгол-татар яуына тиклем үк Бохара тарафтарынан Волга-Урал төбәгенә сауҙагәрҙәр менән бергә мосолман миссионерҙары килә башлай, улар суфый булған. Тимәк, Башҡортостанда суфыйсылыҡ тамырҙары Ислам дине тарала башлаған тәү осорға барып тоташа.

Башҡорттар үҙ дини халыҡ булмаған, тип әйтәләр. Әммә халкыбыҙҙа борон-борондан уҡ инсафлыҡ, ихласлыҡ вә ихсанлыҡ (изгелек) хөрмәт ителгән. Былар - Ислам талаптары. Үзбәкстандан килгән бер танышым: «Башҡорттар мәсеткә йөрөп, биш тапҡыр намаҙ уҡымаһа ла, мосолманлыҡ, Аллаһтың барлығына ышаныу уларҙың күңелендә йәшәй. Халкыбыҙ мосолманлыҡ йолаларын формаль рәүештә атҡарған ҡайһы бер ҡәүемдәрҙән үҙенең ихласлығы менән күпкә динлерәк», тип әйткәйне. Башҡорт иман һәм ихсандан ваз кисмәһә, Исламдан айырылмаҫ.

**▸ Нәҡшбәндиә суфыйҙары кешенең аңына ла, йөрәгенә лә иҫ киткес йоғонто яһай алыу ысулдарын белгән. Бындай мөмкинлектәргә суфыйҙар зекер әйтеү юлы менән ирештеме икән?**

▸ Ысынлап та, зекер әйтеүҙең кеше өсөн бөтә кимәлдә лә билдәле бер һөҙөмтәһе бар: уның мейеһендә, аңында, кисерештәрендә, физиологик торошонда үҙгәрештәр барлыҡҡа килеп, ул транска окшаш бер халәткә инә ала. Зекерҙе эстән дә, телдән дә әйтеп була, хәрәкәт тә ҡушылырға мөмкин. Суфыйҙар ни өсөн зекер әйтеүҙе үҙ иткән һуң? Был монодеизм күренеше, йәғни үҙ булмышыңды тулыһынса берҙән-бер объектҡа - Аллаһы Тәғәләгә йүнәлтеп, уның асылына яҡынлау рәүеше. Зекерҙе айырым-айырым да, төркөм менән дә әйтәләр. Мин Суданда күргән зекер әйтеүселәр төркөмә, доғаларын ҡыскырып

***Зәйнулла ишан Аллаһы Тәғәлә асылын белеүҙең иң юғары рухи бейеклегенә етеп, «Ҡотоп Заман» титулына лайыҡ булған. Был исем суфый иерархияһының иң юғары кимәленә етеүҙе белдереп, ошолай тип нарыҡланған суфыйҙың Хоҙай тарафынан һайлап алынғанлығын, уның вәли зат (Хоҙайға яҡын) булыуын аңлатҡан. Бындай титуллы суфыйға мосолман донъяһында контроллек итеү хоҡуғы бирелгән. Зәйнулла ишан бар Рәсәй мосолмандары мөхитендә оло абруй ҡаҙанған.***

✓ ***Нәҡшбәндиә - суфыйсылыҡтың өсөнсө йүнәлеше, уға агрессивлыҡ түгел, ә толерантлыҡ, айыҡ ҡарашлылыҡ хас. Шул уҡ ваҡытта ул бик үҙенсәлекле тәриҡәт, Хоҙай хозурына булған ынтылышта уның үҙенә генә хас ғәмәлиәте бар.***



# ҺУҠМАҠТАРЫ,

## йәки батырлыҡҡа илтер рухилыҡ

әйтә-әйтә, бейеүҙәге кеүек хәрәкәт башҡарып, шәйех ҡәбере тирәләй йөрөнө. Мин зекер әйтеүҙе мәжүсилек осоронан ҡалып, Исламда сағылыш тапҡан бер күренештер, тим. Ғөмүмән, суфый тәриҡәттәре ошо юҫыҡта байтаҡ тәжрибә туплағанлыҡтан, XIX-XX быуаттарҙа үҙҙәренә психологтарҙың иғтибарын йәлеп иткән. Суфыйҙар ғәмәли рәүештә кеше психологияһы нескәлектәрен бик оҫта өйрәнеп, үҙ маҡсаттарында ҡуллана алған.

**▶ Суфыйҙарҙың кешенең тәбиғәттән бирелгән мөмкинлектәрен уята алыуы һөҙөмтәһен күреп, Ислам диненә күсеүселәр бар, тиҙәр. Был ысынлап та шулаймы икән?**

▶ Эйе, быны менән килешергә мөмкин. Көнбайыштың Рене Генон, Ф. Шюон, Ален Делон, Роже Гароди кеүек танылған шәхестәре Исламды суфыйсылыҡ йоғонтоһо аша ҡабул итә. Улар суфыйсылыҡты Исламдың иң демократик йүнәлеше, тип таный. Суфыйсылыҡта башҡа дин тотоусыларға толерантлыҡ, түҙеп ҡарау көслө. Бына, мәҫәлән, Лондонда билдәле суфый остазы ибн Ғәрәби исемендәге йәмғиәт булып, уның ағзалары араһында протестант, католик христиандар ҙа бар. Уларҙы суфыйҙар асҡан мәңгелек хәҡиҡәттәр әсир иткән, сөнки хәҡиҡәт өсөн айырым конфессияның өҫтөнлөгө юҡ. Хатта христиан булып та, үҙҙәрен суфый, тип атаусылар бар.

**▶ Суфыйлыҡ – өҫкә кейгән кейем кеүек, кейһәң – бер халәттә, сисеп һалһаң – икенсеһендә, тигән ҡараш бар. Ул Исламға тиклем дә, христианлыҡҡа тиклем дә булған икән, тип өҫтәйҙәр. Был ҡарашты нисегерәк аңлатырға була?**

▶ Донъяла универсаль мистик тәжрибә булып, уның һәр бер диндә үҙенсәлекле сағылыш табыуы тураһында фекерҙәр бар. Әммә мин диндәрҙең ниндәйҙер универсаллегенә баҫым яһамаҫ инем: һәр конфессия үҙенең үҙенсәлекле айырымлығы менән билдәле. Ә бар донъяға билдәле булған суфыйсылыҡ тик Ислам ерлегендә, уның үҙенсәлекле тәғлимәте йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән. Христианлыҡ кешелә һәм йәмғиәттә ныҡ үҫешкән ҡапма-ҡаршылыҡты үтеп сыға алыу, гонаһлы Әҙәм балаларын ҡотҡарыу идеяһына ҡоролһа, Исламдың кешегә ҡарашы башҡасараҡ булыуына иғтибар итҡәйнек инде. Ислам иң элгәре үҙе өсөн, ҡылған ғәмәлдәре өсөн яуаплылыҡты кешенең үҙенә ҡайтара, уға дин вә әхлаҡ принциптарына тоғро булыуҙы һеңдерә.

**▶ Христиан динендә лә изгеләр хөрмәт ителә, изге суфыйҙарҙы халҡыбыҙ әүлиә, тип ихтирам итә. Бына ошо күренештәрҙә уртаҡлыҡ булғандай тойола. Ошолай фекерләү дөрөҫмө?**

▶ Юҡ, христиандарҙа рухи изгелек халәте тән булмышы яғынан боҙоҡ булмауға, рухилыҡҡа ғына хеҙмәт итеүгә бәйле булып, рухтың тәндән айырымлығын, уларҙың ҡапма-ҡаршылығын сағылдырып тора. Изгеләр изге рухтан тыуһа, тән тәүҙән үк гонаһҡа инеүҙән азат түгел. Шуға күрә лә христиандарҙа аскетизм сәбәптәре бөтөнләй икенсе, ул таҙарыныу, камиллашыу менән бәйле, монах ордендары ла шулай барлыҡҡа килгән. Исламда быңдай проблема юҡ, һәм Мөхәммәт бәйғәмбәр мосолмандарҙан һәр саҡта ла бары тик уртасыллыҡты, бөтә нәмәлә лә сама белеүҙе генә талап итә.

**▶ Мәсеткә йөрөп кенә ысын мосолманлыҡҡа өлгәшеп булмай. Кешенең һәр көндө мәсеткә барып, намаҙ үтәүе лә мөмкин түгел. Ул сәфәрҙә, урманда, яланда һ.б. мәсет булмаған ерҙәрҙә йөрөй. Был осраҡта кешенең мәсете уның йөрәгендә, тигәндәр суфый дәрүиштәр. Улар юл йөрөүҙе мәсеткә йөрөүҙән өҫтөн күргән. Быны нисек баһаларға һуң?**

▶ Суфыйсылыҡтың тәү осоронда зухд төшөнсәһе булған. Физик зухд христиан аскетизмына яҡын, әхлаҡи зухд кешенең ҡайһы бер ғәмәлдәренә сик ҡуйып, билдәле тыйыуҙар менән бәйле. Исламдағы ханбалит йүнәлеше яҡлылар ҙа донъяны батып китеп көтөүгә ҡаршы, мосолмандарҙы әхирәт тураһында уйлап йәшәргә саҡыра, әммә улар тәриҡәт юлын да хупламай. Уларса, әҙәми затҡа Хоҙай Тәғәләне танып белеү мөмкинлеге бирелмәгән, шуға күрә суфыйсылыр юлынан барыуҙы ханбалиттар тыя. Физик зухд нигеҙендә тәүге дәрүиштәр төркөмдәре барлыҡҡа килә, улар, күп булмаһалар ҙа, хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған. Суданда Мәүлит байрамы ваҡытында Әбделмән ҡалаһы мәсетенә төрлө тарафтарҙан дәрүиштәр йыйыла, баштарында осло башлы кәпәстәр, ҡыңғырауҙары зыңлап тора, иңбаштарына тоҡ аҫҡандар, ҡулдарында сыбыртҡыларына тиклем бар. Өс көн буйы байрам итеп, мәсеттә йоҡлайҙар.

**▶ Суфыйсыларҙың Тайфурия йәмғиәте ағзалары иҫереү аша трансҡа инеү ысулын ҡулланған, тип әйтәләр. Был шәриғәткә ҡаршы килмәйме һуң, хәмер мосолман өсөн хәрәм бит?**

▶ Эйе, суфыйҙар араһында трансҡа, фанаға, йәғни Хоҙайҙың барлығын һиҙеү-тойоу халәтенә инеү өсөн төрлө ысулдар ҡулланыла. Әммә был эсеп иҫереү менән бәйле түгел. Әлбиттә, фанаға инеү өсөн ҡайһы бер маргинал суфыйҙар араһында алкоголь, наркотик ҡулланыусылар ҙа булған, ләкин, дөйөм алғанда, был суфыйсылыҡҡа хас ғәмәл түгел. Әбү Язит әт Тайфур әл Бастани ысынлап та үҙенең мөриттәренә фанаға инеү ысулдарын өйрәткән, әммә фанаға инеү эсеп иҫереүҙе аңлатмай. Фана - Аллаһ хозурында үҙ-үҙеңде онотоу, үлеүгә тиң халәт. Был осраҡта Тайфурия суфыйҙары ҡулланған ысулға дөрөҫ интерпретация бирелмәгән, тип уйларға кәрәк.

**▶ Зәйнулла ишан ни өсөн тап Нәҡшбәндиә туғанлығын үҙ итте икән?**

▶ Нәҡшбәндиә - суфыйсылыҡтың өсөнсө йүнәлеше, уға агрессивлыҡ түгел, ә толерантлыҡ, айыҡ ҡарашлылыҡ хас. Шул уҡ ваҡытта ул бик үҙенсәлекле тәриҡәт, Хоҙай хозурына булған ынтылышта уның үҙенә генә хас ғәмәлиәте бар. Мәҫәлән, зекер әйтеүсе, донъя мәшәҡәттәрен онотоп тороп, бар иғтибарын, уйкиселерештәрен тик бер Хоҙайға йүнәлтергә тейеш. Бында үтәү өсөн бик ҡатмарлы нәмәләр бар: бер тын алыу араһында 24 тапҡыр зекер әйтеп өлгөрөү талап ителә, хатта «йөрәгеңде туҡтатыу» тигән алым бар (бер мәлгә тын алыуыңды, физик йәшәүеңде туҡтатып тороу кеүек метафорик, символик мәғәнәгә эйә), ҡыҫҡараҡ доғаларҙың береһен бер тын алыш эсендә эстән уҡып сығыу, Аллаһ тураһындағы уйың бөтә йәнең-тәнеңде биләп алыуға өлгәшеү һ.б.

***Халыҡты һаҡлау, уның рухи ҡеүәтен үҫтереү зарурлығын суфый етәкселәре бик яҡшы аңлаған һәм ошо йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барған. Быны беҙ Зәйнулла Рәсүлев миҫалында бик асыҡ күрәбеҙ. Уларҙың рухи ныҡлығы, халыҡ араһындағы абруйлы өгөт-нәсихәте арҡаһында ғына батша властарының башҡорттарҙы христианлаштырыу һәм урыҫлаштырыу сәйәсәте ғәмәлгә ашмаған. Һан яғынан ныҡ кәмеп, ерҙәре таланып, ҡыҫым аҫтында башҡорттоң бөлөп барыуын алдынғы урыҫ зыялылары ла таныған бит.***

**▶ Зәйнулла шәйех үҙе Хоҙай хозурына яҡынлашыу юлында ниндәй кимәлгә еткән икән?**

▶ Уның замандаштары фекере һәм баһаһына ярашлы, Зәйнулла ишан Аллаһы Тәғәлә асылын белеүҙең иң юғары рухи бейеклегенә етеп, «Ҡотоп Заман» титулына лайыҡ булған. Был исем суфый иерархияһының иң юғары кимәленә етеүҙе белдереп, ошолай тип нарыҡланған суфыйҙың Хоҙай тарафынан һайлап алынғанлығын, уның вәли зат (Хоҙайға яҡын) булыуын аңлатҡан. Быңдай титуллы суфыйға мосолман донъяһында контроллек итеү хоҡуғы бирелгән. Зәйнулла ишан бар Рәсәй мосолмандары мөхитендә оло абруй ҡаҙанған. Мин Дағстанда, Буйнакск ҡалаһында булғанда, ҡала мәсете имамы үҙенең ҡартатаһының (ул да шәйех булған) ҡулъяҙма китабын күрһәткәйне. Ошо китаптағы силсиләлә Зәйнулла Рәсүлевтың исеме айырып, ҡыҙыл ҡара менән яҙылған. Ял көнө, Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең дөйөм зекерен башҡарғандан һуң, намаҙҙа ҡатнашыусылар Зәйнулла ишан рухына доға ҡылды.

**▶ Нәҡшбәндиә суфыйҙарын йыш ҡына медицина суфыйҙары, тип тә атайҙар. Зәйнулла ишандың тирә-яҡта танылған табип булыуын да беләбеҙ. Дин юлындағы суфыйҙар ни өсөн табиплыҡҡа ла ныҡ иғтибар иткән?**

▶ Христиандарҙа дин кеше һаулығын ҡайғыртмай тиерлек, сөнки бар иғтибар рух яғына йүнәлтелеп, тән икенсе планда ҡала. Ә Исламда рух һәм тән гармонияһын һаҡлау мөһим, шуға күрә сәләмәт тормош алып барыуға өндәү, тән һаулығы тураһында ҡайғыртыу көслө.

**▶ Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә, әгәр Зәйнулла ишандың бәләкәй сағымдан уҡ миңә яһаған йоғонтоһо булмаһа, мин берәй бай сауҙагәрҙең лавкаһында һатыу итеүҙән ары китмәҫ инем, тигән. 1917 йылғы инҡилабтан һуң башҡорт халҡының үҙ ғәскәрен ойоштороп, милли мөхтәриәт яулап алыуында башҡорттоң рухи остазы Зәйнулла Рәсүлевтың да роле ҙур булған, тип баһалау ысынбарлыҡҡа тап киләме?**

▶ Һәр бер халыҡтың үҙ элитаһы була. XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттарҙың тархандары, йорт старшиналары булған. Нисек кенә булмаһын, улар батша властары алдында үҙ халҡының мәнфәғәттәрен яҡлап сығыш яһаған, сөнки ябай кешенең үҙ хоҡуҡтарын яҡлау мөмкинлеге бик аҙ булған. Ике быуат дауамында барған ихтилалдар һөҙөмтәһендә башҡорт элитаһы юҡ ителеп, халыҡ яҡлаусыһыҙ ҡала. Дин әһелдәре, суфый шәйехтәре ошо осорҙа халыҡты яҡлау һәм һаҡлау функцияһын үҙ өҫтөнә ала. Халыҡтың киләсәге тураһында уйлау Зәйнулла ишанды ла йәштәрҙе дини-әхлаҡи тәрбиәләү менән бер рәттән, яңыса, Европаса уҡыта башлау зарурлығын танып, йәҙитселекҡә юл асыу өсөн күп көс һалырға дүндерә. Һөҙөмтәлә абруйлы шәйех һәм уның фекерҙәштәренең тырышлығы һәм фиҙакәрлеге менән XX быуат баштарында халҡыбыҙҙың белемле һәм әүҙем өр-яңы элитаһы үҫеп сыға. Улар рәтендә беҙ Зәки Вәлиди кеүек тиҫтәләгән ойоштороусы һәм етәкселәрҙе, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич кеүек зыялыларҙы күрәбеҙ, һәм тап ошо мәҙрәсәләрҙә яңыса белем алған зыялы быуындың XX быуаттағы башҡорт мәҙәниәтенә һәм мәғрифәтенә яһаған йоғонтоһон тоябыҙ.

**▶ Һуңғы йылдарҙа бөтә донъяла тиерлек суфыйсылыҡ идеялары менән ҡыҙыҡһыныу көсәйеп китте. Сит илдәрҙә лә суфыйҙарҙың китаптары баҫыла, яңы суфый йәмғиәттәре барлыҡҡа килә, интернетта ла байтаҡ мәғлүмәт тупланған. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер диндарҙарыбыҙ суфыйсылыҡҡа ҡырҡа ҡаршы фекерҙә булып, уларҙы сектантлыҡта ғәйепләй. Быңдай ҡапма-ҡаршылыҡты нисек аңлатып була?**

▶ Хәҙер суфыйсылыҡтың быуаттар дауамында тупланған бай тәжрибәһенә таянып, уға ҡарата булған ҡыҙыҡһыныуҙы эксплуатациялау ҙа юҡ түгел, профанация, күҙ буяу күп таралды, хатта ошонан бизнес яһап, ҙур килем алырға хыялланыусылар ҙа бар. Бына беҙең Башҡортостанға ла Үзбәкстандан «яңы руханиҙар» йыш килә башланы. Үҙҙәрендә алған әҙме-күпме дини белеменә таянған булып, уҡыусылар йыйып, остаз ҡиәфәтенә ингән булып ҡылана улар. Уларҙан «белем» алған бер танышым, «мөритлек» халәтенә мөкиббән бирелеп китеп, салма бәйләп, сапан кейеп, йәй көнө лә галош ҡына ҡатып йөрөп, суфый булып күренергә тырыша. Ул бит бары тик суфыйлыҡтың тышҡы формаһын ғына үҙләштергән, ә уның эске, рухи халәте уны ҡыҙыҡһындырмай ҙа. Ул кешенән нисек көләһең инде, ул бит үҙен ысын фанаттарса тота, үҙе һымаҡтарҙан ойоштороп алған төркөмө лә сектаға оҡшап тора. Бына миңә 2003 йылда Александрия ҡалаһында Шазалия суфыйҙары конференцияһында ҡатнашырға насип булды, ә унда Американан, Европа илдәренән килгән суфыйҙар күп ине. Улар барыһы ла заманса кейенеп йөрөй, әммә уларҙы суфыйсылыҡтың рухи мөмкинлектәре арбаған.

Беҙҙә совет осоронда бер генә тәғлиматтең дөрөҫлөгөнә инандырырға тырыштылар, аңыбыҙҙан ошо йоғонто тәьҫире һаман сығып бөтмәгән. Исламда толерантлыҡ көслө, бер сиктән икенсеһенә тайпылыу юҡ. Шуға күрә тик суфыйсылыҡ аша ғына ысын хәҡиҡәтҡә ирешеп була, тигән фекер мосолман өсөн мотлаҡ түгел.

**▶ 1775 йылдан һуң 140 йыл буйына башҡорттар батша власына ҡаршы күтәрелеп сыҡмаған. Бәлки, ошо осорҙағы тынлыҡ башҡорт көсҡеүәтен яңынан туплау, империя тарафынан тулыһынса юҡ ителмәү маҡсатына ярашлы булғандыр. Быны дин әһелдәре, шул уҡ суфый шәйехтәре яҡшы аңлап, тыныс шарттарҙа халыҡты һаҡлау юлын өҫтөн күргәндер, тип фекер йөрөтөү раҫмы?**

▶ Эйе, халыҡты һаҡлау, уның рухи ҡеүәтен үҫтереү зарурлығын суфый етәкселәре бик яҡшы аңлаған һәм ошо йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барған. Быны беҙ Зәйнулла Рәсүлев миҫалында бик асыҡ күрәбеҙ. Уларҙың рухи ныҡлығы, халыҡ араһындағы абруйлы өгөт-нәсихәте арҡаһында ғына батша властарының башҡорттарҙы христианлаштырыу һәм урыҫлаштырыу сәйәсәте ғәмәлгә ашмаған. Һан яғынан ныҡ кәмеп, ерҙәре таланып, ҡыҫым аҫтында башҡорттоң бөлөп барыуын алдынғы урыҫ зыялылары ла таныған бит. Бер ғәйепһеҙ һөргөнгә ебәрелгән Зәйнулла ишан башҡорттоң киләсәген мәғрифәтте үҫтереү, традицион дин һәм мәҙәниәт сығанаҡтарына тоғро ҡалып, шул уҡ ваҡытта халыҡты яңыса йәшәү юлына сығарыуҙа күргәндер. Юғиһә, ул замандашы Морат Рәмзиҙең урыҫтарҙың колониаль сәйәсәтен ҡаты тәнҡитләгән «Талфик әл ахбар» китабын нәшер итергә ярҙам итмәҫ тә, йәш Зәки Вәлидигә тотонорға аҡса биреп, уныһы күп яңы китаптар һатып алғас, ысын күңелдән ҡыуанмаҫ ине.

З. Рәсүлевтың үҙ заманында күренекле ғалим, Ислам тәғлимәте белгесе булып танылыуы кире ҡаҡҡыһыҙ. Ҡөрьән тәфсирҙәрен, Сөннә һәм хәҙистәрҙе күп һанлы мөриттәренә, шәкерттәренә төплө һәм ентекле аңлата белеүсе Ислам ғалимы тап ошо нигеҙҙә оло абруй ҡаҙанған. Ғөмүмән, Зәйнулла Рәсүлев кеүек масштаблы шәхесте комплекслы рәүештә баһаларға кәрәк: ул Илаһиәт белгесе, ғалим һәм мәғрифәтсе, суфыйсылыҡ тәғлимәте һөм ғәмәлиәте остазы, үҙ заманының оҫта ойоштороусыһы һәм күренекле йәмәғәт эшмәкәре. Уның башҡорт диндарҙары данын бөтә мосолман донъяһына тарата алыуын да һис онотторға ярамаҫ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**Шулай итеп, мосолман донъяһында шәйех Зәйн Аллаһ әш Шәрифиән Нәҡшбәнди исеме аҫтында танылыу тапҡан Зәйнулла Рәсүлев замандаштары тарафынан иң юғары баһаларға лайыҡ булып, бар ғүмерен Рәсәй мосолмандарының рухи тормошон тергеҙеүгә арнаған шәхес булған. Үлгәндән һуң академик Бартольд тарафынан «Үҙ халҡының рухи короле ине», тип баһаланған бөйөк Шәйех Зәйнулла Рәсүлевты беҙ бөгөн башҡорт халҡының рухи батыры, тип атарға хаҡлыбыҙҙыр.**

✔ ***Ниндәй көй был? Башҡорт халыҡ йыры «Азамат» бит. Фәлиевтың йөрәге тетрәнде. Көйҙөң тәьҫиренә бирелеүҙән ни эшләргә белмәйенсә, тәмәкеһен ҡулына алды, әммә уны тоҡандырмайынса, кире ултырҙы.***



Абдулла НИҒМӘТУЛЛИН



# КӨРӘШ ДАУАМ ИТӘ

(Повесть)

## IX

Клариса иҫенә килгәндә баш осонда әсәһе ултыра ине.

-Әйҙә, ҡыҙым, - тине ул. -Өйгә инәйек, мин хәҙер картуф бешерәм...

-Юҡ, әсәй, үҙең инә тор, мин хәҙер...

Әсә кеше өйгә инеп юғалды. Клариса әле күргәндәренең төш булмауына инанғас, мейеһен ярып ингән аңлауҙы үҙенә һорау итеп бирергә кереште. Микола немец һалдаттары араһына нисек килеп эләккән? Ул Сәйфи хаҡында нимә белә? Сәйфи ҡайҙа? Нисек тә сәбәп табып, старостаның йортона барырға һәм ошо хакта һорашырға. Хәҙер үк...

Клариса старостаның ихата ҡапҡаһын асып ингәс тә, тирә яғына ҡарап торҙо. Усадьба тын. Күрәһең, хужалар ямғырҙа йоҡлай.

-Һеҙгә кем кәрәк, мадам? - Лапаҫ яғынан килгән Юра шулай ти.

-Миңә староста Кукк йәки обер-лейтенант кәрәк. Өйҙәме улар?

-Бәлки, йомошоңдо мин хәл итермен...

-Һеҙҙең ҡулдан килерме ул эш?

-Йә...

-Эш шунда, яңы ғына беҙҙең берҙән-бер һыйырҙы алып киткәйнеләр. Бәлки, һалымдарҙың барыһын да иртәгә түләр-лек мөмкинлек таба алырмын...

-Шунан?

-Һыйырымды кире алырға өмөт итәм. Елененең ҡороп, һыу алыуынан ҡурҡып, һауып алырға килдем...

-Һе, һауып алырға тиһең инде. Хәҙер һорап сығам...

Клариса һыйырҙың имсәктәрен тарт-ҡылай башлағас, янына Микола килде. Иҫәнләште, ултырҙы. Тәмәке ҡабыҙҙы.

-Япраҡ ҡатыш махорка. Тартмаҫ инең дә, йөрәк яна...

Уның «йөрәк яна» тип әйтеүе күпкә ишара ине. Тынлыҡ урынлашты. Микола Сәйфиҙең вафат булыуы хаҡында әйтер-гәме-юҡмы, тип баш ватты, Клариса иһә, нисек итеп Сәйфи хаҡында һорарға бел-мәне. Нисек кенә булмаһын, Миколаның «йөрәк яна» тигән һүҙе күңеленә шом индергәйне инде. Шулай ултырғанда Микола телгә килде:

-Партизан отрядының ҡайҙалығын әйтә алаһыңмы?

-Әйтә алам, быны... - Миколаның шул һорауҙы биререн генә көткән тиерһең ҡыҙ, ҡуйынынан сығарып, уға отрядтың ҡайҙа тороуын күрһәткән маршрут, «Народные мстители» гәзитенең һаныңа төреп, өс лимонка тотторҙо. - Һаҡ бул, һөйләшербеҙ, әгәр ҙә осрашмай ҡалһаҡ, Сәйфигә сәләм күндер, - тине лә Клариса, күнәгеn ҡулына алып, тышҡа сығып китте.

Клариса менән осрашыуына өс тәүлек үткәс, ул Юраға һүҙ тиште:

-Юра, - тине ул көндәгесә йоҡларға һарайға ингәс. -Әйҙә, бынан ҡасайыҡ. Ваҡыт еткәндер, минеңсә.

-Ҡасайыҡ?

-Эйе, улар беҙгә өйрәнде. Ана, эттәрен ағыулайыҡ та, партизандар яғына китәйек.

-Минеңсә, Микола, Ҡыҙыл армия бында килеп етә алмаясаҡ. Шуға күрә, ҡасыуҙан файҙа юҡ. Кисә генә староста йортондағы радиоалғыс аша Берлиндан тапшырыу ишеттем. Немецтәр тиҙҙән Мәскәүҙе аласаҡтар...

-Мин барыбер ҡасам...

-Әйҙә, бөгөн был хакта һөйләшмәй торайыҡ, иртәгә, йәме?

Микола тәүҙә салбар кеҫәһендә яткан гәзитте алып, Юраға укырға иҫап тота ине, ҡапыл кире уйланы. Уның йоҡлап китеүен генә көткән Юра һарайҙан сығып, старостаның йорто яғына ыңғайланы.

* * *

-Тор, сволочь, үлер алдынан йоҡлап ҡалайым, тиһеңме?

Микола күҙҙәрен асып, баш осона ҡараны һәм унда төкөрөктәрен сәсә-сәсә акырған обер-лейтенантты күрҙе. Ишек төбөндә ҡоралды һалдат менән Юра. Барыһын да аңланы Микола. Юра уны һатҡан.

Юра һуғышҡа тиклем һатыу селтәрендә эшләгән ҡурҡаҡ бәндә. Уҙ тиреһен һаҡлап ҡалыу өсөн барыһына ла бара. Үҙе иҫ киткес һаран. Башҡа кеше тәмәке тартҡанын күреп ҡалһа, ауыҙындағы төпсөктө кеҫәһенә һүндерел һалып, шул кешенән һорап алып тарта торған ғәҙәте лә бар.

-Обер-лейтенант, - тине ул күҙҙәрен һөртөп. - Бәҙрәфкә генә барып килергә рөхсәт итегеҙ? Ә унан теләһә ни эшләтегеҙ...

-Бәҙрәфкә, ха-ха... Бар. Ә һеҙ, - тип ул теге һалдатка өндәште. -Ҡарап тороғоҙ ҙа, дар ағасына алып барығыҙ...

Бәҙрәфкә ингәс тә Микола тәүҙә Клариса биргән өс лимонканы йүкә менән баулап, запалдарына ла бау тағып, биленә такты. «Көн һыуыҡ, моғайын, сисендереп тормаҫтар. Әгәр ҙә сисендерә башлаһалар, шартлатам. Улар ҙа юҡ, мин дә...», тип уйланы ул.

Маршрут ҡағыҙын йыртып ташлап, гәзитте бәҙрәфтең стенаһына йәбештергәс кенә сыкты ул тышҡа.

Майҙан ауыл уртаһында ҡоҙоҡ янында. Хәрби тотҡондар дар өсөн бағаналар ултыртыу менән мәшғүл. Ана, Вася Давго, Мохлис, Геннадий Турков - барыһын да таный Микола. Полкташтары хәҙер ана үҙ ҡулдары менән Миколаға дар ағасы әҙерләйҙәр. Бер һалдат майҙан янындағы бер йорттан аркан алып сыкты. Микола баҫҡан урынында ҡулдарын артҡа ҡуйып тик тора. Уның шул килеш тороуына ҡарап, ҡулдарын бәйләнек тип уйлайҙар, иҫерек баштар. Һалдаттар ауыл халҡын майҙанға ҡыуалай. Биш минут та үтмәне, майҙанға байтаҡ халыҡ йыйылып китте.

-Бөтәһе лә әҙер, - тине һаҡсыларҙың береһе обер-лейтенантка.

-Ә ниңә уның ҡулы бәйле түгел, - тип төртөп күрһәтте ул әсиргә, бар халыҡҡа ишеттерерлек итеп. -Барыбер ҡасып китә алмай, шулай ҙа...

-Үҙем... - Бер ҡатындың әсе итеп ҡысҡырыуына барыһы ла әйләнеп ҡараны. Ул Клариса ине. -Һуңғы һыйырыбыҙҙы тартып алып киткән, мәлғүн. Рөхсәт итегеҙ, обер-лейтенант әфәнде. Уның ҡулдарын үҙем бәйләйем.

Иҫереклеге ҡиәфәтенә сыккан обер-лейтенантка был сакта Миколаның ҡулдарын кем бәйләһә лә барыбер ине. Был эшкә ҡыҙ кешенең баҙнат итеүе уға нык оҡшаны һәм ул башын һелкте. Клариса етеҙ ҡыланды. Миколаның ҡулдарын бәйләгән булып маташкан арала еңенән сығарған кескәй наганын Миколаның көрәктәй усы эсенә йәшерҙе.

Микола йәшник өҫтөнә үҙе атлап менде.

-Аҫырға!

Бер һалдат уның муйынына боғалакты кейҙерергә тип арканға үрелгәйне генә, Микола Клариса бәйләгән булып ҡыланып, асылда, сисерлек итеп тоҡанлаған ептән ҡулдарын һурып алды ла, менеү-сенең күкрәгенә төбәп атып ебәрҙе. Таға ла бер нисә секундтан немец һалдаттары уратыуында торған обер-лейтенант торған төркөмгә бер-бер артлы ике граната ырғытты. Күҙ менән ҡаш араһында юҡ ителде немец һалдаттары һәм улар яклы байҙар. Ауылдағы башҡа немец һалдаттарына ҡаршы барған атыш тағы ла ун биш минут самаһы дауам итеп, ауыл тулыһынса партизандар ҡулына күсте.

Халыҡ нәфрәтенең сиге юҡ. Һатлыҡ йән Юрий Лавровка хөкөм ҡарары бер булды - аҫырға. Микола ауыл халҡы араһынан Кларисаны эҙләне, тик таба алманы. Нисектер, ҡыҙ алдында үҙен ғәйепле тойҙо ул. Беренсенән, Сәйфиҙең һәләк булыуы хаҡында әйтә алманы, икенсенән, ул булмаһа, кем белә, бәлки дарҙа елберләр ине көүҙәһе.

Тик Клариса хаҡында Микола партизан отрядына барып еткәс кенә беләсәк әле. Бактиһәң, Клариса уны үлемдән ҡотҡарған да, үҙе шундуҡ партизан отрядына ашыҡҡан. Үҙен хатта ауылда күреүсе кеше лә булмаған.

## X

«Кингесепп» партизандар отрядына ҡушылыуға өс көн үтһә лә, Миколалар төркөмөнә берәү ҙә хәрби задание биргәне юҡ әлегә. Өсөнсө көн Миколаны командирға саҡырҙылар. Микола буҫтауҙан тегелгән ҡулдәгенең итәктәрен тарткылап, фуражкаһын төҙәтеп кейеп, землянкаға ҡарай атланы. Командир ултырған ергә барып ингәс, өҫтәл янынараҡ килеп, ҡаҡ иҙәнгә тоҙып бөткән ботинкаларын шаҡылдатты:

-Һеҙҙең бойороҡ буйынса килдем, - тине.

Командир ҡулында тоткан блокнотын өҫтәлдәге карта янына һалды ла, Миколаға үткер ҡарашын төбәне:

-Мин - партизан отряды командиры Иохансон, таныш булайыҡ, - тип ҡул биреп күреште. - Һеҙҙең менән танышҡым килгәйне, - тип өҫтәп ҡуйҙы.

Иохансон буйға оҙон, ҡакса йөҙлә, бер аҙ ҡыҫыла төшкән зәңгәр күҙҙәрен ҙур итеп асып ҡараған командирҙың ҡоңғор сәстәре ян-яҡҡа туҙышып төшкән. Командир Миколаға ултырырға тәкдим яһаны. Сәй тәкдим итте. Уларҙың әңгәмәһе Сантаго ауылында барған ваҡиғалар юҫығына боролғайны ғына, землянка тышынан «Самолет!» тигән тауышты ишетеп, икеһе лә тышҡа йүгереп сыкты. Ысынлап та, ағастарҙың баштарына ҡанаттарын тейҙерә-тейҙерә «У-2» аэропланы осоп йөрөй. Иохансон землянка янында йөрөүсе партизанды үҙе янына саҡырҙы.

-Освальд, хәҙер үк аэроплан янына дүрт кешенән торған ҡарауыл ҡуйығыҙ. Килтерелгән ҡоралдар акт менән складка тапшырылһын. Летчик минең янға йоҡларға инһен. Уға берәр тәүлеккә бында тукталырға тура килер. Үтәгеҙ! - Шулай тине лә командир Миколаға боролдо. -Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, Сантаголағы һәлдәр тураһында иртәгә иркенләп һөйләшербеҙ. Миңә летчикты ҡаршы алырға кәрәк...

Миколаның бик күп һорауҙары, Сантаголағы хәлдәр хаҡындағы һүҙҙәре һауала аҫылынып ҡалды. Клариса хаҡында ла һорашырға иткәйне ул. Сәйфиҙең һәләк булыуы хаҡында ла белдерергә уйлағайны.

* * *

Төн. Бөтә эштәр ҙә урынына еткерелгәс, летчик менән Иохансон ял итергә булды.

-Беҙ икәү һөйләшкән һүҙҙәрҙе, отрядтың яҡын аралағы маҡсатын ҡайтҡас та генерал Чумакка еткерергә тырыш. Күберәк боеприпас, бигерәк тә пулемет, гранаталар кәрәк тип әйтергә онотма.

-Барыһы ла үтәлер, - тине летчик.

Көньяҡ кешеләренә окшап торған летчик Фәлиевтың ҡара һөрөм тартҡандай ҡара ҡаштары көлгән сағында һуҙылып уҡ китә. Йәш булһа ла, сәстәренә сал ингән. Ҡыҙыу ғына һөйләшә. Һәр ваҡыт етди йөрөгән был егеттең осоу стажы ла күп түгел. Был отрядҡа ла ул икенсегә килә.

Улар ятып ял итергә булып, өҫ кейемдәрен түшәп кенә бөткәйне, ишек шаҡылдаттылар.

-Кем унда?

-Мин, ағай, мин килдем, - тине тыштағы ҡыҙ.

Ишектән йәш кенә ҡыҙ килеп инде.

-Ағай, мин дүрт көн булманым инде бында...

-Эйе, һинең өсөн ҡурҡып бөттөм...

-Комендатурала булдым. Капитан төрлө һорауҙар биреп, үҙемде бик оҙаҡ тотто. Тоткон Миколала наган, гранаталар булыуын нисек аңлатаһың, имеш.

-Шунан?

-Ҡайтып торорға ҡуштылар. Хәҙер ауылда барыһынан да һорау алалар.

-Ярар, мәле еткәс, уларға һорауҙы беҙ үҙебеҙ бирербеҙ.

-Скрипкамды һағынып килдем, һиндә ҡалғайны бит, - тине Клариса һүҙҙе икенсегә бороп.

-Эйе, мә ал, уйна, - Иохансон ағас ҡойка түрендә элеүле торған музыка ҡоралын ҡыҙға һондо.

-Аҙ ғына ултырам да, медсестра Валяның землянкаһына йоҡларға барам. Һеҙгә көй уйнаһам, мәшәкәтләмәйемме? - был һорауҙы ҡыҙ летчикка төбәне.

-Юҡ-юҡ, - тине летчик ризалыҡ белдереп. -Командир ниндәй фекерҙәлер, мин скрипка моңон яратам.

Иохансон ризалығын белдереп, башын ғына һелкте. Клариса бер эстон, бер рус көйөн башҡарҙы, аҙаҡтан кеҫәһенән ниндәйҙер ҡағыҙ сығарып, шуға ҡарап, ниндәйҙер көйҙө уйнарға тотондо.

Ниндәй көй был? Башҡорт халыҡ йыры «Азамат» бит. Фәлиевтың йөрәге тетрәнде, һикереп торҙо. Көйҙөң тәьҫиренә бирелеүҙән ни эшләргә белмәйенсә, тәмәкеһен ҡулына алды, әммә уны тоҡандырмайынса, кире ултырҙы. Бына көй ҙә уйналып бөттө.

-Клариса, һеҙгә һорау бирергә мөмкинме? - Фәлиев һүҙен ниҙән башларға ла белмәне. - Башҡорт көйө «Азамат» бит был?

- Эйе, башҡорт халыҡ көйө «Азамат»...

- Кемдән өйрәндегеҙ һеҙ был көйҙө?

- Сәйфиҙән, - тине Клариса, - башҡорт егете Бикташев Сәйфиҙән...

- Һеҙ Кларисамы?

- Эйе, ә һеҙ мине ҡайҙан беләһегеҙ?

- Мин Сәйфиҙең дуҫы Фәлиев Шаһизада...

- Шаһизада, матур исем, миңә һеҙҙең турала Сәйфи һөйләй торғайны...

-Торғайны... Сәйфи ҙә бит әлеге ваҡытта Эстония азатлығы өсөн көрәшә...

Ошо ваҡыт уларҙы ситтән генә тыңлап торған Иохансон һөйләшеүгә ҡушылды:

-Клариса, Шаһизада, һеҙгә нык булырға кәрәк хәҙер. Кисә регуляр армиянан беҙгә килеп ҡушылған һалдаттар хәбәр итте: Сәйфи Бикташев Пярну ҡалаһын фашистарҙан азат иткәндә һәләк булған...

-Сәйфи... - Клариса бөгөлөп төштө.

## ЭПИЛОГ

1944 йыл. Октябрь. Балтика диңгеҙе яғынан иҫкән еүеш һалҡын елдәр юл эргәләп үҫкән тәлгәш каштан ағастарының һарғайған ҡыйғас япрактарына әҙләкһеҙ тупраҡ яуҙыра. Әйтерһең дә, кемдер ағастар ҡулағәнә һары балаҫ йәйә. Алда, өс сакрымдай ерҙә, ҡаты һуғыштар бара. Самолеттар тауышына «һуғыш аллаһы» ла ҡушыла. Туптар ата башлауы булды, ер бәүелергә тотондо. Советтарҙың 72-се уксылар дивизияһы менән 152-се танк дивизияһы Балтика буйындағы һуңғы ныҡытмаларҙың береһе - Палдисскиҙы штурмлай.

Кис. Ләкин ҡояш байығанмы-юҡмы икәнен асыҡ белергә мөмкин түгел. Элекке летчик, хәҙер инде регуляр армияла рота командиры өлкән лейтенант Шаһизада Ғәлиев һалдаттарына утыҙ минутлыҡ привалға туҡтарға бойороҡ бирҙе. Привал эргәһендә тик мейестәр генә һерәйеп ҡалған ауыл ята. Санитаркалар Оля менән Нәфисә төтәп ятҡан йортҡа яҡын ғына көйҙөрөлгән сиҙәмгә ултырҙылар. Шул саҡ ҡайҙандыр ҡулына көршәк тотҡан эстон әбейен күрҙеләр. Әбей ҡулындағы әйберен ергә ҡуйҙы ла ҡыҙҙарға төбәлде.

-Ҡыҙҙар, арынығыҙмы, һыуһанығыҙмы? - Ул көршәген ҡыҙҙарға һондо. - Мәгеҙ, һөт эсеп ебәрегеҙ, йөрәгегеҙгә ял булып ҡалыр...

Ҡыҙҙар әбейҙең күңелен ҡыймаҫ өсөн көршәктән бер-ике тапҡыр уртлап, кире һондолар.

-Рәхмәт, - тине улар икеһе бер юлы.

-Исемдәрегеҙ нисек була, ҡыҙҙар, ҡайһы яҡта тыуып үҫтегеҙ?

- Мин - Оля, Ростовтан, - тине Оля оҙаҡ та уйлап тормаҫтан.

-Ә мин - Нәфисә, Башҡортостандан, - тине Нәфисә әхирәтенә оҡшатырға тырышып.

-Башҡортостандан, башҡорт иленән, - әбей уғата ҡыуанды, уңайлап ултырып, ҡыҙға төбәлде. - Бынау портта элек каторга булған. Шунда бер башҡорт тотҡоно ултырған. Легендаһы ла бар: ул эстон ҡыҙына ғашиҡ булған... Хәҙер ҙә һөйләйҙәр...

Эстон әбейенең был һүҙҙәрен үтеп барған ыңғайы туҡталып ҡалырға мәжбүр булған рота командиры Ғәлиев та ишетте...

...Ҙур булмаған Палдисск ҡалаһына Шаһизада хеҙмәт иткән полк барып ингәс, ҡаланың азат ителеүенә арналған митинг булды. Унда йәш кенә бер ҡыҙ сығыш яһаны.

-Клариса ул. Партизанка Клариса, - тине Нәфисә янында торған бер кеше. Ошо йылдың авгусында Таллиндә дошмандың ҙур снаряд складын шартлатҡан ҡыҙ...

Клариса өҫтөнә йәшел фуфайка, аяҡтарына ҙур хәрби итектәр кейгән, маңлай тапҡырына алһыу таҫма таҡҡан кубанкала.

-Клариса, - тине Нәфисә уға ҡул болғап. -Миңә һеҙҙең турала Шаһизада һөйләне, һеҙ партизанка...

- Клариса, мин шатмын, һинең иҫәнлегең өсөн, - тип уға ҡушылды рота командиры Ғәлиев.

Ҡыҙ трибунанан төшөү менән Ольга, Нәфисә һәм Шаһизада уны уратып алды.

-Һеҙ... Дуҫтар... Һеҙ ҡайҙан булаһығыҙ? Минең исемде ҡайҙан беләһегеҙ?

-Иохансон землянкаһы, скрипка, «Азамат» көйө, Клариса...

-Шаһизада, - ҡыҙ егетте ҡосаҡлап уҡ алды. -Сәйфиҙең дуҫы Шаһизада...

-Ә скрипкаң ҡайҙа, Клариса?

-Үҙемдә. Ылауҙа. Йәшнигемдә...

-Сәйфиҙең ҡәберенә барырға ине...

-Орденлы Микола уның ҡәберен белә, тиҙҙән уға барырға булдыҡ...

-Бергәләп барырбыҙ. Ул минең дуҫ, класташ, ауылдаш...

-Ауылдаш...

-Ауылдаш ҡына түгел, көрәштәш тә, Клариса. Беләһеңме, беҙ әле ниндәй ҡаланы азат иттек. Ошондағы каторгала башҡорт батыры Салауат Юлаев үҙенең һуңғы көндәрен үткәргән.

-Салауат Юлаев хаҡында Сәйфи һөйләгәйне шул...

-Әле бына беҙгә ҡалаға инер алдынан, - Шаһизада Оля менән Нәфисәгә ҡарап ишараланы. - бер эстон әбейе һөйләгәйне. Беләһеңме, Клариса, ошо диңгеҙ буйында һөйләнелгән легенда буйынса Салауат менән бер эстон ҡыҙының мөхәббәте лә бәйән ителә...

...Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс, Клариса ҡапыл туҡталып ҡалды. Шаһизада, Оля һәм Нәфисә ҡыҙҙың күҙҙәренән атылып сыҡҡан йәштәрен нимәгә юрарға ла белмәне. Бер һүҙ ҙә әйтә алманы улар. Һүҙҙәр артыҡ ине бында. Бер аҙ торғас, Клариса үҙе телгә килде.

-Мин хәҙер ни өсөн Сәйфиҙе өҙөлөп һөйөүемде аңланым инде, Шаһизада... Нәфисә...Оля...

-Беҙ дошманды үҙ ояһына тиклем ҡыуып барып, өңөндә тар-мар итәсәкбеҙ, Сәйфи өсөн үс аласаҡбыҙ, Клариса. Көрәш дауам итә... - тип кенә әйтә алды Шаһизада.

*1954 – 1957 йылдар.*

**(Аҙағы. Башы 18 - 21-се һандарҙа.)**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# *Башҡынама таш яуһа ла, Был ерҙәрҙе ташламам...*



**Иҫән булһа, быйыл 30 майҙа сағыу талантлы шағир һәм драматург Рәмил Дәүләтколовҡа-Ҡолдәүләткә 50 йәш тулған булыр ине. Беҙ был сараны "Тыуыуына 50 йыл", тип билдәләйбеҙ. Ысын шағирҙарҙың үлгән көнө булмай, тыуған көнө генә була, тиҙәр. Ҡолдәүләттең шиғырҙарын ҡайта-ҡайта уҡығанда ошо хәҡиҡәт бермә-бер раҫлана. Йәшәй Рәмил арабыҙҙа, шиғырҙары ла яңы ғына яҙылған кеүек һәм бөгөнгөбөҙҙөң иң актуаль мәсьәләләрен күтәрә.**

## Килен

Башҡортостаным, илем,
Яҙалмай бер ҙә билен.
Гүйә, мыжыҡ ҡәйнәһенә
Хеҙмәт итеүсе килен.

Баш күтәрмәй хеҙмәт итеү -
Киленгә яҙған яҙмыш.
Инәйемдең үткәненән
Ул яҙмыш миңә таныш.

Беләм, әүәл был йоланың
Ҡануны булған ҡаты;
Ауыҙ асып һүҙ әйтергә
Булмаған уның хаҡы.

Ауыҙ асып һүҙ әйталмай
Аҙмы йәшәнең, илем.
Шып-шым ғына йөрөй торғас,
Юғала яҙҙы телең.

Үҙ йортонда берәй ҡасан
Булырһың микән хужа?
Эстән генә һыҙа-һыҙа
Бөтә ғүмерең уҙа.

Үткәнеңде байҡаным да,
Башҡортостаным, илем.
Һинең дә бит бар булмышың
Бер килен кеүек, тинем.

## Арҡайым

### I

Шаҡ ҡатырғыс алдаҡ хәбәрҙәрҙән
Лыҡа тулы бахыр башҡайым.
Шуға микән аптыратмай мине
Сер йомғағы - бөйөк Арҡайым.

Һәр нәмәгә мин шикләнеп бағам,
Ышанып та бигүк бармайым.
Мәңге сиселмәҫ бер сер йомғағы -
Минең күңелем ул Арҡайым.

Асылмаған күпме серҙәр миндә,
Кем күрә лә уны, кем белә?
Күңелемдә меңәр арҡайымдар
Бер төҙөлә, берсә күмелә...

Ете ҡоҙоҡ ҡына түгел унда,
Йәшеренгән серле мең ҡоҙоҡ.
...Күңелемә күҙ ҙә һалмайынса,
Яндарымдан киттең һин уҙып...

Һинең өсөн генә асҡым килде,
Һис кемгә лә әйтмәҫ бер серҙе.
Арҡайымды йылдар кимергәндәй,
Хыялымды һин бит емерҙең.

Мәңге сиселмәҫ бер сер йомғағы -
Арҡайымдай минең күңелем.
Һин белмәгән күпме хис-тойғолар
Асылмайса ҡалды күмелеп.

### II

Мәңгелектең бөйөк серҙәренә
Арҡайымда асҡыс тапҡандай,
Ябырылған бында ят ғалимдар,
Батый ғәскәрҙәре баҫҡандай...

Алтын эҙләп килгән мәллә улар,
Арҡайымдың мәллә серҙәрен?
Әллә ниндәй ҙур эш атҡарғандай,
Аҡтаралар башҡорт ерҙәрен.

Үҙҙәре лә белмәй ул ғалимдар
Көтөлмәгән табыш көткәнен,
Аҡылдары менән аҡтарһалар
Халҡымдың, тим, әгәр үткәнен...

Сит-ят түгел, хатта үҙебеҙ ҙә
Белмәйбеҙ бит халҡым үткәнен.
Арҡайымдай күмелеп ҡалмаҫ өсөн
Ниндәй ғәрәсәттәр үткән ул...

Төбө һис күренмәҫ сер һандығы -
Башҡортомдоң йомарт күңеле.
Арҡайымдай күпме хазиналар
Ята унда һаман күмелеп.

### III

Баҡмайым мин хәҙер был донъяға
Асығауыҙ "аңра" малайҙай.
Аптырамам хатта Ай өҫтөндә
Тапһалар ҙа алтын һарайҙар.

Аҡтарыуҙан арына алмай кеше,
Эшләр урынына емереп,
Мөғжизәнең, имеш, мөғжизәһе
Ер аҫтында ятҡан күмелеп.

Ул мөғжизә шул уҡ әҙәмдәрҙең -
Бабаларҙың зиһен емеше.
Айға бағып, йондоҙ күҙләгәнсе,
Һин үҙеңде өйрән, әй, кешем!

Бөгөн мине үткәнеңдән бигерәк
Киләсәгең һала хафаға.
Арҡайымды һалған мәлдән алып
Бөгөнгөгә ҡәҙәр ҡан аға...

Үткәненә бағып, аҡылына,
Юҡ, ултырмай һаман кешелек
Йылдар үткәс, йыһан туҙанына
Ҡалмаҫ, тимә, ул да күмелеп...

Мөғжизәнең иң-иң мөғжизәһе -
Ул бары тик кеше күңеле.
Күпме асылмаған серҙәр ята,
Арҡайымдай унда күмелеп.

## Рәми ағайҙың әйткәне

Йәшәрһә лә бөтә донъя,
Никтер килмәй йәшәгем.
Миҙгелдәрҙе бутаным мин -
Артыҡ иртә йәшнәнем...

Йылытам тип туң донъяны
Ҡыш уртаһы йәшнәнем.
Үҙем өсөн йәшәмәнем,
Халҡым өсөн йәшәнем.

Көн йыланғас, һәр кем йәшнәй,
Йәшнәп ҡара һыуыҡта.
(Ауыҙыма һуҡтылар ҙа,
Ҡаранылар быуып та... )

Яҙ килер ул, өмөттәрҙән
Төңөлөргә ярамай.
Тик йәшендәр булмаһын, тим,
Күҙҙе алдар ялағай.

## Тыуған ерем

Ирәндектең бөткән ере,
Ә даланың - башланған...
Был ерҙәрҙең һәр ҡарышы
Ҡан-йәш менән ашланған.

Һәр бөткәндең башы була,
Башланғандың - аҙағы...
"Башланыҡ!" тип ташланғандар
Ҡалмыҡ, нуғай, ҡаҙағы.

Ябырылған дау-яуҙарҙың
Бында булған аҙағы.
Яман эшкә нөктә ҡуйған
Башҡорттоң уҡ-һаҙағы.

Баҫҡаҡтарҙың бөткән ере,
Башҡорттоҡо - башланған.
Башҡынама таш яуһа ла,
Был ерҙәрҙе ташламам!

* * *

Мин китермен, бер китермен
Шуҡ елдәргә тағылып.
Эҙләһәң дә, табалмаҫһың,
Тик иларһың һағынып.

Йәнем керһеҙ, шуға еңел,
Көсө етер елдәрҙең.
Үткән-һүткән елдән һорап
Йүгереп йөрөп эҙләрһең.

Елдәр әйтмәҫ, елдәр һатмаҫ
Ирек һөйгән күңелде.
Мал-донъяңа йәбешеп йәшә,
Миңә күктә күңелле...

Көтмә мине, миңә күптән
Елдәр ене ҡағылған.
Таңғы елгә битеңде ҡуй,
Әгәр мине һағынһаң.

## Иҫерек Рәсәй

Үҙ мөлкәтен үҙе һатып эскән
Бер эскесе кеүек дәү илем.
Саҡ-саҡ иҫкән заман елдәренән
Саҡ йығылмай ҡала бәүелеп.

Алпан-толпан баҫып, иҙеү асып,
Атлап килә оло "ҡала"нан...
Һәр мөйөштә уны юлбаҫарҙар,
Фәхишәләр тора һағалап.

Балды һырып алған себен кеүек,
Ябырылған уға килмешәк.
Шул килмешәк һуңғы һутын һура,
Ултырта ла уға бер шешә...

Тартынмай ул бер кемдән дә, хатта
Аманатын һатып ул эсә.
Беләм: иртән ҡоро ҡулдар ҡалыр,
Һәм ҡапшарға ҡалыр буш кеҫә.

Үҙ мөлкәтен үҙе һатып эскән
Бер эскесе кеүек дәү илем.
Үҙ башына үҙе етмәҫ, тимә,
Дөмөкмәҫ тә, тимә, бер килеп.

* * *

Әле оҙаҡ-оҙаҡ
Сирләр Тыуған ил...
Блок

Ниндәй ер был ғазаптары бөтмәҫ,
Ниндәй ил был бер ҙә мандымаҫ?
Күҙҙәремә Рәсәй ере баға,
Ҡыш йонсоған арыҡ мал һымаҡ.
Яна-көйә уҙам яралары
Һулҡып ятҡан яҙғы ерҙәрҙән.
Рәсәй, ҡасан арынырһың икән
Үҙәгеңә үткән сирҙәрҙән?
Ауырыу хәлен ауырыу ғына белә...
Әллә үҙем сирле булғанға,
Рәсәй, һыҙланыуың мин бит тоям
Үҙ йәнемдә әрнеү тойғандай.
Тома һуҡыр инең...
Күҙең асылып,
Инде сыҡтыҡ, тиһәк, яҡтыға.
Хәтәр батшаларҙан яманыраҡ
Бер "алла"ның һалған яраһынан
Дарьяларҙай ташып аҡты ҡан.
Ни мәғәнә хәҙер бар донъяға
"Беҙ таҙа!" тип һөрән һалыуҙан?
Ыҙалата әле шәхес культы,
Бюрократлыҡ тигән һалыуҙар...
Тик һин ҡурҡаҡ йәндәй көн күрмәнең,
Йәшәү сәмең булды көслөрәк.
Бөгөн күтәрелгән йәш үләндәр
Ҡарт йөҙөңә ниндәй төҫ бирә.
Ниндәй ер был ғазаптары бөтмәҫ,
Ниндәй ил был мәңге мандымаҫ?
Сәсрәп китеп ауырып ятҡанда ла,
Дошманынан билен алдырмаҫ.

* * *

Юҡ, бәхетле булып булмаҫ
Бәхет күрмәгән илдә.
Асыуым да, һөйөүем дә
Берҙәй ҡайнай күңелдә.

"Үҙ илем бит, үҙ ерем бит,
Ҡалай ғына булһа ла..."-
Тип дошманға һыр-сер бирмәй
Йәшәргә генә ҡала.

ИНТЕРНЕТТАН

## ШӘКӘР АРЗАНАЯ, ТУҢ ИТ ҺАТМАЯСАҠТАР

● Эксперттар белдереүенсә, Рәсәйҙә тиҙҙән шәкәргә хаҡ төшәсәк. Уның төп сәбәбе - 1 июндән эшкәртелмәгән шәкәргә миҙгелле импорт һалымы түбәнәйәсәк (тоннаһына 220 долларҙан 140 долларға тиклем). Аналитиктар фекеренсә, сит илдән шәкәрҙе күберәк һатып ала башлаясаҡтар һәм илдә шәкәргә хаҡ түбәнәйәсәк.

● Июндә баҙарҙа шәкәр күбәйәсәк, - тип белдерә Аграр баҙар конъюктураһы иституты эксперты Евгений Иванов. - Былтыр декабрҙә эшкәртелмәгән шәкәргә индерелгән һалым күләме ҙурайғандан һуң, шәкәр импорты нулгә тигеҙ булды. Илдә шәкәр запасы аҙайҙы. Импорт һалымы 1 июндән генә түбәнәйһә лә, бөгөндән үк шәкәр импорты күләме һиҙелерлек артты.

●Ә туңдырып һатылған ит Рәсәйҙә бөтөнләй булмаясаҡ. Яҡын арала Роспотребнадзор ит продукттары етештереү һәм һатыу буйынса яңы санитар-эпидемиологик норма индерергә йыйына. Яңы ҡағиҙә буйынса, етештереүселәргә һыуытылған ит кенә һатырға рөхсәт итәсәктәр. Был ҡағиҙә иң тәүҙә балаларға һәм диетик туҡланыу продукттары ҡулланғандарға, шулай уҡ ауырлы һәм бала имеҙгән әсәләргә тәғәйенләнгән аҙыҡҡа ҡағыла. Рәсәйҙең баш санитар табибы Геннадий Онищенко "Ҡағиҙәләр фәнни тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп ҡабул ителде", тип белдерә. Баҡтиһәң, туңған ит кеше организмына зыян ғына итә икән.

● Рәсәй Хөкүмәте "Дәүләт геном теркәүе тураһындағы" законға үҙгәрештәр индерергә тәкдим итә. Әгәр ҙә был проектты бөтә депутаттар ҙа яклап сыҡһа, үтә ауыр енәйәт ҡылыусылар мотлаҡ рәүештә генетик мәғлүмәт базаһы өсөн ҡан һәм сәс өлгөләрен тапшырырға тейеш була. Унда шулай уҡ енәйәтселәрҙең биологик эҙҙәре, башҡа мәғлүмәттәр индереләсәк. Закон проекты Эске эштәр министрлығы инициативаһы буйынса йылға яҡын әҙерләнгән. Уларҙың фекеренсә, бындай мәғлүмәттәр базаһы енәйәт эштәрен асыҡлауҙа ярҙам итәсәк.

●Быйыл Башҡортостанда йәйге һауыҡтырыу кампанияһын ойоштороу өсөн яҡынса 520 миллион һум тотоналасаҡ. Дөйөм алғанда, ял итеү һәм һауыҡтырыу учреждениеларында 300 мең бала ял итәсәк һәм дауаланасаҡ. Бынан тыш, июнь башынан дөйөм белем биреү мәктәптәрендә көндөҙгө һәм ҡаланан ситтә урынлашҡан 95 лагерь балаларҙы көтөп ҡала.

●Бына икенсе ай республикала янғындан һаҡлау режимы эшләй. Бөтә янғын осраҡтарының 80 проценты торлаҡ йорттарға тура килә. Шуға ла республиканың янғындан һаҡлау инспекторҙары, янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләренең үтәлеүен тикшереү өсөн, торлаҡ йорттар буйлап рейдтар үткәрә. Ҡағиҙәләр үтәлмәгән осраҡта йорт хужаларына ҙур күләмдәге штраф янай. Йорт янында тиҙ тоҡаныусан сүп-сар һаҡланған өсөн, йәки төҙөк булмаған электр үткәргестәре өсөн мең ярым тирәһе штраф ҡаралған.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КӨЙ ТЫҢЛА ЛА...

## дауалан һәм рухыңды нығыт

**Кеше организмының 60 – 80 проценты һыуҙан тора. Шунлыҡтан, һыуҙың организмға тауыш тулҡындары ярҙамында тәьсир итә алыуы бәхәсһеҙ. Музыканы ла тауыш тулҡыны булараҡ ҡабул итергә мөмкин. Беҙ был тулҡындарҙы ҡолаҡтар ярҙамында ғына түгел, хатта һәр бер күҙәнәгебеҙ менән тоя алабыҙ. Тауыш тулҡындарының ритмик биҙәктәре музыка тип атала ла инде. Тимәк, музыка кешенең ижади аҡылы һөҙөмтәһе генә түгел. Һәр бер күренеш үҙенә генә хас эске моңо, музыкаһы менән тыуҙырылған. Ҡоштар, һыу һәм ел тарафынан барлыҡҡа килтерелгән түбән йышлыҡтағы тауыштар кешенең төш күреү ваҡытында ишеткән тауыштарға оҡшаш һәм улар организмға яҡшы тәьсир итә. Күңелде йомшарта торған музыка төрҙәре медицина өлкәһендә быуаттар дауамында ҡулланыла килә. Ошоноң менән бәйле үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә музыка белгестәре һәм ғалимдар төрлө ауырыуҙарҙан дауаланыр өсөн музыка өлгөләренә мөрәжәғәт иткән: депрессиянан – яман шеш, юғары баҫымдан – хроник сирҙәргә тиклем.**

Медицина хеҙмәткәрҙәре, тәү сиратта, мосолман медицина хеҙмәткәрҙәре, музыка өлгөләрен дауалау маҡсатында ҡулланғандар. Ислам донъяһында психик ауырыуҙар өсөн махсус дауаханалар булған, мәҫәлән, Фес, Бағдад, Дамаск, Алеппо ҡалаларында. Уларҙа ауырыуҙарҙы музыка менән дауалағандар. Боронғо



төркиҙәрҙә музыка менән дауалаған кешеләрҙе «баҡшы», йә иһә «ҡам» тип йөрөткәндәр. 1284 йылда Әл Мансур Сәйфетдин батша Ҡаһирә ҡалаһында Мансуриә исемле дауахана төҙөтә. Был дауахանала ауырыуҙар инструменталь музыка тыңлаған, табиптар фекеренсә, ул кешеләргә ыңғай тәьсир иткән. Унан тыш, ялланған профессиональ хикәйәселәр сирлеләргә төрлө юморескалар һөйләп, кәйефтәрен күтәргән. Был да ауырыуҙың хәлен яҡшырта торған ысул һаналған. Шул уҡ дауаханаға моңло тауышлы мәзиндәрҙе саҡырғандар - улар дини китаптарҙы көйләп уҡыр булған. Был дауаханала ошо ысулдар һаман да ҡулланылып килә. Бөгөн ҡайһы бер заманса дауаханаларҙа алдан телгә алынып үтелгән дауалау ысулдары теле-, радио-, компьютер-, ҡулайламалары аша тормошҡа ашырыла. Сельджук һәм Осман дәүләтендә лә музыканы дауалау ысулы булараҡ ҡулланғандар. Был дәүләттәрҙең дауаханаларында махсус сәхнәләр булған - унда ҙур булмаған сәхнә әҫәрҙәре ҡуйылған. Дауаханалағы фонтандан тирә-яҡҡа тигеҙ күләмдә һыу һибелгән. Осман территорияһында психик ауырыуҙарҙы шул рәүешле дауалаһалар, Мысырҙа бындай кешеләрҙе утта яндырғандар - кешеләр уларға шайтан ояланған, тип уйлаған. Был йәһәттән Осман дәүләтенең ауырыуҙарға ҡарата кешелекле мөнәсәбәтенең ниндәй кимәлдә икәнлеген тойомлап була. Дауаханала теге йәки был ауырыуға ниндәй тондағы музыка ҡайһы сиргә яҡшы тәьсир иткәнлеге билдәләнгән. Шулай уҡ теге йәки был көйҙө кис, йә иртән тыңлау ҙа ҙур мәғәнәгә эйә булған. Һуңғы 500 йылда Көнбайышта ла, Көнсығышта ла музыка менән дауалау ысулы инҡар ителеп килә.

Ҡолаҡҡа ятмаҫлыҡ тауыштар һәм көйҙәр иһә кешенең психик һәм физик һаулығына насар тәьсир итә. Һөҙөмтәлә иммун системаһы ҡаҡшай. 90 децибелға еткән тауыштар кешелә стресс тыуҙырыуы ихтимал. Табиптар фекеренсә, бындай көйҙәр кешелә алкоголь эсемлек кеүек тәьсир итә. Тәүҙә был көйҙәр кешелә дөйөм хәлһеҙлек, унан һуң өйрәнеү тойғоһон тыуҙыра.

Тауышты әсә ҡарынындағы 16 аҙналыҡ яралғы ла ишетә, ти табиптар. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә шул асыҡланды: Моцарт, йәки Вивальди музыкаһы яралғының йөрәк тибешен көйләй. Рок-н-ролл, поп музыканы тыңлаған бала яралғыһы йылдамыраҡ тибешә һәм көйһеҙләнә башлай.

Кеше тауышы - үҙе үк дауалау көсөнә эйә булырлыҡ күренеш. Кешеләр уның ҡиммәтен әле һаман аңлап бөтмәгән. Кеше тауышына теләһә ҡайһы ағзаға һәм күҙәнәккә йоғонто яһау көсө бирелгән. Ошо йәһәттән Ҡөрьән аяттарын тыңлау кеше организмына яҡшы йоғонто яһай. Ҡөрьәндә әйтелгән һүҙҙәргә иғтибар итәйек: «... шунан ул уның һынын әүәләп, үҙенең изге тынын өрҙө һәм ишетеү, күреү һәләттәре менән бергә йөрәк тә бүләк итте». Ғалимдар һүҙҙәренсә, әсә ҡарынындағы яралғы тәүҙә ишетеү, унан һуң күреү һәләттәренә эйә була. Ишетеү һәм күреү этаптарын үткән эмбрионда мейе эшмәкәрлеге ныҡлап үҫешә башлай һәм интеллект, төрлө хис-тойғолар гаммаһы барлыҡҡа килә. Тимәк, Ҡөрьәндә яралғының үҫеш этаптары дөп-дөрөҫ, әҙмә-әҙлекле бирелгән.

Америка ғалимдары һүҙҙәренсә, ыңғай атмосфера, матур тауыштар донъяһында йәшәгән кешеләр күпкә сәләмәтлерәк була. Талғын, матур көйҙәр кеше мейеһенә тәьсир итеп, унан эндофрин, экситосин, энкефалин кеүек матдәләрҙең бүленеп сығыуына булышлыҡ яһай. Был факт мейелә матур музыканы ҡабул итеүгә һәм организм өсөн ыңғай тәьсир итә торған матдәләр бүлеп сығарыуға көйләнгән махсус үҙәктәр барлығы тураһында һөйләй. Музыканың бөтә матурлығын тулы кимәлдә аңлауға һәләте булмаған кешеләргә лә гармоник музыка ыңғай тәьсир итә.

Музыканың кеше организмына булған ыңғай тәьсир көсө молекуляр кимәлдә әле яңы-яңы өйрәнелә башланы ғына. Тәрән һәм күп яҡлы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә иһә шул асыҡланды: талғын, матур көйҙәр кешенең йөрәк тибешен көйләй, ҡурҡыуҙарын юҡҡа сығара, юғары ҡан баҫымын төшөрә, һ.б. Йәнә шул факт билдәле: музыка өлгөләре кортизолдың - стресты булдырыусы гормондың - түбәнәйеүенә килтерә. Шулай уҡ операциянан һуңғы сирлеләргә лә музыка бик яҡшы тәьсир итә - яраларҙың тиҙерәк бөтәшеүенә булышлыҡ итә, ялҡынһыныуға юл ҡуймай һәм А гемоглобинын 14 процентҡа күтәрә - был организмдағы иммунитеттың нығыныуын да тәшкил итә. Даими рәүештә талғын, кәйефте көйләүгә һәләтле музыканы тыңлаған ауырлы ҡатындар бала тапҡанда ҡатмарлылыҡтар тыумай, ти музыканың ыңғай тәьсирен өйрәнеүсе табиптар. Унан тыш, матур музыка хәтерҙе нығыта, һыҙланыуҙарҙы баҫа, кардиобалансты көйләй, ваҡытынан иртә тыуған балаларҙың ыңғай үҫешенә йоғонто яһай ала... Сирленең хәленә ҡарап, музыка еңелсә гимнастика төрҙәре менән шөғөлләнергә ярҙам итә.

Стенфорд университетының медицина факультетында тәжрибә үткәргәндәр: һигеҙ аҙна буйына бер төркөм ауырыуҙарға улар яратҡан музыка өлгөләрен тыңлатҡандар. Икенсе төркөмгә бындай мөмкинселек бирелмәгән. Билдәле бер ваҡыт үткәс, беренсе төркөм ауырыуҙарҙың депрессия хәленән тулыһынса сыҡҡанлығы асыҡланған. Икенсе төркөмдә иһә хәл ыңғай яҡҡа бөтөнләй үҙгәрмәгән. Химиотерапия алыусы сирлеләрҙең күңеле болғаныуы кәмеүе күҙәтелә. Табиптар фекеренсә, йоҡоһоҙлоҡ менән сирләүсе кешеләрҙең күпселеге классик музыка өлгөләрен тыңлаһа, тиҙерәк йоҡоға тала.

Хоҙай Тәғәлә беҙгә ишетеү һәм һөйләү һәләтен биргән һәм был илаһи бүләк менән кеше мөмкин тиклем һағыраҡ эш итергә тейеш: матур һүҙҙәр һөйләргә, ыңғай, талғын музыка тыңларға, рухи, физик яҡтан гармоник үҫешергә...

ФӘҺЕМ ӨСӨН

## Ҡурай моңо мөғжизәһе

Борон-борон заманда бер батшаның берҙән-бер улы һунарға китеп һәләк булған. Һунарҙа батша улы менән бергә булған хеҙмәтселәр ҡурҡыуға ҡалған: батшаға был хәбәрҙе нисек кенә әйтергә? Хәсрәтенән ни эшләргә белмәгән батша ярһып, барыһының да башын өҙөргә фарман бирмәҫме? Хеҙмәтселәр, аптырап, батша һарайына түгел, тәрән аҡылы менән дан алған ҡарт ҡурайсыға кәңәш һорорға баралар.

- Ни эшләргә инде беҙгә?- тип аҙарына хеҙмәтселәр.- Берҙән-бер улын һаҡлап ҡала алмағанға батша баштан һыйпамаҫ бит инде!

- Батша улының тәҡдире шулдыр. Хәҙер күҙ йәше ҡойоуҙан фәтеүә юҡ. Был хәбәрҙе үҙем еткерермен,- ти уларға ҡарт ҡурайсы. Бергәләшеп батша һарайына китәләр. Бер нәмә лә һиҙенмәгән батша уларҙы ҡаршы алырға сыға. Ошо мәлде ҡарт ҡурайын алып, моңһоу көй уйнай башлай. Көйҙө һағайып ҡына тыңлап торған батша ҡапыл барыһын да аңлап, илап ебәрә. Ҡурайҙан ағылған моң кешегә ҡайғылы хәбәрҙе бик һаҡ ҡына еткереү менән бер рәттән, хеҙмәтселәрҙең йәнен дә һаҡлап ҡала.

***Көләү һәм ҡыуаныу тормош муллығы өсөн маҡтау һәм рәхмәт әйтеү сараһы булып тора. Беҙҙең тормошто символлаштырып торған ҡом сәғәтен яртылаш тулы һәм буш итеп ҡабул итергә була. Беҙ үҙебеҙ ошо ике тороштоң береһен һайлайбыҙ.***



МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки ен-пәрей, шайтандар йәнәш йәшәйме?

**Кешелек йәшәгән донъянан тыш йәнәш донъялар барлығы һәр кемгә билдәле. Унда йәшәгән йән эйәләре, уларҙың тереклек итеүе, йәшәү формалары күп төрлө. Был заттарҙың ҡайһылары зарарлы, яуыз, икенселәре кешегә зыянһыҙ йәшәй. Улар кешегә күренмәй, йәки үҙ теләктәре менән генә кешегә күренә ала. Кешенең был заттарға ҡаршы торорлоҡ көсө юҡ. Берҙән-бер сара - доғалар. Улар һаҡлаған кешене ен ҡағылыуҙан. Әйткәндәй, кеше ошо йән эйәләренә төрлө исемдәр биргән, зарарлы булыу-булмау кимәлен белгән. Шул нигеҙҙә тейешле доға ҡулланған. Ҡайһы берҙә кешене белгән доғалары ғына ҡотҡара алмаған: ваҡытында сараһын күрмәһә, үлемгә дусар булған. Ошо мәлдә ул муллаға барған. Ул тейешле доғалар уҡып, төрлө ысулдар менән дауалап, өшкөрөп, аяҡҡа баҫтырған. Муллаларҙың да төрлөһө булған. Араларында Шәмиғол хәлфә кеүектәре ен ҡағылыуҙы бик уңышлы дауалаған. Ысын экстрасенсҡа хәҙер һәр кем ышана. Уларҙың мөмкинлектәре мөғжизә кеүек. Көслө муллалар күрәҙәлек итеү, сит заттарҙы күреү һәм уңышлы көрәшеү сараларын белгән. Халҡыбыҙ араһында улар байтаҡ. Үҙҙәренең изгелектәре, ҡылған яҡшылыҡтары менән кеше хәтерендә ҡәҙерләп һаҡлана, улар өлгөһө һәр кемгә юл яҡтырта.**

**Кешеләр йәшәү дәүерендә йәнәш донъя йән эйәләре менән даими осрашып йәшәгән: берәүҙәрен үҙ күҙҙәре менән күргән, икенселәрен ҡолаҡтары менән ишеткән. Берәүҙәренән ҡурҡҡан, икенселәренән ҡурҡмаған, сөнки зыяны теймәҫен белгән. Ошо осрашыуҙар халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында ла сағылыш тапҡан.**

**Йәнәш донъя вәкилдәренә арналған жанрҙың үҙ исеме лә булмай, тикшерелмәй ҙә. Үткән быуаттың 70-се йылдарында ғалимдарыбыҙ Ф. Нәҙершина һәм Ә. Сөләймәнов уларҙы өйрәнеп, хөрәфәти хикәйәләр тигән исем бирҙе һәм юҡ-барға ышаныуҙан тыуған ижад емеше итеп баһаланы. Хөрәфәти ышаныуҙарға бәйле хикәйәләр һәм унда сығыш яһаусы мифик заттар кеше фантазияһы тарафынан тыуҙырыла, тип иҫәпләнде, йәғни һөйләүсе үҙ фантазияһы кәүҙәләндергән заттарға шул тиклем ышана, хатта уларҙы ҡәтғи рәүештә бар, тип раҫлай. Йәнәш донъя вәкилдәрен инҡар итеүҙең нигеҙе дин ине. Совет осоронда атеизм иғлан ителгәс, дингә бәйле бөтә нәмә уйҙырма тип һаналды. Дин эҙәрлекләнгәс, күренмәгән донъя вәкилдәре мифик заттар рәтенә ҡуйылды, һөйләүсе хәбәре ысын тип ҡабул ителмәне, киреһенсә, көлкөгә дусар булды. Ысын булһа ла кеше ышанмаҫты һөйләмә, тигән хәбәр шунан тыуғандыр тип фаразларға кәрәк. Ошо тыйыу арҡаһында үҙаллы йәшәүгә хоҡуҡлы жанр көләмәс рәтенә ҡуйылды. "Ҡурҡҡанға ҡуш күренә" кеүегерәк ҡабул ителде.**

**Хәҙерге асыҡлыҡ, демократия осоронда дини тыйыуҙар бөттө. Халҡыбыҙ әкренләп дингә кире ҡайта. Һөҙөмтәлә дингә бәйле персонаждар ҙа аяҡҡа баҫты, уларҙың ысынлап та булыуы асыҡланды. Был турала матбуғатта ла, телетапшырыуҙарҙа ла күп һөйләнелә. Бер ниндәй фән дә, физик закондар ҙа аңлата алмаҫлыҡ күренештәрҙең шаһиты булабыҙ. Уларҙың күбеһен тик дини нигеҙҙә генә аңлатырға була.**

**Шулай итеп, хөрәфәти хикәйәнең нигеҙендә ниндәйҙер ысынбарлыҡ ята. Телдән-телгә күсеп, ул шымара, ҡабартыла һәм әкиәт жанрына бик яҡынлашып ҡуя. Совет осоронда, эҙәрлекләүҙән ҡурҡып, уларҙың күбеһе махсус рәүештә көләмәскә йә әкиәт күсерелде. Хөрәфәти хикәйәләрҙең һәр береһенең авторҙары бар, шуның менән ул әкиәттәрҙән айырыла. Билдәле булыуынса, әкиәттең авторы юҡ, ул халыҡтың коллектив ауыҙ-тел ижады емеше.**

**Түбәндә бирелгән хөрәфәти хикәйә өлгөләре әкиәткә нығ оҡшаған, булған хәл тип ҡарауы ла ауыр. Ләкин уларҙың авторҙары бар. Үҙем күрҙем, үҙем ишеттем тип һөйләй улар. Ышаныу-ышанмау тыңлаусының үҙенән тора.**

**Тәүге 8 хикәйә өлгөһө заманында даны таралған ҡурайсы һәм оҫта һунарсы тарафынан һөйләнелгән һәм уның тарафынан хәтерләп яҙылған. Һунарсы XIX быуат аҙағында тыуһа, улы XX быуаттың тәүге сирегендә тыуа. Мин шул ҡурайсының ейәне булам.**

## ПӘРЕЙҘӘР КҮСЕҮЕ

Ҡарт һунарсы һунарға мауығып, бик һуңға ҡала һәм йәйләүҙәге бер аласыҡҡа инеп йоҡламаҡсы була. Әлхәм уҡып, аласыҡ ишеген ныҡлап бикләй ҙә йоҡларға ята. Тиҙ генә йоҡлап китә алмай. Бер ваҡыт алыҫта шау-шыу ҡуба һәм йәйләүгә яҡынлаша башлай. Бала-саға илауы, һәш тә һәш тип һыйыр ҡыуған тауыштар торған һайын асығыраҡ ишетелә башлай. Көҙ миҙгеле була һәм йылдың был ваҡытында йәйләүҙән йәки йәйләүгә ошолай һуңлап кешеләрҙең күсеп килеүе мөмкин түгел. Күскенселәрҙең кемдәр булыуы мөмкин, тип уйлап ята торғас, мосолман пәрейҙәренең урындан-урынға төндә генә күсеп йөрөүҙәре тураһында ишеткәндәрен иҫенә төшөрөп, бик нығ ҡурҡыуға ҡала. Иң көслө доғаларын уҡып, йән-яғына төкөрә, ҡороулы һыҙма мылтығын ҡулға ала. Күп тә үтмәй, шау-шыу тамам яҡынлаша, шул арала кемдер ишекте бик ҡаты итеп тарта, ләкин ул бирешмәй, сөнки ишек доғалар уҡып бикләнгән була. Билдәһеҙ йән эйәһе ишекте асырға маташҡан арала, шау-шыу байтаҡ алыҫлаша, ә теге ишекте аса алмауына асыуланып булһа кәрәк, нимә менәндер уға бик ҡаты итеп һуға, ләкин ишек был юлы ла бирешмәй. Шау-шыу ишетелмәй башлай, шул арала тыштағы йән эйәһенең аҙым тауыштары ла шул яҡҡа китеп юғала. Ошонан һуң һунарсы төнө буйы йоҡлай алмай доғаларын уҡый. Иртәнсәк, яҡтырыу менән, ул тышҡа сыға һәм ишек эргәһендә ятҡан кеше башы ҙурлығындай ташты күрә. Ишектә тәрән генә таш эҙен күрә, ә аласыҡ артында шаҡтай уҡ таҡыр юл барлыҡҡа килеүен күреп, аптырай. Һунарсының һөйләүенә ҡарағанда, мосолман пәрейҙәр әлхәмде һәм доғаларҙы яттан белеүсе мосолманға зыян килтермәй, әммә динһеҙ кешеләр уларҙан ҡасып ҡотола алмай. Мосолман перәйҙәренең ҡиәфәттәре кешеләрҙеке кеүек үк, тик айырма шунда: уларҙың күҙе берәү, төндә яҡтырып тора һәм маңлайының уртаһында була. Һунарсы, пәрей ишек менән булашҡан арала, уның яҡтырып торған берҙән-бер күҙен ярыҡтан асыҡ күргән. Ишеккә һуҡҡан таштың ҙурлығы үҙе үк уның көс-ҡеүәтен күрһәтә.

**Рауил АСИФОЛОВ,**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Рәхәтлектәрҙе күрә бел һәм әйт

Сығышы буйынса британка булған Дженнифер Нобль Раштыуаға бер нисә көн ҡалғас, үҙен ҡапыл яңғыҙ итеп тоя. Был ғаиләһенән меңдәрсә километр алыҫлыҡта ятҡан Ҡушма Штаттарында йәшәгән ҡатындың ире менән айырылышыуынан һуң тәүге байрамды билдәләүе була. Бик күп яңы дуҫтар табып, тормошон уңышлы ғына ҡороп ебәрһә лә, ниңәлер, был көндө үҙенә ҡарата йәлләү тойғоһо кисерә ул.

Дженнифер яңғыҙлыҡ тойғоһон яратмай, сөнки ул үҙендә яҡшы тойоу ысулын белә: "рәхмәттәр исемлеген" төҙөү. Быны ул тормошондағы рәхмәт әйтерҙәй бөтә мәлдәрҙе лә яҙып сыға һәм исемлекте төҙөгән һайын Дженниферҙың кәйефе күтәрелә бара. Рәхмәт тойғоһо уны бахыр хәленә төшөрмәйәсәген яҡшы белә ул.

Бындай күңел төшөнкөлөгөнән ҡотолоу өсөн Дженнифер уға ҡарағанда нығыраҡ мохтажлыҡ кисергә кешеләргә ярҙам итергә була. Ул урындағы приютҡа барып, байрам табыны әҙерләшә һәм ярлы балаларына уйынсыҡтар һатып ала. Беҙ ҙә, уның кеүек үк, күптән күрешмәгән яҡындарыбыҙға шылтыратып, хәлен белешеп, йәиһә уларҙың беҙгә күрһәткән изгелектәре өсөн йылы һүҙҙәребеҙҙе еткереп, бәхетле мәлдәребеҙгә рәхмәт белдерә алабыҙ.

Тормошобоҙҙағы рәхәтлектәрҙең ҡәҙерен белеү тағы ла күберәк рәхәтлектәр булдыра. Рәхмәт тойғоһон кисергән кешеләр иҫ киткес күңел тыныслығы тоя. Рәхмәтле булыу тойғоһо ярҙамында күңел бөтөнлөгө булдырған ыңғай, шатлыҡлы уйҙар уяна.

Бик күп бөйөк шәхестәр тормоштарында атҡарып сығара алмаҫтай ҡаршылыҡтар кисергән. Әгәр ҙә Бетховен үҙенең һаңғыраулығына һылтанып, йәлләү тойғоһона бирелһә, беҙ уның иҫ киткес көйҙәрен тыңлай алмаҫ инек. Йәки ағалы-ҡустылы Райттар тәүге һынау осошонан һуң был эшкә ҡул һелтәһә, бөгөн беҙҙең транспорт системаһы ниндәй булыр ине икән?

Әгәр ҙә беҙ фатихаларыбыҙҙы иғтибарға алһаҡ, насар кәйефебеҙ күтәренке кәйефкә әүерлеүе мөмкин. Көлөү һәм ҡыуаныу тормош муллығы өсөн маҡтау һәм рәхмәт әйтеү сараһы булып тора. Беҙҙең тормошто символлаштырып торған ҡом сәғәтен яртылаш тулы һәм буш итеп ҡабул итергә була. Беҙ үҙебеҙ ошо ике тороштоң береһен һайлайбыҙ. Ҡом сәғәтен яртылаш буш итеп күргәндәр яҙмышына зарлана башлай. Бөтә донъя миңә ҡаршы килде - бына уларҙың йәшәү позицияһы. Әммә рәхмәтле булыуҙы һайлағандар, моғайын да, ҡом сәғәтен яртылаш тулы итеп күрәлер, был позитив ҡараш күп нәмәне ыңғай ҡабул итергә ярҙам итә. Ни тиклем күтәренке кәйефтә булабыҙ, шул тиклем матурыраҡ күренәбеҙ. Тормошобоҙҙағы ваҡиғаларға рәхмәт тойғоһо кисергәндә, көндәлек яҡшылыҡтарҙы күреүе еңелерәк була. Кемгәлер йылмайып ҡарап, яуап итеп ҡаршы йылмайыу ҡабул итәбеҙ. Һәм был йылмайыу тормоштағы бөтә яҡшылыҡтарҙы ғына һыйҙырған, бәхет тулы йөрәктән килә.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ



### Бөйөк уяныу

*Ғәҙәттә, беҙ бөтә яҡтан камил булырға ҡурҡабыҙ.*
*Авраам Маслоу.*

Тормошта иң үкенеслеһе - был донъяла мәңге йәшәй алмау түгел, ә ысын итеп йәшәй белмәү. Күптәребеҙ иң яҡшы ҡылыҡ-сифаттарын яңылыш ҡына булһа ла күрһәтеп ҡуйыуҙан ҡурҡып, һәүетемсә генә йәшәргә тырыша. Мин шуны аңланым: бар ғиллә ҡиммәтле уйынсыҡтар алыуҙа һәм аҡса туплауҙа түгел, ә донъяны яҡшыртыу өсөн үҙеңдәге барлыҡ һәләттәреңде аса алыуҙалыр ул. Иң мөһиме, беҙҙе уратып алған кешеләр яҙмышы һәм беҙҙән һуң ҡаласаҡ эштәр бит. «Тормошоңдо бүтәндәргә бағышлағанда ғына һин үҙең өсөн йәшәйһең», тип хаҡ әйткән Лев Толстой.

Ошо ябай ғына хәҡиҡәткә төшөнөү өсөн миңә ҡырҡ йыл ваҡыт кәрәк булды. Һәр көн йәшәргә генә түгел, ә кешеләргә хеҙмәт итергә ынтылғанда һин үҙеңде уңышҡа илтәсәкһең.

Кешенең хаҡ тәғәйенләнешенә төшөнөү өсөн ярты ғүмеремде әрәм итеүемә һаман да ышанғым килмәй. Баҡтиһәң, ул үҙеңдең исемеңде гәзит-журналдың тәүге биттәрендә күреү ниәте менән бөйөк эштәр башҡарыуҙа түгел, ә ысын күңелдән ябай, әммә яҡшы эштәр башҡарыуҙа икән. Был тормош хәҡиҡәте миңә еңелдән бирелмәне.

Ошоға тиклем мин үҙ амбицияларыма шул тиклем томаланып йәшәгәнмен, хатта тормошомдағы иң ҡәҙерле нәмәләрҙе күҙ уңынан сығара яҙғанмын. Ҙур ләззәттәр артынан ҡыуып, тормошобоҙҙо йәмләндереүсе бәләкәй генә шатлыҡтарҙы ла һиҙмәгәнмен. Минең ҡырҡмаһа ҡырҡ эштән башым ҡайнағанда, йөрәгем рухи талсығыу кисерә ине. Йәшермәйем: тыштан мин бәхетле күренһәм дә, эске донъямда мин бәхетһеҙ булдым. Бәхет - ул яҡшы автомобилдә йөрөү, яҡшы йортта йәшәү, яҡшы эштә эшләү, тигән иҫке традицияларҙа тәрбиәләнгән кеше мин. Кешеләрҙе күңел киңлеге һәм ихтыяр көсө буйынса түгел, кеҫәләренең ҡалынлығына ҡарап баһаланым. Быға, бәлки, мине уратып алған кешеләр ҙә сәбәпсе булғандыр. Беҙ барыбыҙ ҙа ҡәҙерле минуттарыбыҙҙы директор креслоһына, мөһабәт йортҡа илтеүсе уңыш баҫҡысына арнаныҡ. Беҙ барыбыҙ ҙа билдәле, ихтирамлы булыу тураһында хыялландыҡ. Беҙ әкиәттәгеләй байлыҡ тураһында хыялландыҡ.

